ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 октябрь (карасай) 2015

№43 (669)

Золотой фонд прессы 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тоғроларҙың анттары...**

лайыҡлы баһаланды



5

**Өфөбөҙҙә боронғо Өфө сағылышы**



7

**Ғаиләлә тәртип булһа,**



Ер шарында ла эштәр көйлө була 8-10

**Бейеүсе булып тыуалар...**



11

**ТВ-программа** 14

***"Дошмандарыңдан ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һине үлтерергә мөмкин. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һиңә хыянат итергә мөмкин. Битарафтарҙан ҡурҡ - улар үлтермәй ҙә, хыянат та итмәй, әммә донъялағы бар хыянаттар һәм үлтерештәр уларҙың өнһөҙ ризалығы менән ҡылына".***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйыл 21 ноябрҙә IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы буласаҡ. Ҡоролтайға әйтер һүҙегеҙ ни булыр?

***Хәбирйән ТАҺИРОВ, Ҡыйғы район башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе:*** 1995 йыл I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында үҙ районымдан делегат булып ҡатнашыуым, халҡыбыҙҙың ул саҡтағы дәрте, әүҙемлеге, шундайын бер рухи күтәрелеш бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Тәүге йыйында бик күп матур һәм эшлекле резолюциялар ҡабул ителде, ләкин илдә тормоштоң үҙгәреп китеүе сәбәпле, ҡайһы бер ҡарарҙар үтәлмәйенсә ҡалды. Әлеге көндә Ҡоролтай алдында торған төп бурыс тип мин милләтте тәрбиәләү мәсьәләһен әйтер инем. Был бигерәк тә йәштәребеҙгә ҡағыла. Үҙ милләтебеҙ менән ғорурланыу юҡ хәҙер. Ғорурлана белмәйбеҙ. Ә бит әлеге тәүге йыйыныбыҙҙа ниндәйен дә рухи бейеклеккә өлгәшкәйнек. Башҡорт теленә, тарихына, шәхестәренә ҡыҙыҡһыныу артты. Милләт йылъяҙмаһы, үҙенсәлекле бер ҡамусы булған "Урал батыр" эпосыбыҙ донъя халыҡтары телдәренә тәржемә ителде. Хатта ки ЮНЕСКО-ны яулауға тиклем барып еттек... Ә бөгөн нимә күрәбеҙ? Туған телебеҙҙе юғалтыу хәүефе алдына килеп баҫтыҡ түгелме? Шәжәрәбеҙҙе лә онотторҡ. Ауыр тормоштан миктәгән ир-егеттәребеҙ иленән айырылып, Себер китеп бөттө, улар иленән, тыуған еренән алыҫлашты, ситләште. Милли мәғарифтағы көрсөк милли интеллигенцияның юҡҡа сығыуына килтерҙе. Төрлө өлкәләрҙә ҡаҙаныштарға өлгәшкән арҙаҡлы шәхестәребеҙ, лидерҙарыбыҙ ҡайҙа бөгөн? Бына ниндәй һорауҙар борсой мине. IV Ҡоролтайҙың проблемаларыбыҙҙы асып һалыуын, милләтебеҙ рухын тергеҙеү буйынса етди һөйләшеү башлауына өмөт итәм. Отчет өсөн генә йыйылышып таралыу булмаһын ине сираттағы ҡоролтай...

***Кадир МӘҒӘФУРОВ, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор:*** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының төп маҡсатын мин халҡыбыҙҙы һаҡлауҙа һәм яҡлауҙа күрәм. Бөгөн беҙҙе иң борсоуға һалған мәсьәлә - ул халыҡ һанының бермә-бер кәмей барыуы. Ҡоролтайға әйтер һүҙем ошо хаҡта булыр шуға ла: уның эшмәкәрлеге, төп бурысы милләттәштәребеҙҙе, уны һан һәм сифат яғынан һаҡлауға йүнәлтелгән булырға тейеш. Халыҡтың кәмей барыу сәбәптәрен өйрәнергә, асыҡларға һәм ошо йүнәлештә ура-тып-суратып, ситләтелгән телмәр менән түгел, ә асыҡтан-асыҡ эш алып барырға кәрәк. Беҙҙең халыҡ һанының кәмеү сәбәптәренең береһе - уның әүҙем рәүештә ассимиляцияға дусар ителеүе, тип иҫәпләйем. Шуныһы ныҡ хафаға һала: икенсе милләт йоғонтоһона бирелеү бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, тып-тыныс һәм һәүетемсә бара бит! Бының сәбәптәрен ғаилә мөхитенән дә, мәктәп тәрбиәһенән дә эҙләргә мөмкин, әлбиттә, ләкин бына ошо сәбәптәрҙе иҫкәртеү юлдарын ғәмәлгә индереп, милли үҙаң тәрбиәләү механизмдарын эшкә ҡушыу юғарыға үтенес хаттары һәм шуның кеүек торошҡа ашмаҫ петициялар яҙып ултырыуға ҡарағанда күпкә ҡыйыныраҡтыр, әлбиттә. Ҡоролтай эш планының иң тәүге пункты итеп бына ошо бурысты билдәләһен дә, уны кисекмәҫтән атҡара ла башлаһын ине, тип теләйем мин. Был, берҙән, халыҡ араһында Ҡоролтайҙың абруйын күтәрер ине. Унан ҡала урындағы власть органдары алдында ла Ҡоролтай һүҙен үтемлерәк итеү өсөн тырышырға кәрәктер, тигән теләктәмен.

Тағы бер мәсьәлә: мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу проблемаһына, минеңсә, Ҡоролтайҙың туранан-тура ҡыҫылышы булырға тейештер бит? Ниңә был йүнәлештә ныҡышмалыраҡ талаптар ҡуймаҫҡа? Бәлки, ниндәйҙер эштәр, ынтылыштар барҙыр ҙа был тарафтан, тик йәмәғәтселеккә ул мәғлүм түгел. Әйткәндәй, тел белгесе булмаһам да, был йәһәттән үҙемдең бер фекерем бар ине: башҡорт телен баланы ҡағиҙәләр, килештәр, ялғауҙарҙан өркөтөрлөк итеп түгел, ә уларҙы һөйләшергә, үҙ-ара аралашырға өйрәтеп, уйын рәүешендә ҡыҙыҡлы итеп алып барғанда, бындай дәрестәрҙән бәрәү ҙә баш тартмаҫ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СОЧИҘЫ ЛА УҘЫП КИТКӘНБЕҘ...

**Өфө тормош сифаты буйынса Рәсәйҙең иң ҙур 100 ҡалаһы рейтингында тәүге бишәү иҫәбенә инде.**

Санкт-Петербургта XIV "Рәсәй төбәктәрендә һәм ҡалаларында стратегик планлаштырыу: һайлау урыны һәм урынды һайлау" дөйөм Рәсәй форумында 2014 йылға Рәсәйҙең иң ҙур 100 ҡалаһы интеграль рейтингы иғлан ителде. "Өфө үҙенең рейтингын яҡшыртты һәм 2013 йыл менән сағыштырғанда дүрт баҫҡыска - һигеҙенсенән дүртенсе урынға күтәрелде. Башҡортостандың баш ҡалаһы Сочи (5 урын), Екатеринбург (6), Ҡаҙан (17), Һамар (21), Омск (44), Силәбе (45) кеүек ҙур ҡалаларҙы уҙып китте. Сорғот, Краснодар һәм Төмән лидерҙар рәтендә килә", - тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

Рейтингты Рәсәйҙең Архитекторҙар союзы менән берлектә Санкт-Петербургтағы "Урбаника" территориаль планлаштырыу институты төҙөгән. Тикшеренеүҙәр барышында торлаҡ менән тәьмин ителеү, заманса ҡулланыу алымдары, ҡала юлындағы көсөргәнешлек, енәйәтселек, яҡтыртылыу кимәле, тәбиғәт шарттары, төҙөклөк һәм экологик бысраныу дәрәжәһе иҫәпкә алынған.



Өфөләге Holiday Inn отеле.

12+

✓ *Дөйөм мәҙәниәт булған кеүек, һәр беребеҙҙә һаулыҡ мәҙәниәте лә булырға тейеш. Был урында һаулыҡ кимәленең 10 проценты ғына медицина һәм табиптарға бәйле , ҡалған 90 проценты һәр кемдең үҙ һаулығын ҡайғыртыуынан тора.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҺАУЛЫҒЫБЫҘҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Наил ҒАБДУЛЛИН, медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостан һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған табибы, оториноларинголог:** Табип булараҡ, милләттәштәргә үҙебеҙҙең һаулыҡты һаҡлау мөһимлеге тураһында тағы бер ҡат иҫкәртмәксемен. Медицина фәненең һәм дауалау технологияларының һиҙелерлек алға китеүенә ҡарамаҫтан, сырхауҙар һаны кәмеү түгел, йылдан-йыл артып ҡына тора. Әлбиттә, ауырыуына ҡарап, сәбәптәре лә күп төрлө. Шулай ҙа төп сәбәп кешенең үҙ һаулығына ҡарата мөнәсәбәтенән тора. Дөйөм мәҙәниәт булған кеүек, һәр беребеҙҙә һаулыҡ мәҙәниәте лә булырға тейеш. Был урында һаулыҡ кимәленең 10 проценты ғына медицина һәм табиптарға бәйле булыуын иҫкә төшөрөү урынлы булыр, тип уйлайым. Ҡалған 90 проценты һәр кемдең үҙ һаулығын ҡайғыртыуынан тора. Сәләмәт тормош алып барыу (эсмәү, тәмәке тартмау), ғаиләлә һәм эштә гигиена талаптарын күҙәтеү, туҡланыу, хеҙмәт һәм ял тәртиптәрен яйға һалыу, мөмкин тиклем стресстарға юл ҡуймау мөһим. Һәр сирҙең башланыу ваҡыты була. Шуға күрә, организмда ниндәйҙер үҙгәрештәр, ауыртыныуҙар, һыҙланыуҙар тойоу менән сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Әлбиттә, дауаханала табип һауығыу юлдарын әйтергә, кешене тынысландырырға тейеш. Әммә күптәребеҙ аяҡтан йығылмайынса, дауаханаға барырға ашыға һалмай. Кешенең үҙ һаулығына күҙ йомоп, донъя мәшәҡәттәрен өҫтөн ҡуйыуы һөҙөмтәһендә һауығыу ышанысы нығ кәмей.

Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, ябай ғына бер миҫал килтерәйем. Грипп, ОРЗ сирҙәре менән ауырығанда тауыш бөтә һәм дауаланыу барышында был хәл 10-12 көндән үтә. Тауыш ҡарлығыуы ошо ваҡыттан күберәккә һуҙыла икән, отоларингологҡа күренеп, бының сәбәбен асыҡларға кәрәк. Сөнки ҡайһы бер осраҡта оҙаҡҡа һуҙылған тауыш ҡарлығыуы тамаҡтағы яман шеш һөҙөмтәһе булыуы мөмкин. Бына ни өсөн баяғы телгә алған "һаулыҡ мәҙәниәте" тигән төшөнсә һәр кемдең аңына, тәрбиәһенә һалынырға тейеш. Ябай ғына күренгән тауыш ҡарлығыуы осрағында ла хатта "Үтәр әле", тип, сәләмәтлегеңә вайымһыҙ ҡарарға ярамай. Табипҡа ни тиклем тиҙерәк күренеп, тейешле дауа алһаң, шул тиклем ҡурҡыныс сирҙе киҫәтеп өлгөрәһең. Һаулыҡтың ысынлап та ҙур байлыҡ икәнен һәр ваҡыт иҫтә тотайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Быйыл 21 ноябрҙә IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы буласаҡ. Ҡоролтайға әйтер һүҙегеҙ ни булыр?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлмән ЯРМУЛЛИН, "Аманат"журналының баш мөхәррире, Ш.Бабич һәм Ш.Хоҙайбирҙин премиялары лауреаты:*** Заманыбыҙ тынысһыҙ бөгөн. Әйләнә-тирәбеҙҙә төрлө сәйәси ваҡиғалар, үҙгәрештәр, һәр төрлө реформалар булып ята. Ошондай мәлдәрҙә теге йәки был ваҡиғаға ҡарата халыҡ фекере, уның выжданы булып Ҡоролтай сығыш яһарға, уның һүҙе яңғырарға тейеш, ә беҙҙә - шып-шым. Әйтерһең дә, башҡорт ауылдарында мәктәптәр ҙә, медпункттар ҙа ябылмаған, рухи һәм тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙға ла яҫҡынмайҙар, телебеҙҙе лә тыймайҙар... Республикабыҙ байрамы - суверенлыҡ яулаған көн дә һиҙелмәй генә үтеп китте. 25 йыллығы бит әле, ни тиһәң дә! Ҡоролтайҙың халыҡҡа әйтер һүҙе юҡ инеме ни ошо юҫыҡта? Үҙәк менән килешеү төҙөп, вәкәләттәрҙе ҡайтанан ҡарау кәрәкмәйме икән республикабыҙға? Көндәлек ваҡ мәшәҡәттәр менән сырмаланып, республикабыҙ статусы әһәмиәтен онотоп барабыҙ һымаҡ тойолмаймы һеҙгә, йәмәғәт? Ниңә был хаҡта ҡыйыуһыҙ ғына, бер һөйләм менән генә ваҡытлы матбуғат баҫмаһы һүҙ ҡуҙғатырға мәжбүр? Уның вәкәләтлеге бармы быға? Бер заман шулай үҙ инемә күберәкте йөкмәргә мәжбүр булып, яуап көнө килгәс, судья миңә тап ана шул һорауҙы биргәйне. Журналистар түгел, Ҡоролтай башлап күтәрергә тейеш түгелме ни өтөп алып барған көнүҙәк мәсьәләләрҙе? Ә беҙҙә йыш ҡына киреһенсә килеп сыға.Ҡололтайҙың, исмаһам, ундай һорауҙарға аяҡ терәп яуап бирер әмәле бар, сөнки ул легитимлы рәүештә һайланған орган. Уны бөтөн донъялағы башҡорт халҡы һайлап ҡуйған. Тимәк, ул алдан атларға, халҡына юл күрһәтергә, һәр дайым авангардта барырға тейеш, юғиһә бит башҡаларға "туҡмалырға" тура килеүе лә бар...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**




● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Сентябрҙә 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Силәбе өлкәһе губернаторы Борис Дубровский менән эшлекле осрашыуы булды. Төбәктәр араһында эшлекле һәм мәҙәни хеҙмәттәшлекте нығытыу мәсьәләләре тикшерелде. Рәсәй төбәктәре араһында Силәбе өлкәһе Башҡортостан өсөн мөһим сауҙа партнеры һанала. Башҡортостандан күрше төбәккә дизель яғыулығы, автомобиль бензины, картон, ҡағыҙ, минераль һәм химик ашламалар, ит һәм колбаса, һөт продукцияһы, минераль һыуҙар оҙатыла. Силәбенән беҙгә ҡара металл прокаты, төҙөлөш материалдары, йөк автомобилдәре, йыһаз, үҫемлек майы, һыра, он, ярма, макарон, кондитер изделиелары, аяҡ кейеме килтерелә.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ШОС һәм БРИКС илдәренең Беренсе бәләкәй эшҡыуарлыҡ форумында ҡатнашыусыларҙы сәләмләне. "Өфөгә Рәсәйҙең 51 төбәгенән, донъяның 21 иленән 1,5 мең кеше килде. Тәү сиратта тәүге форумдың нисек үтәсәген ҡарау, икенсенән, партнерҙар табыу, өсөнсөнән, эшҡыуарлыҡ менән ҡыҙыҡһыныусылар араһында эшлекле бәйләнештәр булдырыу маҡсаты менән", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓ Өфө Рәсәйҙә мосолман мәғарифын үҫтереү буйынса комплекслы программаны ғәмәлгә ашырыу үҙәктәренең береһе булып тора. Республиканың баш ҡалаһында илебеҙҙең ошо өлкәләге иң яҡшы традицияларын дауам итеүсе Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй ислам университеты, мәҙрәсә уңышлы эшләй. Башҡортостан Башлығының "XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" VIII Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында ҡатнашыусыларға мөрәжәғәтендә һүҙ ошо хаҡта бара. Уны республика Башлығы Хакимиәте Етәксеһе урынбаҫары Максим Михайлов уҡып ишеттерҙе.

✓ 2020 йылда Өфөлә Бөтә донъя фольклориадаһы ойошторыласаҡ. "Совет фестивалде Башҡортостанда үткәреүҙе бер тауыштан хупланы", - тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов. Сара асылғас, төрлө илдәрҙән килгән ҡунаҡтар республика буйлап таралсаҡ, барлыҡ ҡалаларҙа, муниципалитеттарҙа фестиваль саралары үтәсәк, тип билдәләне ул. Республика Башлығы ойоштороусыларҙан фестивалде һабантуйҙар мәленә тура килтереүҙе һорауҙарын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Ойоштороусылар ҡаршы килмәне", - тине Рөстәм Хәмитов.

✓ Бер айға 90 һум 96 тин килеп сыға. Айлыҡ яҙылыу хаҡын 30 көнгә бүлһәк, көндәлек рухи аҙыҡ 3 һум да 03 тин генә тора булып сыға. Ә бит был ҡатындың сәйнәгән һағыҙы магазинда 18 һум тора.



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БАР СӘБӘП - ҮҘЕБЕҘҘӘ




**Һуңғы ваҡытта аңһатҡа һалындыҡ: беҙҙең өсөн һәр ваҡыт кемдер уйларға, бойороҡ, фарман төшөрөргә, күрһәтмә бирергә, килеп эш күрһәтергә, әйҙәргә, саҡырырға тейеш. Һәм һәр ваҡыт кемдер ғәйепле...**

Мәсәлән, беҙҙе бер кем дә үҙ телебеҙҙән баш тартырға, һөйләштермәскә мәжбүр итә алмай. Үҙебеҙ вайымһыҙ маңҡорттарға әйләндек. Саф башҡорт ауылында ла нисек һөйләшкәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр: "сдавать итте", "покупать итте", "копать итте", "маман", "папаң" һ.б. Иғтибар итегеҙ, бер йәштәр генә түгел, хатта урта йәштәгеләр ҙә, өлкән сал сәсле апай-ағайҙарыбыҙ ҙа ошолай мәғәнәһеҙ итеп һөйләшә. Ә ғәйепте мәктәптә, уҡытыусыларҙа эҙләйбеҙ. Тағы берҙе ҡабатлайым: үҙебеҙ вайымһыҙ бәндәләргә әйләндек. Ә инде уҡытыусыларға, яҙыусыларға, журналистарға һәм Вячеслав Черневҡа, киреһенсә, телде һаҡлап ҡалырға тырышҡандары өсөн рәхмәт кенә әйтәһе ҡала.

Совет осоронда булған уҡытыу системаһын иҫкә алмайынса булмай. Яҡшы яҡтан, әлбиттә. Мәктәптә тулыһынса башҡортса ғына уҡығандар араһында аҙмы ни профессор, ғалим булып киткәндәр! Шулай уҡ ун йыл буйы рус класында уҡығандарҙың барыһы ла юғары белемле белгестәр, ғалимдар булып китмәне. Барыһы ла кешенең тырышлығынан тора. Әгәр бала уҡыуҙа тырыш икән, уның ниндәй телдә белем алыуы мөһим түгел, ул барыбер бар предметтан да яҡшы өлгәшәсәк. Ә инде башҡорт телен өйрәнеү-өйрәнмәү, уҡытыу-уҡытмау тигән һорау бөтөнләй булырға ла тейеш түгел, тип, "Киске Өфө"ләге диалогта ("Халыҡты халыҡ иткән тел..." №34) ҡатнашыусы Р. Әҡсәнова һүҙҙәрен ҡеүәтләп ҡуям. Русса нисек кенә яҡшы һөйләшһәм дә, мин рус булып китә алмайым, сөнки ҡанымда, йөҙөмдә, холҡомда башҡортлоҡ бар!

Тағы шул: төрлө дәрәжәле етәкселәребеҙгә үҙ туған телен белеү мотлаҡ булырға тейеш. Иғтибар итегеҙ: берәй татар телле етәксе телевидение-радионан интервью бирһә, теле телгә йоҡмай, ә башҡорт телле етәксе иһә ыҙалай-ыҙалай, этә-төртә, рус һүҙҙәрен ҡыҫтыра-ҡыҫтыра көскә фекеренең осона барып сыға. Күләп тыңларҙамы, әрнепме? Үҙ милләтенә, теленә ҡарата әҙ генә булһа ла һөйөү булырға тейеш тә инде. Кешенең туған телендә лә, рус телендә лә яҡшы һөйләшеүенә, ғөмүмән, матур итеп телмәр ҡора белеүенә саҡ ҡына булһа ла иғтибар итергә кәрәктер ул уны етәксе вазифаға тәғәйенләгәндә. Совет заманында шул ҡағиҙә ҡүҙәтелде түгелме һуң?

Быуаттар буйы һаҡланып килгән телебеҙгә хәҙер килеп яклау кәрәк! Ҡолаҡҡа ятмаған буш һүҙ кеүек яңғырай былар, әммә ләкин ни бары бер 30-40 йыл етте беҙгә шундай көнгә ҡалырға. Хәҙерге ваҡытта беҙгә илһөйәрлек тойғолары етмәй шикелле. Беҙ ниндәйҙер киҫкен хәлдәрҙә генә ойошҡанлыҡ, берҙәмлек күрһәтергә тотонабыҙ. Ә тормошобоҙ әүҙем, һәүетемсә генә киткәйне, ваймһыҙлыҡ һаҙына бата башланыҡ. Был күренеш тел мәсьәләһендә генә түгел, һәр бер өлкәгә ҡағыла. ГТО-ны кире ҡайтарған кеүек, элекке илһөйәрлекте үҫтергән сараларҙы, уҡытыу системаһын кире ҡайтарыу (әлбиттә, заманса үҙгәрештәр индереп), яңыртыу, бәлки, дөрөҫ булыр ине.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә. Телевидение хәҙер кеше тормошонда бик ҙур роль уйнай. Бына беҙҙең Башҡортостан юлдаш телевидениеһында ла "Башҡорт телен өйрәнәм", "Башҡорттар", "Алтын тирмә" кеүегерәк тапшырыуҙар күберәк булһын һәм уларҙы кистәрен, кеше эштән ҡайтып, бушап, телевизор янына ултырған ваҡытта сығарһындар ине эфирға. Юҡһа, йәшереп кенә, ял көндәрендә, кешеләр баҡсаһында эшләгән йә сауҙа залдарын ҡыҙырған мәлдә генә ҡуялар уларҙы эфирға. Был һис аңлашылмай.

Аллаһы Тәғәләгә бер халыҡты икенсеһе менән алыштырыу бер ни тормай. Үҙ балаларебеҙҙә үҙебеҙ генә ғәйепле икәнде, һәр беребеҙ үҙ урыныбыҙҙа халҡыбыҙ, телебеҙ, рухиәтебеҙ, республикабыҙ өсөн ниндәйҙер файҙалы эштәр башҡарырға тейешлегебеҙҙе аңлаһаҡ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һаҡлаһаҡ, халыҡ булып ҡалырбыҙ, юғалып ҡалмаҫбыҙ. Шуға ынтылайыҡ, йәмәғәт!

**Зәлифә ЗӨЛҠӘРНӘЙЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ҺАҒЫҘ СӘЙНӘГӘНСЕ...

**Бер ҡатын менән гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡында һөйләшеп торҙоҡ. "Яҙылыу хаҡтары бигерәк ҡыйбат", тип зарланды ул, үҙе һыйыр көйшәгән кеүек туҡтауһыҙ һағыҙ сәйнәй...**

Әйҙәгеҙ әле уйлап ҡарайыҡ, шулай уҡ ҡыйбатмы икән был рухи аҙыҡ? Мәсәлән, "Киске Өфө" гәзитенә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 545 һум 76 тин. Ҡыйбатмы? Улайһа, шул һанды алты айға бүләйек. Бер айға 90 һум 96 тин килеп сыға. Айлыҡ яҙылыу хаҡын 30 көнгә бүлһәк, көндәлек рухи аҙыҡ 3 һум да 03 тин генә тора булып сыға. Ә бит был ҡатындың сәйнәгән һағыҙы магазинда 18 һум тора. Көн һайын бер ҡап һағыҙ сәйнәһә лә, бер айҙа 540 һумын шуға тотона булып сыға. Ҡайһы айҙарҙың 31 көндән бөткәнен дә иҫәпкә алһаҡ, был ҡатын бер айҙа ярты йылға "Киске Өфө"гә яҙылыу хаҡын сәйнәп-төкөрөп китә, тигән һүҙ.

Әйҙәгеҙ, милләттәштәр, яҙылығыҙ гәзиткә, йәлләмәгеҙ көндәлек 3 һум да 03 тин аҡсағыҙҙы.

*Ҡыйбат-ҡыйбат, тиеп һөйләп,*
*Ултырғансы һағыҙ сәйнәп,*
*Һатып ғәйбәт -*
*Яҙылығыҙ "Киске Өфө"гә,*
*Ғаиләңә булыр һәп-һәйбәт!*

Ошо ғына ине әрнеп әйтер һүҙем...

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылы.**

*БАШ ЙОРТТА*

# ҮҘГӘРТЕҮҘӘРҘЕ...
## мотлаҡ исемдән башларғамы?

Өфө - республика халҡы өсөн сәйәси, иҡтимағи, мәҙәни үҙәк булып тора. Нәҡ баш ҡала ағынан килгән яңылыҡтарға ҡолаҡ һалып, унда барған хәл-ваҡиғаларҙы күҙәтеп донъя көтә бар Башҡортостан. Республиканың төрлө төбәгендә йәшәгәндәр өсөн Өфөгә барып ҡайтыу үҙе бер ҙур байрамға әүерелә. Шуға күрә бер кем дә быңдай мөмкинлекте ҡулынан ысҡындырмайҙыр, тип уйлайым. Минең үҙемә лә күптән түгел Өфөбөҙгә барып, уның матурлығына һәм зауығына һоҡланып, бер нисә концерт ҡарап ҡарап, күңелемде байытып ҡайтыу бәхете тейҙе. Тик бер аҙ күңелдә ҡырған күренештәр ҙә булды. Шулар хаҡында гәзит уҡыусыларға бәйән итмәксемен.

Өфөлә даими йәшәүселәр, бәлки, баш ҡала йөҙөндә барған үҙгәрештәрҙе һиҙмәйҙер ҙә, ләкин минә, бер нисә йылға бер тапҡыр ғына килеүсегә, улар шунда уҡ күҙгә ташлана. Ҡалаға ингән ерҙә уҡ тығындың ҙур булыуы Өфөнөң ниндәй шәп темптар менән үҫеүе, халҡының ишәйеүе тураһында асыҡ әйтеп бирҙе. Ҡала архитектураһы ла бер урында тормай - һәр урамда тиерлек үҙенсәлекле, әммә шул уҡ ваҡытта Өфө йөҙөнә тура килеп торған биналар ҡалҡып сыҡҡан. Ҡала халҡына ял итеү урындарының да күп булыуы хайран ҡалдыра: төрлө парктар, ундағы фонтандар, аттракциондар, күҙәтеү тәгәрмәстәре, аквапарк - рәхәтләнеп ваҡыт үткәрергә мөмкин.

Ә оҡшап етмәгән күренештәргә килгәндә инде, түбәндәгеләрҙе билдәләп үтәм. Мәсәлән, электән өйрәнгән "Башҡортостан" атамаһын күп урындарҙа "Башкирия" тип үҙгәртеп бөтөүҙәре ҡолаҡҡа ла ятмай, яңыса әйтке лә килмәй. Ни өсөн ниндәй ҙә булһа үҙгәртеүҙәр мотлаҡ рәүештә исемде боҙоуҙан башлана икән ул? Был атамаларҙы үҙгәртер алдынан баш ҡала халҡының фекерен өйрәнделәрме лә, уның теләгенә ҡаршы килмәнеләрме икән, тигән һорау тыуа.

Өфөлә төрлө ваҡиғаларға, арҙаҡлы шәхестәргә арналған алтаҡталар, һәйкәлдәр, бюст һындары бихисап. Тик уларҙың кеше күп йөрөгән урында урынлашҡандарын ғына ҡарап-тәрбиәләп торған кеүектәр. Ә урындары күҙҙән ситтәрәк булғандарының "яҙмышы" көнләшерлек түгел - улар ваҡыт үтеү менән төҫтәре бурыҡланып, яҙыуҙары уҡый алмаҫлыҡ булып бөткән. Ошо йәһәттән иғтибарҙы арттырыу мотлаҡ, минеңсә.

Баш ҡалала барған концерт һәм башҡа мәҙәни сараларҙың күплеген күреп һоҡландым. Теләк һәм мөмкинлек булғанда, көн дә матур бер мәҙәни сараға барырға була. Шәхсән үҙем Мотор эшләүселәр мәҙәниәт һарайында һәм Йәштәр һарайында үткән ҙур концертта булып, рухи көс йыйып ҡайттым. Ләкин концерт ваҡытында ҡайһы бер тамашасыларҙың үҙҙәрен тәртипһеҙ тотоуын күреү матур кисерештәргә бер аҙ шәүлә һалды. Концерт залына өс кейемендә инеп ултырыу, тамаша барышында тегеләй-былай йөрөү артиҫҡа ғына түгел, ә башҡа тамашасыларға ла ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Ауыл халҡы был йәһәттән күпкә тәрбиәлерәк икән, тигән һығымтаға килдем. Был мәҙәниәт йорттары етәкселәге артабан быңдай баш-баштаҡлыҡҡа ҡул ҡуймаҫҡа тырышыр, тип өмөтләнәм.

**Әлмира НӘБИУЛЛИНА.**
**Хәйбулла районы.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан табиптары немец коллегалары менән бергә күҙәнәкле технологиялар институты булдырырға ниәтләй. Ошо маҡсат менән Өфөгә Германияның иң билдәле иммунологтарының береһе Кай Дойш килде. Ошондай институттың барлыҡҡа килеүе кешенен ДНК-һын һәм уның тайпылыштарын ентеклерәк өйрәнергә ярҙам итәсәк.

✓Башҡортостанстаттан хәбәр итеүҙәренсә, быйылғы туғыҙ ай йомғаҡтары буйынса республикала инфляция кимәле 9,5 процент тәшкил иткән, был уҙған йылдағы күрһәткестән (6,2 процент) 1,5 тапҡырға күберәк. Аҙыҡ-түлек тип һаналмаған тауарҙарға хаҡтар 10,6 процентҡа күтәрелгән, былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда дүрт тапҡырға тиерлек артҡан. Аҙыҡ-түлек тауарҙарына (9 процент) һәм хеҙмәттәргә (8,6) хаҡтар үткән йылдағы кеүек уҡ юғары.

✓"Өфө" дәүләт ат һарайында яңы ҡымыҙ етештереү цехы асылды. Предприятие иҫәбенә төҙөлгән бинала ҡымыҙ етештереү, әҙер продукцияны һаҡлау, йыуыу һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн бүлмә бар. Учреждениеның директоры Николай Штенцев һүҙҙәренсә, цехтың төҙөлөшө предприятиеға 3,8 миллион һумға төшкән. Ҡорамалдар һатып алыуға республика бюджетынан 400 мең һум самаһы аҡса бүленгән.

✓Силәбе өлкәһе Сосновка районы Һолтай ауылында Ғәлимов Сәләм исемендәге әҙәби премия тапшырыу тантанаһы булды. Быйыл премия "Художестволы әҙәбиәт" номинацияһында - йәш автор Марат Дауытовҡа, "Журналистика" номинацияһында - "Уралым" гәзитенең баш мөхәррире Нурия Ихсановаға, "Тыуған яҡты өйрәнеү" номинацияһында "Азия менән Европа араһында", "Юлдаш-Ҡатай Нязепетровский" китаптары авторы Әсләм Арыҫлановҡа тапшырылды. Әҙәби премия 2011 йылда Сосновка районы хакимиәте башлығы Владимир Котов тарафынан булдырылды.

✓2015 йылда Башҡортостан малсылыҡты үҫтереүгә федераль бюджеттан 7,2 миллион һум аҡса аласаҡ. Документҡа ярашлы, 398 миллион һум күләмендәге субсидиялар 17 төбәккә бүленгән.

**"Башинформ"дан.**

**✔ 2011 йылдан алып уҙғарылған был сараға Өфө ҡалаһы делегацияһы даими саҡырыла һәм был беҙҙең тәжрибә федераль кимәлдә лә танылыу табыуын раҫлай. Фекер алышыуҙарҙа бик йыш Өфөнөң ыңғай тәжрибәһе телгә алына.**



АФАРИН!

# ӨФӨ ТӘЖРИБӘҺЕ...

## башҡаларҙы ла ҡыҙыҡһындыра

**Илебеҙ баш ҡалаһында урбанистика форумы үтте. Сара 3 меңдән ашыу ҡатнашыусыны йыйҙы. Форумда Бөйөк Британиянан, Испаниянан, АҠШ-тан, Италиянан, Бельгиянан, Канаданан, Германиянан 18 эксперт ҡатнашты.**

Көн тәртибенә мегаполистарҙағы тормошто яҡшыртыу, халыҡты ҡала менән идара итеүгә ылыҡтырыу мәсьәләләре сығарылды, Рәсәйҙең баш ҡалаһын үҫтереүҙең яңы юлдары проблемалары буйынса фекер алышынды. Форумдың "Рәсәйҙең ҡалалары һәм территориялары: яңы саҡырыуҙар - яңы яуаптар" махсус сессияһында РФ төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Александр Мень, Екатеринбург, Төмән ҡалаларының һәм ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендә Өфө ҡалаһы делегацияһы ҡатнашты. 2011 йылдан алып уҙғарылған был сараға Өфө ҡалаһы делегацияһы даими саҡырыла һәм был беҙҙең тәжрибә федераль кимәлдә лә танылыу табыуын раҫлай. Фекер алышыуҙарҙа күтәрелгән, бөгөнгө көн талаптарына яуап биргән идара итеү механизмдары барлыҡҡа киләме, элекке ысулдар менән идара итеү мөмкинме, тигән һорауҙарға яуап итеп, бик йыш Өфөнөң ыңғай тәжрибәһе телгә алына. Башҡа ыңғай тәжрибә менән бер рәттән, ҡалала Үҫеш стратегияһының әҙерләнеүендә лә эксперттар иғтибар бүлә. Бындай "ҡорал" ҡала идаралығының уңышлы тәжрибәһенең айырып алғыһыҙ өлөшө булып тора. Белгестәр әйтеүенсә, был Өфөнө ыңғай яҡтан ҡылыҡһырлай һәм ҡалала проблеманы хәл итеүгә системалы ҡараш формалашыуы хаҡында һөйләй. Шулай уҡ ҡатнашыусылар ҡала тураһында мәғлүмәттәр тупланыуы һәм уның анализланыуы тәжрибәһенән дә билдәләне. Бындай үҙәкләштерелгән мәғлүмәт үҙеге һәр ерҙә лә бар тип булмай. Мәскәүҙең Сколково идара итеү мәктәбе белгестәре лә Өфө тәжрибәһен билдәләп үтте.

Үҙенең сығышында Ирек Ялалов һуңғы йылдарҙа Өфөлә киң масштабта ерҙәрҙе иҫәпкә алыу үткәрелеүе, асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса эш алып барылыуы хаҡында бәйән итте. Бындай тәжрибә менән башҡа ҡалаларҙың етәкселәре лә ҡыҙыҡһынды. Бынан тыш мэр "ер аҫты ҡалаһы"ның торошона айырым иғтибар йүнәлтте. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә 5100-ҙән ашыу инженер инфрастуктураһы, инженер селтәрҙәре объекты ремонтланған. Был эштәрҙең 90 проценты инвесторҙар иҫәбенә башҡарылған.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Финанс грамоталылығы ягынан күп осраҡта наҙан булһаҡ та, бюджет тигән һүҙ менән йыш осрашабыҙ һәм уның нимә икәнен саҡ ҡына булһа ла күҙаллайбыҙ. Сөнки ғаиләлә лә һәр саҡ килемдәрҙе һәм сығымдарҙы иҫәпләп торабыҙ. Ә бюджет һүҙенә Википедия, "айырым объекттың килеме һәм сығымдары схемаһы", тигән аңлатма бирә. Ҡайһы бер осраҡта хатта ғаилә бюджетына баш була алмағанда, нисек итеп ҡала, район, республика бюджеты менән "аңлашырға", килемдең ҡайһы яҡҡа сыҡҡанын, нимәгә тотонолғанын күреп торорға мөмкин? Бөгөн кескәй генә ликбез алыу өсөн Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары, Финанс идаралығы начальнигы Илгиз Насретдиновҡа мөрәжәғәт иттек.**

# ҺАЛЫМ КҮБӘЙӘ,

## тимәк, эш хаҡы арта!



**➔ Илгиз Диҡҡәт улы, әлеге ваҡытҡа ҡала бюджетының үтәлешен нисек баһалайһығыҙ?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, илдәге, республикалағы ҡатмарлы хәл-торошҡа ҡарамаҫтан, беҙ килемде күберәк алдыҡ, быны мин мөһим мәл тип баһалайым. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда үҫеш 1,7 процент, йәғни 135 млн тәшкил итә. Дөйөм алғанда, ҡала округы бюджетына ағымдағы 9 айҙа 16 млрд 176 млн һум килем тупланған. Бюджет килеменең һалым һәм һалым булмаған өлөшө 8 млрд 252 млн һум тәшкил итә (1 октябргә ҡарата аныҡланған сумма - 11 млрд 650 млн һум). Һалым килеменең үҫеше дөйөм һалымдың - 4, физик шәхестәрҙең килеменә һалымдың 6,4 процентҡа артыуы һөҙөмтәһендә мөмкин булды. Был граждандарҙың уртаса эш хаҡының ҡала буйынса артыуын дәлилләй. Халыҡтың милек килеме 1,5 тапҡырға, ер һалымы буйынса күрһәткес 30 процентҡа артты. Дәүләт пошлинаһы буйынса 35 процент үҫеш бар. Бынан тыш, тәбиғәт ресурстарын ҡулланыу, ер участкаларын ҡуртымға алыу, дәүләт сикләүе билдәләнмәгән ер участкаларын һатыуҙан килгән килем яҡынса 1,8 тапҡырға артты. Әммә шул уҡ ваҡытта былтырғы йылдан ҡалған акциз һалымы бурыстары бюджетҡа быйыл индерелә. Улар юл фонды сығанаҡтары. Быйыл иһә Өфө ҡала бюджетына түләүҙәр нормативы кыҫҡарыуы һөҙөмтәһендә уларҙың килеме лә кәмене. Шулай уҡ муниципаль предприятиелар, файҙалы ҡаҙылмаларҙы табыуға һалым, реклама урындары өсөн түләү, торлаҡ булмаған фондты ҡуртымға биреүҙән килгән түләүҙәр һуңлап инә.

**➔ Мәғлүм булыуынса, бюджетта үҙкилем тигән термин да бар. Уның тураһында ла аңлатма биреп китһәгеҙ ине.**

- Үҙкилем физик шәхестәрҙең килеменә һалымдан (38 процент), ер участкаларын ҡуртымға тапшырыуҙан (17 процент), торлаҡ булмаған объекттар фондын һәм ер участкаларын һатыуҙан килгән килемдән (14 процент), дөйөм килемгә һалынған һалымдан (11 процент), ер һалымынан (7 процент), милекте ҡуртымға биреүҙән килгән килемдән (4 процент) барлыҡҡа килә.

Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: туғыҙ айҙа һалымдар буйынса бурыс 6 процентҡа (18 млн һум) артҡан. Әммә сентябрь менән сағыштырғанда 16 млн һумға кәмеп, 248 млн һум тәшкил итә. Бурыстарҙың артыуы һәм шул уҡ ваҡытта кәмеүен шуның менән аңлатырға мөмкин. Һәр районда ведомство-ара комиссиялар бар һәм улар йыл башынан 206 ултырыш уҙғарып, унда бурысы булған 429 һалым түләүсенең эше тикшерелде, тыңланылды. Комиссия ултырыштары һәм эше һөҙөмтәһендә бюджетҡа 530 миллион һумдан ашыу аҡса инде.

**➔ Ҡала бюджетына юғары бюджеттан финанс ярҙамы күрһәтеләме һәм был сумманың күләме күпме?**

- Ошо отчет осоронда республика бюджетынан субсидия һәм субвенция рәүешендә 8 млрд 136 млн һум аҡса бүленде. Субсидиялар күләменең ҙур өлөшө (65 процент), йәғни 2 млрд 736 млн һумы юл эшмәкәрлегенә тура килә. Субвенциялар суммаһы 3 млрд 673 млн һум. Уларҙың төп өлөшөн төп дөйөм белем биреү программаларын тормошҡа ашырыуға бүленгән сумма - 3 млрд 87 млн һум (84 процент) - алып тора. Йәғни был сумма төп дөйөм белем биреү программаларын тормошҡа ашырыу, мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләү буйынса муниципалитетҡа тапшырылған вәкәләттәрҙе үтәү өсөн бирелә.

**➔ Иҫәп хисапҡа тура киләме, йәғни килемдәр сығымдарҙы ҡаплаймы, әллә бюджет дефициты күҙәтеләме?**

- Туғыҙ айҙа сығымдар былтырғы ошо осорҙағы кеүек уҡ 17 млрд 358 млн һум тәшкил итә. Уларҙың 64 процентын социаль өлкә һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе алып тора. Сығымдарҙың күп өлөшө мәғарифҡа (38 процент), торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа китә (20 процент). Мәғариф буйынса сығымдар былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 4 процентҡа артып, 6 млрд 660 млн һум күләмендә финансланған. Был сумма мәктәптәрҙе, мәктәпкәсә балалар учреждениелары финанслауға тотонола. Дөйөм сығымдарҙың ҙур өлөшө хеҙмәт хаҡы түләүгә китә - 71 процент, йәғни 17,5 млрд һум. Йәштәр сәйәсәте өлкәһендә һәм балаларҙы һауыҡтырыуға бүленгән сумма 307 млн һум. Уларҙың төп өлөшө йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге учреждениеларҙы тотоуға, социаль сәйәсәткә йүнәлтелә. Баш ҡалала халыҡты социаль хеҙмәтләндереүҙең 9 учреждениеһы эшләй. Шулай уҡ балаларҙы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына йөрөткән ата-әсәләрҙең сығымдарының бер өлөшөн компенсациялауға, опекунлыҡҡа йәки уллыҡҡа бала алған ғаиләләргә түләүгә, йәш ғаиләләргә балалары тыуғанда йәки уллыҡҡа бала алғанда торлаҡ алыу өсөн социаль түләүҙәр биреүгә, етем балалар өсөн торлаҡ алыуға китә. Мәҙәниәт, кинематография тармаҡтарын финанслау былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 27 процентҡа артып, 333 млн һум тәшкил итә.

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағы буйынса дөйөм алғанда 3 млрд 462 млн һум тотонолған. Ҡаланы төҙөкләндереүгә, юлдарҙы, инженер ҡоролмаларын тотоуға, ағастар ултыртыуға, урамдарҙы яҡтыртыуға ҡала бюджетынан 1 млрд 30 млн һум йүнәлтелгән. Муниципаль учреждениелар тарафынан ҡаланы төҙөкләндереү буйынса муниципаль йөкләмәне үтәүгә 1 млрд 3 млн һум тотонолған. Авария хәлендәге йорттарҙа йәшәүселәрҙе күсереүгә 477 млн бүленгән. Коммуналь ойошмаларҙың әҙләкһеҙ эшләүен тәьмин итеү маҡсатында 251 млн һум бүленгән. Милли иҡтисад тармағы сығымдары 4 млрд 48 млн һум тәшкил итә. Уға автомобиль юлдарын төҙөү һәм реконструкциялауға, электр транспортында пассажирҙар ташыу сығымдарын ҡаплауға, дөйөм ҡулланылыштағы юлдарҙы төҙөү һәм капиталь ремонт үткәреүгә тотонолған сығымдар инә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Рәсәй Президенты В. Путин ил бюджетын ҡабаттан бер йылға ғына ҡабул итеүҙе күҙаллаһа, әлегә Башҡортостан парламентарийҙары өс йыллыҡ бюджет ҡабул итеүҙе туҡтатмай, шуға күрә киләһе йылға ла ҡала бюджеты өс йыллыҡ күҙаллауҙар менән ҡабул ителәсәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔27 октябрҙән 30-на тиклем Өфөлә XV Рәсәй энергетика форумы үткәрелә. Осрашыуға төрлө ҡалаларҙан спикерҙар сифатында 100-ҙән ашыу кеше килә. Форум эшендә Рәсәйҙең 12 төбәгенән, Белоруссиянан һәм Ҡаҙағстандан вәкилдәр ҡатнаша.

✔"Suns Europe-2015" халыҡ-ара йыр конкурсының һайлап алыу туры тамамланды. Уның башҡа йыр бәйгеләренән айырмаһы шунда: был конкурста төрлө милләт вәкилдәре ҡатнаша һәм үҙ туған телендә йырлай. Мәскәүҙең "Заман" башҡорт этно-ансамбле конкурстың һуңғы этабында ҡатнашырға саҡырыу алды. "Suns Europe-2015" конкурсының финалы 2015 йылдың 11 декабрендә Италияның Удине ҡалаһында уҙа. Еңеүсе аҡсалата приз аласаҡ һәм килешеүгә ҡул ҡуясаҡ. Уға ярашлы, Европа фестивалдәрендә сығыш яһаясаҡ.

✔Мостай Кәрим фонды Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында уҡыған студенттар өсөн халыҡ шағиры, яҙыусы һәм драматургтың грантталарын булдырғайны. Мостай Кәримдең тыуған көнөндә шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова һәм ейәне Тимербулат Кәримов 4 курс студенттары Динара Кәримоваға һәм Гөлшат Исхаҡоваға дипломдар һәм 50 мең һум күләмендәге гранттар тапшырҙы.

✔"Бөтә Өфө" телеканалында яңы форматтағы тапшырыуҙар башлана. Был телеканалды Башҡортостандың баш ҡалаһында ғына түгел, шулай уҡ Стәрлетамаҡта, Салауатта, Ишембайҙа, Октябрьскийҙа, Нефтекамала һәм Мәләүездә лә ҡарай алалар. Был 2 миллиондан ашыу тамашасы тигән һүҙ.

✔Өфөлә үткән ял көндәрендә ойошторолған ауыл хужалығы йәрминкәләрендә 68,7 миллион һумлыҡ продукция һатылды. Баш ҡалала 2135 сауҙа нөктәһе булдырылды, 46 муниципаль райондарҙан 28 тонна бал, 645,3 тонна йәшелсә, 774,7 тонна картуф һатылды. Көҙгө йәрминкәләр дауам итә.

✔1 ноябрҙә Башҡортостандың биш почта бүлексәһендә финанс тәҙрәләре асыла. Рәсәй почтаһының рәсми сайтында хәбәр ителеүенсә, шуларҙың дүртәүһе - Өфөлә, бәрәүһе Күмертауҙа эшләй башлаясаҡ. Финанс тәҙрәһендә клиенттарға түләүҙәр ҡабул итеү, аҡса күсереү, банк карталарын хеҙмәтләндереү, "Почта картаһын" асыу, шулай уҡ кредит ҡаплау кеүек хеҙмәттәр күрһәтәлә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТОҒРОЛАРҘЫҢ АНТТАРЫ...

## лайыҡлы баһаланды

**Ошо көндәрҙә дәүләт һәм туған телдәрҙе үҫтереү һәм пропагандалауға өлөш индергән мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт, киң мәғлүмәт саралары, йәмәғәт һәм башҡа ойошмалар хеҙмәткәрҙәренә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының премияларын тапшырыу тантанаһы үтте. Туғыҙ йыл эсендә премияға 169 кеше һәм 9 коллектив лайыҡ булған.**



Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, бөгөн төрлө инновацион белем биреү программалары индерелә, Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың телдәрендә конкурстар, фестивалдәр, тематик байрамдар уҙғарыла. Республиканың арҙаҡлы яҙыусылары һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең юбилейҙары республика масштабында ғына үткәрелһә, Салауат Юлаев көндәре, Халыҡ-ара Аксаков байрамы, Славян мәҙәниәте көндәре киңерәк ҡолас ала бара. Бынан тыш та бик күп саралар ойоштороla һәм уларҙың барыһында ла бөгөнгө лауреаттар ҙур өлөш индереү күрһәтә.

Мәҫәлән, бүләкләнеүселәр араһында бөтөн ғүмерен рус телен фән булараҡ милли, шул иҫәптән башҡорт мәктәптәрендә һәм юғары уҡыу йорттарында уҡытыу методикаһын булдырыу һәм уны үҫтереүгә бағышлаған Лена Сәйәхованың да булыуы тап ошо фекерҙе раҫлай ҙа инде. "Рус телен уҡытыу - бик ҙур проблема, - тине ул үҙенең сығышында. - Ул шәхесте формалаштырыу проблемаһы. Бөгөн әлегә тиклем булғанға ҡарағанда тағы ла яҡшыраҡ һөҙөмтәләргә килтерергә тейешле юлда торабыҙ. Беҙ, бер төркөм ғалимдар, эшебеҙҙе башҡорт гимназияһында тикшеренеүҙән башланыҡ. Яңы типтағы әсбап төҙөнөк һәм уны "Рус теле" генә тип түгел, ә "Һүҙ" тип атаныҡ. Һүҙ - киңерәк аңлатма. Ул бигерәк тә беҙҙең күп милләтле республикала кешене лә, телде лә, мәҙәниәтте лә аңлата" , - тине үҙ сығышында Лена Гәрәй ҡыҙы. Ә коллегабыҙ, "Башҡортостан" гәзитенең бүлек мөдире, шағирә, Ш. Бабич исемендәге Республика премияһы лауреаты Лариса Абдуллинаның "Башҡорт теле" шиғыры набат кеүек яңғыраны:

*Һин - боронғо яугир,*
*башҡорт теле,*
*Еңеп сыҡтың һәр бер алыштан!*
*Сынйыр сыңы,*
*ҡылыс тауыштары*
*Ишетелә алыҫ-алыҫтан.*
*Салауат та һинең кеүек булған,*
*Һөргөнлә лә үткән ғүмере.*
*Ауылдарҙа һине һаҡлағандар,*
*Көлгә күмгән кеүек күмерҙе.*
*Йырауҫылар һиңә ҡалҡан булған.*
*Ҡыррҡанда ла телен сәсәндең,*
*Һуңғы һүҙен әйтеп киткән улар,*
*Түбән төшөрмәгән бәсеңде.*
*Һин - дәүләттең именлеге,*
*телем!*
*Һалдат кеүек һаҡта бөгөн дә!*
*Халҡың киләсәген*
*йөкмәп алдың,*
*Һин күтәрҙең намыҫ йөгөн дә!*
*Башҡорт теле!*
*Һин сабыйым кеүек ғәзиз!*
*Ҡараштарың беҙгә төбәлгән.*
*Әйтсе, ҡайһы әкиәттә сафлыҡ*
*Яңылдарҙың барын еңелгән?*
*Әйтсе, телем!*
*Һин бит тере ауаз!*
*Бармы һине һаҡлар заттарың?*
*Хыянатка, белем, язаң ҡаты...*
*Тоғроларҙың ҙурла анттарын!"*

Әлбиттә, наградланыусылар араһында күпселекте ҡаланың барлыҡ районларының да туған телдәрҙе уҡытыусы мөғәллимдәре, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы хеҙмәткәрҙәре тәшкил итеүе бер кемгә лә сер түгел. Сөнки тап улар балаларҙың ғаиләлә асылған әсә телен артабан ҡулланыуҙы, нығытыуҙы, уға ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙе яңы кимәлгә сығара. Быйылғы "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" республика конкурсы еңеүсеһе Фәнис Шәрәфетдинов та юҡҡа ғына былай тимәне: "Уҡытыусы иңенә халыҡ яҙмышы, ил, тел киләсәге, баланы шәхес итеп тәрбиәләү кеүек бурыстар йөкмәтелгән. Йәмғиәтебеҙҙең мөғәллимдәргә ҡарата битараф булмауы шатландыра. Хөкүмәтебеҙ, ҡала һәм район хакимиәтенең уҡытыусыларҙың фиҙаҡәр хеҙмәтен күрә белеүе, баһалай килеүе беҙҙе ҡанатландырып ебәрә, яңынан-яңы үрҙәр яуларға этәргес һәм дәрт бирә. Ошо терәк һәм таяныс аҫтында илем, телем, республикам, баш ҡалам, тип яңып эшләгәндә, беҙҙең киләсәгебеҙ ҙә өмөтлө, яҡты, ҡояшлы булыр". Наградланыусылар исемлегенең быйыл тағы ла 20 кешегә - үҙ теленең ысын патриоттарына артыуы ла алдағы көндәрҙә лә, быуаттар үткәс тә күп милләтле республикабыҙҙа туған телдәрҙең йәшәүенә өмөт уята.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# БЕЛӘ-КҮРӘ ТОРОП...

## зыянлы аҙыҡтар ашайбыҙ



**Бөтә донъяға билдәле "Макдоналдс" компанияһы продукцияһына ихтыяж ҙур булһа ла, бик күп илдәрҙә уға ҡаршы протест белдереүҙәр, хатта судҡа мөрәжәғәт итеүҙәр йышайған. Ҡалдыҡ-боҫтоҡ продукттарҙан эшләнгән аҙыҡ тәҡдим итеү, балаларға йүнәлтелгән агрессив реклама, эшселәрҙе ҡаты эксплуатациялау, тирә-яҡ мөхитте бысратыу һәм башҡа бик күп гәйептәр белдерелеп, Австралия, Филиппин, Канада, Бразилия, Яңы Зеландия, Мальта, Израиль, Бөйөк Британия, Греция, Хорватия илдәрендә, АҠШ-та "Макдоналдс" сәйәсәтенә ҡаршы пикеттар ойошторола. Ошо ағымға Рәсәй ҙә ҡушылды. 16 октябрь - Бөтә донъя "Макдоналдс"ҡа ҡаршы көрәш көнөндә Мәскәүҙә төҙөлгән тәүге "Макдоналдс" ябылды. Уның Башҡортостанда урынлашҡан нөктәләренә лә тикшереүҙәр килеп етәсәк, тип көтөлә. Организмға зарарлы фастфудты, башҡа сит ил ризыҡтарын һеҙ ҙә ҡулланаһығыҙмы, тип, бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек.**

**Әлфирә БӘХТИЙӘРОВА, БДУ уҡытыусыһы:** Балалы кешеләргә сит ил ҡухняһын урап үтеүе ауыр, сөнки улар ысынлап та кескәйҙәрҙе йәлеп итерлек итеп эшләнгән. Ризыҡтары зыянлы булғанын аңлайым, әммә һәр ваҡыт баланың теләгенә ҡаршы тороп булмай. Мәҫәлән, "Макдоналс"та балаларға махсус меню бар, уйынсыҡ бүләк итәләр. Бала шуға ымһынып, уйынсыҡтарына ҡыҙығып, зыянлы, тигәнендә тыңламай ҙа. Әйткәндәй, Өфөләгә "Макдоналдс"та башлап асылған йылдар менән сағыштырғанда тәмһеҙерәк бешерәләр. Американ килтерелгән икмәк, тип рекламалайҙар. Ул "чизбургер", "биг-мак"тар туҡлыҡлы түгел, ашағас та туйған кеүек тояһың да үҙенде, бер сәғәттән кире асыҡтыра. Был аҙыҡ составында консерванттар күп, калориялары ла юғары. Сит ил рестарандары урынына үҙебеҙҙең милли аш-һыу тәҡдим ителгән ашханаларға йөрөүе күпкә отошло. Сөнки файҙалы ла, хаҡтары ла "тешләшмәй".

**Нәилә АЛТЫНБАЕВА, хужабикә:** "Макдоналдс"ҡа ҡаршы бындай акциялар үткәрелеүен белмәнем. Беҙ ғаиләбеҙ менән тиҙ тукланыу кафеларына айына бер тапҡыр булһа ла ашарға барабыҙ, был ғәҙәткә ингән. Өйҙә аш-һыуҙы төрләнләндереп бешерһәм дә, ҡайны саҡта сит ил ризыҡтарын ашағы килеп китә бит. Әммә "Макдоналдс" ашын улыбыҙға ашатмайым. Мине бигерәк тә "Макдоналдс"та "Кока-кола" эсемлеген күп һатыуҙары борсой, сөнки уны йыш эсһәң, өйрәнеп тә китергә мөмкин. Тормош иптәшем, мәҫәлән, "Кока-кола"ның йүгереп килгәндән һуң һыуһынын ҡандырыу өсөн эсергә ғәҙәтләнгән. Тик уны ла улыбыҙҙың күҙенә эләктермәҫкә тырышабыҙ.

**Гөлзинә РӘХИМҒОЛОВА, уҡытыусы:** "Макдоналдс" ресторандарында туҡланмайым. Миңә унда тәҡдим ителгән итле бургерҙар, роллдар бөтөнләй оҡшамай. Ғүмүмән, сит ил аш-һыуы менән бик һирәк туҡланам. Сөнки фастфуд һәм әсе тәмләткестәр ҡушып эшләнгән аҙыҡ ашҡаҙанды боҙа. Ундай ризыҡ беҙгә хас түгел, башҡорттарҙың аш-һыуына артыҡ бороспо, тамаҡты яндырыс әсе ингридиенттар, майонез ҡушылмай. Һуңғы ваҡытта интернет селтәрендә төрлө ябығыу ысулдары, әллә ниндәй емештәр, дарыуҙар тураһында мәғлүмәттәр йышайып китеүен һиҙәһегеҙҙер. Бындай рекламалар нәк шундай дөрөҫ туҡланмай, аш һеңдереү ағзалары эшмәкәрлеген боҙған кешеләргә тәғәйенләнгән. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ һомғол буй-һынлы булырға теләп, шундай алдаҡсыларға ышана. Был осраҡта беҙҙе ике яҡтан алдайҙар: тәүҙә төрлө сит ил аштарын ашап, организмды боҙабыҙ ҙа, шул хатаны төҙәтер урынға тағы ла ниндәйҙер сығышы билдәһеҙ булған ябыҡтырыу ысулдарын ҡулланa башлайбыҙ. Шуға күрә, Бөтә донъя "Макдоналдс"ҡа ҡаршы көрәш көнө иғлан ителгән икән, хупларға ғына ҡала.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған киңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡындан һаҡлан...

❖ Көндәр ҡапыл һыуытып ебәреү менән һалҡын тейҙереп ауырыусылар ҙа күбәйә. Иң тәүҙә, башҡа башлыҡ кейеп йә яулыҡ ябынып йөрөргә кәрәк.

❖ Һалҡын тейгәндә һиҙеү менән үк 2-3 бүлем һарымһаҡты иҙергә, 1-әр ҡалаҡ бал һәм аҡ май өҫтәргә, өҫтөнә һөт ҡайнатып ҡойғас, болғатырға һәм яҡшылап ябырға. 1-2 минут торорға, яңынан болғатырға һәм эсергә. Кәрәк булһа, тағы яһап эсергә.

❖ Һарымһаҡ яратмағанда ҡаты итеп яһалған сәйгә 1 ҡалаҡ бал һәм әҙерәк спирт ҡушып эсеп, уранып ятып торорға. Ғәҙәттә, ауырыу тиҙ генә үтеп китә.

### Баш ауыртһа...

❖ Һалҡындан баш та ауырта. Бындай саҡта уң ҡулдың имән бармағы менән һул ус уртаһына нығ итеп баҫырға, уңға тиклем һанарға һәм баҫҡан бармаҡты ҡапыл ебәрергә. Шунан һул ҡулдың имән бармағы менән уң усҡа баҫырға. Ауыртыу тиҙ генә бөтә.

### Арпа

❖ Күҙгә һалҡындар мәлендә арпа ла сығып йонсота. Арпа сыҡһа, аҡ сәскә (ромашка) төнәтмәһе менән йылы компресс яһарға. Һау күҙҙе лә ошо төнәтмә менән йыуырға.

### Тоҙло һыу

❖ Күҙ ҡабағы ҡыҙарып, шешеп торһа, был аллергия конъюнктивиты булыуы ихтимал. 1 стакан һыуға ярты балғалаҡ тоҙ ҡушылған һыу менән бер нисә тапҡыр йыуһағыҙ, ярҙам итер. Был ысул күҙгә сүп ингәндә лә, күҙҙәр ҡысығанда ла шифалы.

### Стенокардия

❖ Тигеҙ өлөштә киптерелгән гөлйемеш менән әнәлек емештәре алырға. 7 ҡалаҡ емешкә 2 л ҡайнар һыу ҡойоп, урап, 1 тәүлек төнәтергә. Һөҙөргә һәм яҡшы итеп ябып, һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр сәй урынына 1-әр стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Бер үк аҙыҡтан, бер үк ысул менән әҙерләнһә лә, буҙаның тәме, нишләптер, һәр саҡ айырыла: бер оҫтабикәнең эсемлеге ҡаймаҡ ише телгә яғылһа, икенсеһенеке, әйтерһең, шишмә һыуы - шунда уҡ һыуһынды ҡандыра.*



КискеӨфө

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АҠҠОШ...

## ҡош батшаһы

**Башҡорт мифологияһында аҡҡош ҡояшты сағылдырыусы, үтә ғәҙәти булмаған сифаттарға эйә ҡоштар батшаһы булараҡ һүрәтләнә. "Урал батыр" эпосында төп персонаждарҙың береһе Һомай бер аҡҡошҡа, бер сибәр ҡыҙға әйләнә. Уның әхирәттәре - аҡҡоштар тубы ла ошондай уҡ һәләткә эйә була.**

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында Иҙеүкәй Һатҡы күлендә Һыуһылыуға әйләнә алған аҡҡошты осрата. Ошо уҡ әҫәрҙә инә аҡҡош үҙенең балаһынан ҡош кейемен һыпырып ала һәм ул сабыйға әүерелә. "Майсәрүәр" әкиәтендә 12 аҡҡош ҡанаттарын һалып, ҡыҙҙарға әйләнә. Һомғол буйлы ҡыҙҙарҙы аҡҡош менән сағыштырыу, яратҡан ҡыҙҙарын аҡҡош тип йөрөтөү халыҡта әле лә бар. Былар ҙа аҡҡоштоң кешегә әүерелә алыуына ышаныуҙар менән бәйле.

Фольклорҙа кеше лә аҡҡошҡа әүерелә ала. "Ала ҡарға" мифында һөт күле батшаһының 6 ҡыҙы була, улар менән бергә кеше затынан булған 1 ҡыҙ тәрбиәләнә. Уларҙың барыһы ла мамыҡ тунын кейеп аҡҡошҡа әйләнә алған. Бөрйән районында яҙып алынған "Күк һыйыр" риүәйәтендә әйтелеүенсә, үгәй әсә ире һәм балаһы менән ҡунаҡҡа килгәнендә үгәй ҡыҙын аҡҡошҡа әүерелдерә. Илаған сабыйын имеҙер өсөн килеп йөрөгән аҡҡоштоң ҡатыны икәнен ире белеп ҡалған һәм башҡаса уны ебәрмәгән.

Төрлө халыҡ ижад өлгөләренән күренеүенсә, ҡыҙҙар ғына түгел, ир-егеттәр ҙә аҡҡошҡа әйләнгән. "Үгеҙ" легендаһында үгеҙ кешегә әүерелеп, ҡыҙға өйләнә. Ҡатыны уның үгеҙ тиреһен табып, утҡа яҡҡас, ул аҡҡошҡа әүерелеп осоп китә. "Алатаев" әкиәтендә егет йә аҡҡошҡа, йә кешегә әүерелә. Бында уға аты ярҙам итә. Тимәк, борон кеше менән аҡҡоштоң берлегенә ышанғандар, бының өсөн аҡҡош тунын, кейемен, ҡанаттарын һалыу ҙа еткән. Батыр геройҙар аҡҡошҡа өйләнеп, был никахтан ғәҙәти булмаған балалар - әкиәти батырҙар тыуыуы тураһындағы сюжеттар ҙа күп.

Башҡорт халыҡ ижадында был тема "Урал батыр" эпосында киң асыла. Эпик герой - Урал батыр халыҡтың тәү атаһы, ярым алла, тауҙар һәм йылғаларҙы барлыҡҡа килтереүсе, һыу ташҡындарын еңеүсе, дейеүҙәрҙе еңеүсе ябай кеше күтәрә алмаҫлыҡ ауырлыҡтарға сыҙап, аҡҡош-ҡыҙға Һомайға өйләнә. Уларҙың улы Иҙел батыр атаһының көрәштәше, дейеүҙәргә ҡаршы көрәшә, Иҙел йылғаһын булдырыусы, "Аҡбуҙат" эпосында башҡорттарҙың төп ете ырыуына нигеҙ һалыусы. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының бер вариантында мең башҡорттарының бер ырыуының башлығы Мораҙым батыр улы - Алтын урҙа дәүләтселегенә ҡаршы һуғышып йөрөгән Иҙеүкәйгә аҡҡош-ҡыҙ Һыуһылыуҙы кәләш итеп алып бирә.

"Юрматы ырыуы" легендаһында Юрмый хан һылыулығына тиңдәр булмаған аҡҡош-ҡыҙға өйләнә, уларҙың нәҫеле юрматы ырыуын барлыҡҡа килтерә. "Ала ҡарға", "Майсәрүәр" әкиәттәрендә лә башҡорт батырҙары аҡҡош-ҡыҙға өйләнә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО*

**Ошо көндәрҙә Учалы районы ағинәйҙәре Миндәк ҡасабаһына "Буҙа байрамы"на йыйылды. Башҡортостан Республикаһы суверенитетына, райондың юбилейына, Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнөнә, шулай уҡ ноябрҙә уҙасаҡ IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған сара бик үҙенсәлекле, фәһемле булды, күтәренке кәйефтә үтте.**

# УЧАЛЫНЫҢ МИНДӘГЕНДӘ...

## буҙасылар ярышты

Хужабикәләр, Миндәк ағинәйҙәре, еренә еткереп таҡмаҡ әйтеп, гармун уйнап, йырлап-бейеп, ҡунаҡ ҡаршылау йолаһын атҡарғас, милли ризығыбыҙ тарихына кескәй экскурс яһанылар. Барыбыҙға ла бала саҡтан яҡшы таныш буҙа менән яңынан танышыу шундай ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә лә юлыҡтырҙы. Баҡтиһәң, боронғо грек яҙыусыһы, тарихсы һәм полководец Ксенофонт яҙмаларында телгә алына икән буҙа: походтан ҡайтҡан грек һалдаттары уны Әрмәнстанда тәмләп ҡараған. Һуңғараҡ "босса" эсемлеге тураһында билдәле Венеция дипломаты һәм сауҙагәре Иософат Барбаро үҙенең яҙмаларында һөйләй. Көнсығыш илдәре буйлап сәйәхәт ҡылыусы немец ғалимы Карстен Нибур ҙа әскелт тәмле эсемлек тураһында әйтеп үтә. Барыһы ла бер тауыштан буҙаның үҙенсәлекле тәмен, һаулыҡҡа файҙаһын билдәләй. Беҙ уны үҙебеҙҙең милли эсемлегебеҙ һанаһаҡ та, буҙаны Урта Азияла ла, Мысырҙа ла, Ираҡта ла, хатта Балҡанда ла, Алтайҙа ла, Себерҙә лә, Ҡырымда ла әҙерләп, ярата эсәләр икән. Буҙаны шулай уҡ мордва халҡы менән дә бүлешергә тура килә - был ризыҡ уларҙың да милли эсемлеге.

Барыһы тарафынан үҙ ителгән, яратылған һоло ризығына арналған байрамдың түренә, әлбиттә, буҙа ҡунаҡланы - төрлө ауылдарҙан килгән ағинәйҙәр үҙ эсемлеген тәмләргә тәҡдим итте. Бер үк аҙыҡтан, бер үк ысул менән әҙерләнһә лә, буҙаның тәме, нишләптер, һәр саҡ айырыла: бер оҫтабикәнең эсемлеге ҡаймаҡ ише телгә яғылһа, икенсеһенеке, әйтерһең, шишмә һыуы - шунда уҡ һыуһынды ҡандыра, өсөнсөһөнөкөнән бөтөнләй тел йотола... Ғәжәп хәлгә аптырап, бында мотлаҡ тылсым ғиләһе барҙыр ул, тигән уйға киләһең. Бәлки, урындағы һыуҙың, һауаның тәме ҡушылғанға, буҙалар айырылалыр? Йәки уны ҡойған оҫтабикәнең күңел нуры үрелеп, тәмдәре төрлө-төрлө килеп сығамы? Нисек кенә булмаһын, байрамға килтерелгән буҙаларҙың һәр береһе уңғайны. Һәр хәлдә, саҡырылған ҡунаҡтар: Өфө ҡалаһының Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Гүзәл Вилданова, Учалы районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Зөһрә Гордиенко, район мәғариф бүлеге етәксеһе Ләйсән Фазлетдинова, мәғариф бүлеге методисы Зилә Шәрәфетдинова, район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рәфиә Әсәҙуллина, район Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева һәм башҡалар эсемлектәрҙән ифрат ҡәнәғәт ҡалды.

Ҡунаҡтарҙың исем-шәрифе тәфсирләп яҙылғанға аптырамағыҙ: байрамдың бер өлөшө конкурстан ғибәрәт булып, буҙаларға ла баһалар ҡуйылды бит. Ижади бәйгелә иһә Ҡоҙаш, Иҫтамғол, Килмәк, Юлдаш һәм Миндәк ауылы ағинәйҙәре командалары ҡатнашты. Сәхнәгә бер-бер артлы күтәрелгән ағинәйҙәрҙең һәләттәре хайран ҡалдырҙы: улар буҙа бейеүен дә бейене, шифалы эсемлекте данлаған таҡмаҡтары, махсус әҙерләнгән рекламалары менән дә һоҡландырҙы, отҡорлоҡта ла һынатманы. Әйтерһең дә, был көндө республикабыҙҙың танылған артистары Миндәккә йыйылып, мәҙәниәт йортон гөрләтте!

Бит остары алланып, сара уртаһында ҡайнап йөрөгән Ҡоҙаш ауылынан Илзидә Шәймәрҙәнова менән Әсмә Хисамова, Аҡҡужанан Рауза Ғазина менән Әлфиә Абдуллина, Ҡотойҙан Нәйрә Ғиләжева, Әүешкүлдән Рәмилә Әбшәғитова менән Әлфиә Балташева байрамдан алған тәьҫораттары менән бүлешеп, шатлыҡтары менән уртаҡлашты: "Шул тиклем матур байрамға йыйылғанбыҙ, ҡыуанып бөтөрлөк түгел! Күпме таныштарҙы осраттыҡ, буҙа эшләүҙең яңы ысулдарын өйрәндек, бер-беребеҙҙең сығышын ҡарап илһамландыҡ. Ошолай бергә-бергә осрашып, ҙур эштәр башҡарып йәшәүҙәргә ни етә!" Буҙа ҡойоу оҫталарын - милли кейемдәрҙәге нурлы, яҡты йөҙлө ағинәйҙәрҙе бөгөндән тот та Болгарияның Радомир ҡалаһына буҙа фестиваленә ебәр - унда ла һынатмай, йөҙөбөҙҙө ҡыҙартмай, "бына" тигән итеп сығыш яһап ҡайтасаҡтар! Үҙебеҙҙә лә шундай уҡ фестиваль ойошторғанда, бер ҙә артыҡ булмаҫ кеүек. Һәр хәлдә, бының өсөн ерлек күптән әҙер.

Күңелле байрам ахырында ағинәйҙәр түңәрәк өҫтәл-табын артында етди мәсьәләләр тураһында ла һөйләшергә форсат тапты. Милли йолаларыбыҙҙы тергеҙеү һәм таратыу, йәш быуынды тәрбиәләү, ғаиләләрҙе һаҡлау кеүек бик мөһим һорауҙар көн үҙәгенә ҡуйылды. Йомғаҡлау һүҙендә район "Ағинәйҙәр ҡоро"ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Сәғит ҡыҙы сарала ихлас күңел менән ҡатнашҡан һәр ағинәйгә, айырыуса байрамды ойошторған Миндәк ағинәйҙәренә, уларҙың етәксеһе Гөлнур Бикмөхәмәтоваға, Миндәк ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Ришат Ғибәҙуллинға рәхмәт белдереп: "Төплө әҙерлек, ойошҡанлыҡ, берҙәмлек булғас, байрам юғары кимәлдә үтте, - тип билдәләне. - Был сара беренсеһе түгел, һуңғыһы ла булмаһын. "Буҙа байрамы"нан дәрт, илһам алып, ағинәйҙәр хәрәкәтен артабан йәйелдереүгә, донъяны матурлауға, милләтебеҙҙе һаҡлауға көс һалайыҡ".

**Әлиә ҠАРАБАЕВА.**



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# ӨФӨБӨҘҘӘ БОРОНҒО ӨФӨ САҒЫЛЫШЫ

**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа "Урта быуаттарҙа биҙәүестәр һәм көнкүреш әйберҙәре" тигән исем аҫтында "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы тарафынан ойошторолған күргәҙмә эшләне. Күргәҙмәлә "Өфө-II ҡаласығы" федераль әһәмиәтле археология ҡомартҡыһында төрлө йылдарҙа ҡаҙып алынған артефакттар, уларҙың фоторәсемдәре, архитектура композициялары тәҡдим ителде. Дүртенсе тапҡыр ойошторолған күргәҙмә Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында урынлашҡайны. Уны асыу тантанаһына ярайһы уҡ күп тамашасы йыйылды. Гәзит уҡыусыға был күргәҙмә тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреүҙе кәрәк тип таптыҡ. Ни өсөн тигәндә, Өфө-II ҡаласығы, уның музейы тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ һымаҡ. ҺӘр хәлдә, беҙ ҡатлам-ҡатлам ер аҫтынан ҡаҙып сығарылған бындай әйберҙәрҙе быға тиклем үҙ күҙебеҙ менән күргән кеше түгел инек.**



Күргәҙмә асылмаҫ элек үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған "Боронғо Өфө ҡаласығы ниндәй тарихи осорҙа йәшәгән?" тигән һорауҙы музей-ҡурсаулыҡтың бүлек мөдире Марсель Шәмсетдиновҡа төбәнек. Уның әйтеүенсә, бындағы ҡомартҡыларҙың йәше беҙҙең эраның V быуатынан XV быуатҡа тиклемге арауыҡты үҙ эсенә ала.

Күргәҙмәне асып, "Боронғо Өфө"-нөң директоры Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы Батталова килеүселәрҙе сәләмләне, уның һүҙҙәре менән әйткәндә, "тамашасыны һоҡландырыу, аптыратыу өсөн әҙерләнгән ҡомартҡылар", бөгөнгө кешеләр тарафынан эшләнгән ижади эштәр тураһында һөйләне. "Беҙ һәр ваҡыт тамашасыбыҙҙы һоҡландырырға тырышабыҙ. Был юлы ла бер нисә ҡыҙыҡлы яңылығыбыҙ менән уртаҡлашмаҡсыбыҙ", - тине һәм һәр экспонаттар төркөмөнә ҡыҫҡаса аңлатма бирҙе. Әйткәндәй, беҙ барыбыҙ ҙа Гәүһәр Тимерхан ҡыҙын билдәле тележурналист булараҡ беләбеҙ. Бөгөнгө күргәҙмәнең эстәлеге, уның формаһы үҙенсәлеге лә, һис шикһеҙ, етәксенең тележурналист һөләтенә бәйлеләр, тигән һығымта яһағы килә. Әйтәйек, һиндыйҙарҙың, биҙәүестәрҙең, һауыт-һабаһының нисек етте, шулай түгел, ә айырым бер композицияларҙа тәҡдим ителеүе ошо хакта һөйләй. Һырғаларҙың, беләҙектәрҙең, тәңкәләрҙең, муйынсаҡтарҙың көштәлә лә, уларҙың күсермәләренең ҡатын-ҡыҙ ҡурсаҡына ла һынландырылыуы, күргәҙмәнең түрендә Боронғо Өфө ҡаласығының макеты ҡуйылыуы, стеналарҙа көштәләрҙәге ҡомартҡыларҙың фотолары эленеүе - беҙҙең фекерҙе ҡеүәтләй генә төшә. Беҙҙең менән әңгәмәлә ул бына ниҙәр һөйләне:

- Беҙҙең музей республикала иң йәше - уға 4 кенә йәш. Был беҙҙең дүртенсе күргәҙмә. Тәүгеһен 2014 йылда Башҡортостан Республикаһы Президенты грантына ойоштороғайныҡ. Ул "Боронғо ҡаланың асылмаған серҙәре" тип аталды. Унан һуң "Урта быуаттарҙа хәрби сәнғәт" тигәне үтте. Артабан "Боҙлоҡ осоро паркы"н ойоштороҙоҡ. Был беҙҙең музей тарафынан ойошторолған дүртенсе күргәҙмә. Исеме "Урта быуаттарҙа биҙәүестәр һәм көнкүреш әйберҙәре" тип атала. Өфө-II ҡаласығында 9 йыл эсендә миллиондан артыҡ артефакт табылһа, улар араһында 500-ҙән ашыуы - биҙәүес өлгөләре. Бөгөн беҙ шуларҙың ҡайһы берҙәрен күргәҙмәгә ҡуйҙыҡ та инде. Кешеләр бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай. Бөгөнгө ғорурлығыбыҙ - боронғо ҡаланы һынландырған макет та бик ҡыҙыҡлы. Әле Өфө-II ҡаласығы тураһында күпме һөйләйбеҙ: "Ул Урта быуаттарҙа Меркатор карталарында, Каталон атластарында күрһәтелгән", - тибеҙ. Ә ул ҡала ниндәй ҡиәфәттә булған, нисек йәшәгән, унда ниндәй йорттар, ниндәй юлдар булған? Кешеләр нимә менән шөғөлләнгән - былар тураһында бер кем дә белмәй. Ә беҙҙең макетҡа ҡарап ҡына ла күп нәмәне аңларға һәм белергә була. Бөгөнгө күргәҙмәләге икенсе ғорурлығыбыҙ - ул беҙҙең Зөлхизә исемле икенсе ҡурсағыбыҙ (Ильяс исемлеһе былай ҙа бар ине). Уның өҫтөндәге биҙәүестәрҙең береһе лә бөгөн үйләп табылмаған. Һәр береһе артефакттарҙан күсереп эшләнгән. Улар бөгөн бик ҙур ҡиммәткә эйә...

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Музей-ҡурсаулыҡ коллективы, әлбиттә, бөтә был эштәргә башланғыс һалыусы, ғүмерен Өфө-II ҡаласығын өйрәнеүгә, доньяға танытыуға арнаған оло шәхесебеҙ Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовҡа сикһеҙ рәхмәтле. Уны юғалтыу бөгөн йәмғәтселектә шундай һорау тыуҙыра: Өфө-II-не быға тиклемге кимәлдә өйрәнеүҙе дауам итеүселәр булырмы? Музей-ҡурсаулыкта башҡарылған эштәр быға өмөт уята уятыуға...**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

*Аһ-Аһ!*

## МИҘАЛ ҺАТАЛАР, ИМЕШ...

**Коммунистар партияһы етәксеһе Геннадий Зюганов сығарған "Һуғыш балаларына" миҙалын 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тыуған кешеләргә 150 һумға һата башлағандар.**

Беҙ ашарға тейеш булған ит, май, һөт, йомортҡа, кейем-һалым - барыһы ла фронт өсөн булды ваҡытында. Беҙҙең бала саҡты урланы ул һуғыш. Ошондай күңелһеҙ хәлдәрҙе иҫкә төшөрөп торған ул миҙал бушҡа ла кәрәкмәй, бында уны һатып алырға тәҡдим итәләр. Әле ауыл ерендә йәшәгән йәштәргә эш юҡ, тик ҡарт-ҡоролар ҡалып бөтөп барабыҙ. Күптәрҙең балалары ата-әсәһенең пенсияһына ҡарап йәшәй. Ошондай заманда миҙал һатып алыу ҡайғыһымы ни беҙҙә!

*Аҡса бирһәң, миҙал бар, ти,*
*Һуғыш балаларына.*
*Әсәкәйҙәр нисек түҙгән*
*Йөрәк яраларына.*
*Беҙ ашаныҡ үлмәҫ өсөн*
*Әптек менән һарына.*
*Ниңә беҙҙең әсе тиргә*
*Олигархтар ҡаныға?*
*Миҙалды һатып алмайҙар,*
*Тағалар хәләл кескә.*
*Һәр нәмәгә хаҡ өҫтәлә,*
*Күптән төштек көрсөккә.*

**Вәсилә САДИҠОВА.**
**Әбйәлил районы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

## XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

**Рәсәй Император фәндәр академияһы академигы һәм уның даими секретары, медицина докторы, Санкт-Петербург Иркеле иҡтисад йәмғиәте ағзаһы, Дәүләт медицина коллегияһының, Тәбиғәтте тикшереүселәрҙең Берлин һәм Гессен-Гамбург патриотик йәмғиәттәренең почетлы ағзаһы Иван Иванович Лепехиндың (1740-1802) экспедиция яҙмалары башҡорт этнографияһы өсөн бөгөн дә ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Һеҙгә ошо яҙмаларҙың башҡорттарға ҡараған өлөшөн тәҡдим итәбеҙ.**

... 8-се числола статский советник әфәнде беҙгә ҡыҙыҡлы тамаша әҙерләп ҡуйғайны. Бер башҡортто саҡыртып килтереп, уларҙың солоҡ ағасына менеү ысулын һәм бал менән һыйланырға яратҡан айыуҙарҙан кәрәҙҙе нисек һаҡлауын күрһәтергә ҡушты: урманлы ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең солоҡтарын бейек ҡарағайҙарҙа яһай, һәм уларҙы ваҡыты-ваҡыты менән, яҙын-көҙөн генә ҡараштыра. Улар ағасҡа нәҙек ҡайыштарҙан өс бармаҡ яҫылығында үрелеп, кирәм тип аталған ныҡлы арҡан ярҙамында менә. Ағас олононда аяҡ бармаҡтарын терәрлек ҙур булмаған киртләстәр, йәғни киртек уйыла. Ағасҡа менер өсөн кирәмде олон аша уратып алып, бил һәм һул ҡулбаш аша уҙғарып, остарын тоҡанлап бәйләйҙәр ҙә, ағасҡа аяҡтарҙы терәп, арҡанға салҡан һалынып аталар. Һуңынан арҡанды ҡулдар менән өҫкәрәк ташлай биреп, уға яткан көйө өҫкә менергә лә, аҫҡа төшөргә лә була.

Балды айыуҙарҙан һаҡлар өсөн күрәләтә көлкөлө ысулдар уйлап табылған. Солоҡ ҡапҡасынан өҫтәрәк бәйләнгән бауға талыҡ тип аталған түмәр аҫып ҡуйыла, ул айыу солоҡҡа менә торған урынға тап килергә тейеш. Түмәр айыуға өҫкә үрмәләргә ҡамасаулағас, ул уны ситкә табан этеп ебәрә. Хәрәкәткә килтерелгән түмәр айыуҙың ҡабырғаһына йә башына бәрелә; үсегеп киткән айыу түмәргә тәпәйе менән ныҒыраҡ һуғып ебәрә, ә ситкә ныҡ тайпылған түмәр айыуға тағы ла ҡатыраҡ килтереп һуға. Был хурлыҡлы тамаша айыу хәлдән тайғансы, йә булмаһа, түмәр ныҡ бәрелеүҙән айыу осоп төшкәнсе дауам итә.

Икенсе ысул бына ниҙән ғибәрәт. Солоҡ ауыҙына килеп етерлек ағас ботағына бауҙар менән дүрт мөйөшлө бәүелсәк беркетелеп, солоҡ ҡапҡасына табан тарттырылып, нәҙек кенә бау менән бәйләп ҡуйыла. Ағасҡа үрмәләгән айыу солоҡҡа етер өсөн мотлаҡ бәүелсәккә ултырырға мәжбүр була: әммә был осраҡта ла бәүелсәкле ботаҡ бәйләнгән бау уға ҡамасаулап торғас, айыу уны өҙөп ташлай. Үҙен тартып торған көстән арындырылған һығылмалы ботаҡ кире китеп, бәүелсәктәге айыуҙы ағастан ситкә алып китә. Шул рәүешле айыу солоҡ хужаһы килеп, уны үлтергәнсе бәүелсәктә бәүелеп торорға дусар була: ағасҡа етергә йыраҡ, ә бейеклек йәиһә ағас тирәләй ҡағып ҡуйылған осло ҡаҙыҡтар ергә төшөргә мөмкинлек бирмәй.

Ошо саҡта әлеге башҡорт менән төрлө нәмәләр хаҡында һөйләшкәндә, башҡорттарҙың кесерткәндән туҡыма һуғыуын белеп, кесерткәнде нисек ҡулланыуҙары тураһында һораштым. "Беҙ уның ике төрлөһөн: бында үҫкән кәҙимгеһен һәм икенсеһен - киң япраҡлыһын ҡулланабыҙ", - тип яуапланы башҡорт. Һуңғыһынан беренсеһенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ туҡыма сыға. Тегеһе лә, быныһы ла дымлы урындарҙа хисапһыҙ күп үҫә, кешенең күкрәгенә тиклем еткәндәре була. Кесерткән өлгөрөп еткәс, һабаҡтарын услап тотоп, аяҡ менән тамыр яғына тибеп, өҙгөсләп йыялар. Кәрәк тиклем йыйылғас, һабаҡтарын һындырғылап, йүкәнән һалабаш һыҙыръан кеүек, ҡабығын һыҙырып алалар. Һыҙырылған ҡабыҡты киптереп алғас, тылҡып, эшкә яраҡлы хәлгә килтерәләр.

**(Дауамы бар).**

✔ *Еңел енәйәттәрҙе административ хоҡуҡ боҙоуҙар рәтенә индереү уларҙың санкцияларын кәметеү тигәндә бер ҙә аңлатмай. Минеңсә, еңел енәйәттәрҙе гуманлаштырыуҙан бөтәбеҙ ҙә отасаҡбыҙ ғына.*



# ҒАИЛӘЛӘ

## Ер шарында ла

**Закон нимә ул? Кешене һаҡлаусымы, яҡлаусымы, әллә хөкөм итеүсеме? Ул кемде яҡлай? Юриспруденция өлкәһенә ҡағылышлы төрлө һорауҙар тыуғанда, ярҙам һорап кемгә мөрәжәғәт итергә? Адвокаттарғамы, психологтарғамы, интернет-китаптарғамы, әллә башҡаларғамы? Ни өсөн беҙ адвокаттарға мөрәжәғәт итеп бармайбыҙ? Ниңә көндәлек тормошта йыш осраған сетерекле хәлдәрҙе закон ярҙамында хәл итеүҙән баш тартабыҙ? Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһының Өфө махсуслаштырылған филиалы адвокаты Нәзим Нәғим улы ХӘМИТОВ менән Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһының көньяҡ филиалы адвокаты Гүзәл Фуат ҡыҙы ХАРРАСОВА ошо һәм хоҡуҡ өлкәһе менән бәйле башҡа һорауҙарға яуап бирә.**



**Бөгөнгө һөйләшеү темаһы - Енәйәт кодексын гуманлаштырыу. Был ул тиклем аяуһыҙ булмаған енәйәт осраҡтары өсөн енәйәт яуаплылығын административ яуаплылыҡ менән алмаштырыу тураһындағы ниәтте күҙҙә тота. Ошо хаҡта Закон проекты әҙерләнә, тиҙәр...**

**Г. Харрасова:** Был хәл декриминализация тип атала. 2015 йылдың 7 авгусында Рәсәй Федерацияһының Юғары суды был закон проектын Парламент уҡыуҙарына индереүҙе хупланы. Рәсәй Юғары судының пленумдарында яңғыраған фекерҙәрҙе, ҡарарҙарҙы беҙ, адвокаттар, үҙ эшебеҙҙә киң файҙаланабыҙ. Был тәбиғи ҙә. Ни өсөн тигәндә, тормош үҙгәрә, әленән-әле яңы енәйәттәр менән осрашырға тура килә. Һәр яңы енәйәт осрағы өсөн Кодексҡа өҫтәмә индереп булмағанлыҡтан, РФ Юғары суды пленумдары ҡарарҙары ошондай ҙур әһәмиәткә эйә лә инде.

Ил Президенты Путин да декриминализацияны хупланы. Ә был инде енәйәттәрҙең еңелдәрен гуманлаштырыуҙың тормошҡа ашырылыуына ышанысты арттыра. Енәйәт кодексының 15-се статьяһына ярашлы, енәйәттәр бер-нисә категорияға: еңел, уртаса, ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәттәргә бүленеүен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Әле беҙ ҡараған үҙгәрештәр тәүге төргә - еңел енәйәттәргә генә ҡағыла, шулай ҙа еңел енәйәттәрҙең бөтөнөһөнә лә ҡағылмай. Һүҙ дүрт енәйәт төрө: кеше туҡмау (Енәйәт кодексының 116-сы статьяһына ярашлы), алимент түләүҙән ҡасыу (157-се статья), яһалма документтар ҡулланыу (327-се статья), кешегә үлтереү менән янау (119-сы статьяһы) тураһында бара. Киләсәктә үҙгәрештәр индерелеүсе был исемлек тағы ла тулыланыр, моғайын.

**Н. Хәмитов:** Енәйәт Кодексының 15-се статьяһына ярашлы, хәҙер иҡтисади енәйәт ҡылған эшҡыуарҙарҙы ла иркенән мәхрүм итмәйҙәр, ә аҡсаны зыян күреүсегә кире ҡайтарып биргән осраҡта, иреккә сығаралар. Быға тиклем ошондай енәйәт ҡылыусыларҙы мотлаҡ ултыртып ҡуя торғайнылар. Дәүләткә декриминализация ниндәй файҙа бирә? Һаҡ аҫтына алынған кешенең дәүләт ҡарамағында ҡалыуын, ҡаҙнаға матди файҙа килтермәүен иҫәпкә алғанда, уның иректә эшләүе файҙалыраҡ, әлбиттә. Ҡанун талаптарын күҙ уңында тотоп, ғәйепләнеүсенән штраф түләтеү, мәжбүри эштәргә йәлеп итеү ҡаҙнаға аҙмы-күпме файҙа килтерә бит. Шуға күрә, декриминализация тәҡдимен мин дә хуплайым. Ул ғына ла түгел, еңел енәйәттәрҙе гуманлаштырыу тағы бер нисә мөһим мәсьәләне хәл итергә мөмкинлек бирер ине, тип уйлайым. Күптәрҙең иғтибар иткәне барҙыр: суд ҡарарҙарын йыш ҡына төрлө кешеләргә тәрләсә сығаралар. Әле күптән түгел халыҡты аптыратҡан бер ваҡиға булды. Уны һеҙ ҙә ишеткәнһегеҙҙер. Оборона министрлығы милке буйынса ҙур суммала мутлашыуы өсөн хөкөм ителгән Васильева ваҡытынан алда иреккә сығарылды. Был хәл нимә тураһында һөйләй: тимәк, закон әлегә камил түгел. Тимәк, закон һайланма кешеләргә генә эшләй.

Миңә бер ғибрәтле эш алып барырға тура килгәйне. Ришүәт биреүе өсөн иркенән мәхрүм ителгән бер егет мөрәжәғәт итте. Спиртлы эсемлек эскән килеш вокзалда йөрөгән сағында хоҡуҡ һаҡсылары күҙенә эләгә был. Полицейскийҙар протокол төҙөй башлағас: "Мин бит ауыл малайы, минең артыҡ аҡсам да юҡ, бына 200 һумды алығыҙ ҙа, ебәрегеҙ инде", - ти ҙә, егет аҡсаһын өҫтәлгә сығарып һала. Хоҡуҡ һаҡсылары "Ришүәт бирергә маташты", тип, егетте ике йыл ярымға төрмәгә яба ла ҡуя. Беҙ был суд ҡарарын Юғары судтан инҡар иттереп, эште яңынан ҡаратып, егетте иреккә сығарҙыҡ. Ошондай хәлдәрҙе ябай халыҡтың аңламай ҙа ҡалыуы мөмкин, ә беҙ, адвокаттар, ғәҙелһеҙлектәрҙе күреп, белеп торабыҙ. Тәфтишселәр ҙә, судьялар ҙа эшкә объектив ҡараһын ине лә бит.

Ҙур күләмдә мутлашыуҙарға сик ҡуйылһын өсөн, Европалағы һымаҡ, беҙҙәге вазифалы кешеләргә лә үҙҙәренең килемен, мөлкәтен ҡайҙан алыуҙарын дәлилләп тороу бурысы йөкмәтелһә, яҡшы булыр ине. Юҡһа, киң мәғлүмәт сараларында: "Был коттеджды төҙөп ултыртыр өсөн Фәлән Фәләновҡа бер ни ашамай-эсмәй 30 йыл тир түгергә тура килер ине", - тигән ише төрттөрөүҙәрҙән ары китә алғаныбыҙ юҡ.

Гүзәл Фуат ҡыҙының әйткәндәре менән тулыһынса килешәм. Ҡайһы бер статьяларҙы еңеләйтеү ҙә, шул уҡ ваҡытта, ҡайһылары өсөн язаны арттырыу ҙа дөрөҫ булыр ине. Мәҫәлән, эскән килеш икенсе тапҡыр руль артына ултырған водителдәргә енәйәт эше ҡуҙғатыла башлауы ла бик һәйбәт күренеш...

**Ә ҡайһы бер илдәрҙә, мәҫәлән, Сингапурҙа ергә тәмәкенде ташлап киткән өсөн - ҙур штраф, ғәрәп илдәрендә урлашҡан өсөн уғрының ҡулын ҡырҡыу кеүек язалар бар һәм был ҙур һөҙөмтә бирә. Шул турала иҫкә алғанда, беҙҙең илдә Енәйәт кодексын гуманлаштырыу енәйәттәрҙе арттыра ғына бирмәҫме икән? Ни тиһәң дә, беҙҙең ил халҡы тыйыуҙарға, ҡаты закондарға өйрәнгән...**

**Г. Харрасова:** Күп нәмә менталитетҡа бәйле. Шуға ла, Рәсәйҙе ғәрәп илдәре менән сағыштырыу дөрөҫлөккә тап килеп етмәҫ ине. Менталитеттар араһындағы айырма ер менән күк араһы. Мәҫәлән, беҙҙә бөтөнләй енәйәт булып һаналмаған эштәр ғәрәптәрҙә енәйәт булып һанала, йә - киреһенсә.

Тағы шуны һыҙыҡ өҫтөнә алғы килә: холоҡ төҙәтеү колонияһына оҙатылған кешегә "суд хөкөмөнә тарттырылған" тигән исем ғүмерлеккә йәбешә. Ул ғына ла түгел, балаларына, хәләл ефетенә, ата-әсәһенә, хатта, ейәндәренә лә был ныҡ ҡамасаулай. Улар дәүләт хеҙмәтенә, финанс өлкәһенә эшкә урынлаша алмай.

Еңел енәйәттәрҙе административ хоҡуҡ боҙоуҙар рәтенә индереү уларҙың санкцияларын кәметеү тигәнде бер ҙә аңлатмай. Улар бары административ хоҡуҡ боҙоу булып ҡына һанала. Шуға күрә, минеңсә, еңел енәйәттәрҙе гуманлаштырыуҙан бөтәбеҙ ҙә отасаҡбыҙ ғына. Декриминализация енәйәттәрҙең артыуына килтермәҫ, тип уйлайым.

Тағы ла шуны өҫтәге килә: ғәмәлдәге Енәйәт кодексы йәмғиәт ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек хәлдә түгел. Шуға күрә, уға төҙәтмәләр ҙә көн һайын тиерлек индерелә. Уның тәүге нөсхәһенән бөгөн бер ни ҙә ҡалманы, тиһәк тә була. Шуға бөгөн яңы Енәйәт кодексы ҡабул итеү тураһында һүҙ алып барыла. Минеңсә, яңы Кодексты тормошҡа ярашлы итеп, шул иҫәптән, ошо ҙур булмаған енәйәттәрҙе объектив рәүештә ҡарап, административ хоҡуҡ боҙоу категорияһына күсереп ҡабул итеү дөрөҫ булыр ине.

Ошоға бәйләп, тағы бер фекерем менән уртаҡлашырға теләйем: закондарҙы практикаһы булған юристар сығарһын ине. Әгәр практик юристарҙы депутатлыҡҡа һайлаһалар, закондарҙың етешһеҙлегенән беҙ, бәлки, был хәтлем ыҙаламаҫ та инек. Юғиһә, хәҙер парламентта ниндәй генә профессия кешеләре ултырмай. Минеңсә, итексе - итек тегергә, ашнаҡсы - аш бешерергә, юристар закон яҙырға тейеш. Закондарҙың башҡарылыуын тәьмин итеү юлдары бик ябай ғына. Закондарҙы практик юристар ғына сығарырға тейеш.

**Н. Хәмитов:** Депутаттарҙың сығыштарын ҡараһаң, ах итәһең. Законға яҡын да килмәгән әйберҙәр тураһында һөйләйҙәр, законға яҡын да килмәгән үҙгәрештәр индереп, шуға тауыш биреләр. Был бик үкенесле хәл.

**Иркенән мәхрүм итеүҙән кеше һабаҡ аламы?**

**Г. Харрасова:** Енәйәт язаһын дәүләттең хоҡуҡ боҙоусыға ҡарата атҡарылған үс алыу акты итеп аңларға ярамай. Енәйәт эше юлдан яҙған кеше төҙәлеп, йәмғиәткә кире ҡайтһын өсөн ҡуҙғатыла. Кешегә ни өсөн яза бирелә? Үҙ хатаһын аңлаһын өсөн. Иркенән мәхрүм итеү язаһы аша ул үҙ хатаһын аңларға тейеш. Дөрөҫ юлға баҫҡандарҙы ваҡытынан алда, шартлы рәүештә сығарыу ҙа ҡаралған.

Тағы бер ҡыҙыҡлы күҙәтеү. Әйбер урлаған кеше ошо әйберҙең хужаһының хоҡуғын боҙа, ә дәүләттекен түгел. Шуға күрә, хоҡуҡ боҙоусы менән зыян күреүсенең үҙ-ара аңлашыуы дөрөҫөрәк булыр ине, минеңсә. Ғәйепләнеүсе төрмәгә ултыртылһа, зыян күреүсе бынан бер ниндәй ҙә файҙа күрмәй. Дәүләттең функцияһы - зыян күреүсегә килтерелгән зыянды иҫәпләп сығарыу, санкцияның тулыһынса үтәлешен контролдә тотоу.

**Н. Хәмитов:** Күп эштәр, ғәҙәттә, ике яҡтың да килешеүе менән тамамлана. Енәйәт кодексында яҙылғанса, язаға тарттырыу биш йылға тиклем булһа, был осраҡта зыян күреүсе менән енәйәтсе судта килешә ала. Зыян күреүсе: "Миңә килтерелгән зыян бөтә яҡлап та ҡайтарылды, ғәйепләнеүсегә бер ниндәй дәғүәм юҡ. Уны язаға тарттырыуҙан азат итеүҙе һорайым", - тигән эстәлекле ғариза яҙа ала. Был осраҡта суд ғаризаны мотлаҡ рәүештә ҡабул итергә тейеш.

Әлбиттә, хоҡуҡ боҙоусы шартлы хөкөмгә тарттырылһа, ул еңел генә иреккә сығарыла икән, тип аңларға ярамай. Һынау осоро бар. Әммә ошо һынау осорон кеше тейешенсә үтәме, юҡмы - төп әтнәкә шунда. Аңламаған кеше ошо осорҙа ла үҙенең алама ғәҙәтен ҡуймай һәм ҡабат һаҡ аҫтына алына, ә аңлаған кеше улай итмәй - тайғаҡ юлға кире баҫмай, законды боҙмай башлай. Минең эш практикамда бихисап хоҡуҡ боҙоусы шартлы хөкөм алды, һәм шуларҙың береһе лә бүтәнсә хоҡуҡ боҙманы.

**Г. Харрасова:** 10-15 тәүлек ултырып сығыу шартлы язаларға ҡарағанда ла нығыраҡ тәьҫир итә. Кеше бер тәүлек тә "ултырып" ҡарамаһа, аҡылға ултырмай ул. Элек мин тәфтишсе булып та эшләнем. Ул саҡта тәфтишсенең хоҡуҡтары киңерәк ине, йәғни закон боҙоусыны бер айҙан ике айға тиклем һаҡ аҫтына алыу мөмкинлеге булды. Уның ҡарауы, күпме ата-әсә, баламды дөрөҫ юлға баҫтырҙығыҙ, тип, рәхмәт әйтте - күпме балиғ булмаған балалар, бигерәк тә, йәш егеттәр төҙәлде. Шуға күрә, ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, административ ҡулға алыу срогын арттырһалар, йәмғиәткә был файҙаға ғына булыр ине. Административ ҡулға алынған кеше ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә иректең ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген аңлай.

**Н. Хәмитов:** Эйе, дәүләт бынан бер нәмә лә юғалтмай, шул уҡ кешеләрҙең мәнфәғәттәре күберәк яҡланып сыға бит. Йәштәр, бала-саға күп нәмәне аңлап та етмәй. Шундай юл үткәндән һуң, улар уйланыр ине. Ә хөкөмгә

*Миңә бер ғибрәтле эш алып барырға тура килгәйне. Ришүәт биреүе өсөн иркенән мәхрүм ителгән бер егет мөрәжәғәт итте. Спиртлы эсемлек эскән килеш вокзалда йөрөгән сағында хоҡуҡ һаҡсылары күҙенә эләгә был. Полицейскийҙар протокол төҙөй башлағас: "Мин бит ауыл малайы, минең артыҡ аҡсам да юҡ, бына 200 һумды алығыҙ ҙа, ебәрегеҙ инде", - ти ҙә, егет аҡсаһын өҫтәлгә сығарып һала. Хоҡуҡ һаҡсылары "Ришүәт бирергә маташты", тип, егетте ике йыл ярымға төрмәгә яба ла ҡуя. Беҙ был суд ҡарарын Юғары судтан инҡар иттереп, эште яңынан ҡаратып, егетте иреккә сығарҙыҡ. Ошондай хәлдәрҙе ябай халыҡтың аңламай ҙа ҡалыуы мөмкин, ә беҙ, адвокаттар, ғәҙелһеҙлектәрҙе күреп, белеп торабыҙ. Тәфтишселәр ҙә, судьялар ҙа эшкә объектив ҡараһын ине лә бит.*

*✓ Адвокатлыҡ - юридик стажы булған юрисҡа ауыр имтихан тапшырғандан һуң ғына бирелә торған ҙур дәрәжә ул. Юридик ярҙамды ла танытмаһы булған адвокаттарҙан алыу яҡшыраҡ. Улар, тимәк, белемле, тигән һүҙ.*



тарттырылды, тигән мөһөрө булған кеше, миңә барыбер, ти ҙә, һөҙәк юл буйлап түбән тәгәрәй ҙә китә.

**Беҙҙең суд системаһы әхлаҡ принциптарына ни дәрәжәлә яҡын тора? Донъялағы судтар менән сағыштырғанда, уның кимәле ниндәй?**

**Г. Харрасова:** Беҙҙең суд ҡарарҙары, ғәҙәттә, Европа суды ҡарарҙарына таянып сығарыла. Шунлыҡтан, Европа суды әхлаҡлылыҡҡа нисек яҡын - Рәсәй суд системаһы ла шул сама, тип әйтергә булалыр. Рәсәйҙәге генә түгел, донъялағы күпселек дәүләттәрҙең суд системалары ла кешелеклелек принциптарына яҡын тора. Беҙҙең суд системаһы ла башҡалар менән бер кимәлдә, тип әйтер инем.

**Н. Хәмитов:** Беҙ, адвокаттар, һәр ваҡыт суд практикаһына таянып эш итәбеҙ. Суд хөкөмөнә тапшырылған эшкә оҡшаш эштәр Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә булғанмы, уларға ниндәй ҡарар сығарылған - судьяларҙың көсһөҙлөгөн күрәһең дә, ҡәнәғәтһеҙлек кисерәһең, хатта уның клиенты, судья алдында уңайһыҙ булып китә. "Эх, уның урынында булһам, ошо фактты ғына сығарып һалып, еңер ҙә ҡуйыр инем", - тип, теге яҡты ысын күңелдән йәлләйһең. Ундай дәғүәсе менән эшләүҙән үҙеңә лә яңылыҡ алмайһың. Ундай судтарҙа ҡатнашыу ҡыҙыҡ та түгел. Ысынында суд - ике адвокат алышы ул. Судты бизмән тотҡан, күҙе бәйләнгән ҡатын образында һынландыралар. Идеалда суд бер яҡты ла яҡламай. Ҡайһы яҡтың дәлилдәре күберәк, һәлмәгерәк - шул яҡ еңеп сыға.

**Суд эшендә еңеү шатлығын һеҙгә йыш татырға тура киләлер. Ғөмүмән, адвокаттың һәр эштә лә еңеүе мөмкинме?**

**Н. Хәмитов:** Бөтә Рәсәй адвокаттары съезы тарафынан ҡабул ителгән Адвокат этикаһы кодексына ярашлы, һәр адвокат эште ҡабул итер алдынан клентына киләсәктә мотлаҡ еңере  тураһында вәғәҙә биреүҙән тыйылырға түгел, тип яуап бирәм мин. Өмөтһөҙ эштәр ҙә була. Әйтәйек, беҙгә йыш ҡына енәйәт эштәрендә ҡатнашырға тура килә. Енәйәт эштәрендә беҙҙең төп талап шул: тикшереү законлы рәүештә барһын һәм ғәйепләнеүсегә законлы хөкөм бирелһен. Беҙҙән йыш ҡына: "Кеше үлтереүсене нисек яҡлап сығырға мөмкин?", - тип һорайҙар. Ә хәҙер иң мөһим бурысыбыҙ тураһында. Беҙҙең иң мөҡәддәс бурыс - законға таянып, кешегә законлы ярҙам итеү. Шул уҡ енәйәтселәрҙе лә, енәйәттән зыян күргәндәрҙе лә яҡлап сығыш яһарға тура килә.

**Г. Харрасова:** Беҙгә көн һайын тиерлек суд процестарында ҡатнашырға тура килә. Еңеп сыҡҡан саҡтарыбыҙ ҙа була, еңелгән мәлдәр ҙә. Ғәҙәттә, теге йәки был кеше мөрәжәғәт итһә, судтың был эшкә ҡарата ниндәй ҡарар сығарыры алдан уҡ тойомлана. Еңелерем алдан билдәле булған эштәргә мин, мәҫәлән, тотонмаҫҡа тырышам. Ни тиһәң дә, беҙҙең эшмәкәрлек өсөн клиентрырға уйлағайныҡ, ул йорт та, ер ҙә теге ҡатындың исеменә яҙылмаған булып сыҡты. Улар уның иренең ата-әсәһенә яҙылған, һуңғылары ул йортто ла, ерҙе лә улдарына күптән бүләк иткән. Ғәйепләнеүсенең бер мөлкәте лә булмай сыҡты. Әлеге көндә беҙ мәсьәләне хәл итеү буйынса эш алып барабыҙ, эштең ахыры ни менән бөтөрөн - еңербеҙме, еңелербеҙме - әйтеүе ауыр.

**Н. Хәмитов:** Ошондай хәлгә тарымаҫ өсөн кеше тәү сиратта юридик яҡтан хәбәрҙар булырға тейеш. Күптәрҙең был өлкәлә аҙ ғына ла белеме юҡ. Хатта ки, күптәр был өлкә менән ҡыҙыҡһынмай ҙа, яп-ябай ҡағиҙәне лә белергә теләмәй. Бер ҡараһаң, һәр районда адвокаттар ҙа, юристар ҙа етерлек. Гәзит уҡыусыларға шуны әйтер инем: ниндәйҙер мөһим эште башлар, ниндәй ҙә булһа рәсми ҡағыҙға ҡултамға ҡуйыр алдынан юристарҙан консультация алһындар ине. Юҡ шул, күп осраҡта эште эшләп бөтөрәләр ҙә, шунан ғына беҙгә киләләр. Иртәрәк килеп булмайше шул тиклем тиҙ ышана. Долларҙың хаҡы артыу менән алама уйлы әҙәмдәр ошо хәлдән дә файҙа алып ҡалырға ашыға. Океан артынан килтерелгән аҡса, тип, мутлашыусылар халыҡҡа уйынсыҡ аҡса таратыуҙан да тартынмай. Һиҙгерерәк, уяуыраҡ булырға кәрәк кешеләргә.

**Г. Харрасова:** Юридик белемлеләр ҙә күп нәмәне белеп бөтмәй әле. Бөгөн бөтөн юғары уҡыу йорттарында ла тиерлек юристар әҙерләнә. Әйтәйек, тау сәнәғәте институты яҡшы юрист тәрбиәләй аламы? Юристарҙы ошо даирәлә күп йылдар эшләп килгән уҡыу йорттары ғына әҙерләһә, яҡшыраҡ булыр ине, минеңсә.

**Сит илдәрҙә һәр кешенең тиерлек адвокаты бар...**

**Г. Харрасова:** Эйе, Европала, айырыуса, АҠШ-та ғаилә адвокаттары киң таралған. Көнбайыш кешеләре адвокат менән фекер алышмайынса, бер аҙым да атламай. Беҙҙең илдә лә был индерелһә, халыҡ күп күңелһеҙ хәлдәрҙән һаҡланыр, арыныр ине. Ғаилә адвокатын яллауға кеше үҙ аңы менән килергә тейеш.

**Н. Хәмитов:** Күп кенә юристар, хатта юридик белемгә эйә булмаған кешеләр ҙә, ышаныс ҡағыҙы ярҙамында ғына судта ҡатнаша. Закон быны рөхсәт итә әлегә. Икенсе яҡтан ҡараһаң, ундай белгестәрҙең клиенттары йәлләү тойғоһо уята. Юристар араһында "Һәр адвокат - ул юрист, әммә һәр юрист адвокат түгел", тигән ҡанатлы һүҙ йөрөй. Мәғәнәһе аңлашылалыр: адвокатлыҡ - юридик стажы булған юрисҡа ауыр имтихан тапшырғандан һуң ғына бирелә торған ҙур дәрәжә ул. Юридик ярҙамды ла танытмаһы булған адвокаттарҙан алыу яҡшыраҡ. Улар, тимәк, белемле, тигән һүҙ. Күптәрҙең судья ярҙамсыларына, секретарҙарға мөрәжәғәт итеүен күрергә тура килә. Улар ҙа маҡсатҡа ярашлы ярҙам итә алмай. Адвокаттар менән кәңәшләшкән хәлдә, Гүзәл Фуат ҡыҙы дөрөҫ әйтте, енәйәттәр ҙә кәмер ине. Юридик яҡтан ныҡлы белемле кешене уғрылар ҙа алдарға ашыҡмай бит... Ғаилә адвокатлығына килгәндә, мин үҙемде күптәрҙең ғаилә адвокатымын, тип әйтә алам. Сөнки бөтөн дуҫтарым, һабаҡташтарым юридик кәңәш кәрәкһә, миңә шылтырата.

**Г. Харрасова:** Юғиһә баяғы, ышаныс ҡағыҙы алған, бер-ике суд эшендә ҡатнашып, әлепте таяҡ тип сырамытырға өйрәнеп алған кешеләр ҙә, юридик "ярҙам" күрһәтергә әүәҫләнеп алды. Ә кеше бит уларҙың таныҡлығын һорамай - адвокатмын, тигән һүҙенә ышанып, аҡсаһын түләй, эшен ышанып тапшыра. Һөҙөмтәлә, моратына ирешә алмай еңелә, адвокаттарҙан төңөлә. Шунлыҡтан, "адвокаттар булдыҡһыҙ, мине адвокат алданы", тигән фекергә килә.

# ТӘРТИП БУЛҺА,

## эштәр көйлө була

шуға һылтаныуын һорайбыҙ. Әлбиттә, һәр эштең үҙенсәлеге лә була, быны инҡар итеү мөмкин түгел. Шулай ҙа суд үҙ ҡарарын барыбер башҡа судтарҙың хөкөм ҡарарына таянып сығара. Әгәр таянмай икән, беҙ быға ҡаршы төшәбеҙ һәм законды бер төрлө ҡулланыуҙы һорайбыҙ.

Һуңғы осорҙа миңә Рәсәйгә эшкә килгән сит ил граждандары - мигранттар менән күп эшләргә тура килә. Билдәле, суд беҙҙең илдә законһыҙ эшләүсе сит ил граждандарын үҙ илдәренә оҙатыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Беҙ, киреһенсә, уларҙың мәнфәғәтен яҡлап сығабыҙ. Мигранттар араһынан күптәр урындағы кешеләр менән ғаилә ҡороп, балалар үҫтерә. Араларында тәүге никахтан балалары булғандар ҙа осрай. Судта беҙ ошо факттарға һылтанабыҙ. Һуңғыларына Рәсәйҙә раҫлау үткән сит ил закондарына таянып, ҡарар сығарылыуын һорайбыҙ. Рәсәй теге йәки был конвенцияға ҡул ҡуйған икән, уны мотлаҡ рәүештә үтәргә тейеш.

**Г. Харрасова:** Беҙҙең эштә башҡа суд ҡарарҙарын өйрәнеүҙә интернет сикһеҙ ярҙам итә. Элегерәк, интернетһыҙ заманда, архивты, төрлө йыйынтыҡтарҙы аҡтарырға тура килә ине. Бөгөн иһә, теләгең, ныҡышмаллығың булһа, эшләр өсөн бөтөн мөмкинлектәр ҙә ҡул аҫтында. Аңынды, зиһенеңде үҫтерәм тиһәң дә, яңы заман технологияларын ҡуллана алаһың. Юриспруденция шул тиклем мауыҡтырғыс өлкә. Эш барышын ғына алайыҡ. Ике яҡта ла берәр адвокат оҫтҡорлоҡта, зирәклектә көс һынаша. Ҡайһы яҡтың адвокаты күберәк дәлилдәр килтерә, шул яҡ еңә. Ҡайһы саҡ дәғүәсе адвокаттың тейеш. Ләкин вәғәҙә биреп, аҡса алып та, еңелгән адвокаттар осрай. Беҙ бер ниҙе лә алдан күрә алмайбыҙ. Ҡарарҙы ла судья ғына сығара. Беҙ бары тик уға эште законлы рәүештә тормошҡа ашырырға ярҙам ғына итә алабыҙ.

Миңә мөрәжәғәт иткән клиенттарымдың документтарын ҡарап сыҡҡас, башта мөмкин булған варианттарҙы теҙеп әйтеп бирәм. Шунда уҡ өҫтәп тә ҡуям: "Мотлаҡ еңәсәкмен, тип, һеҙҙе ымһындыра алмайым. Тәжрибәмә, белемемә таянып, ҡулдан килгәндең барыһын да эшләйәсәкмен. Ҡарарҙы суд сығара. Әгәр һеҙ суд ҡарары менән риза булмайһығыҙ икән, ул саҡта беҙ юғарыраҡ инстанцияларға яла яҙабыҙ. Яла яҙғандан һуң инде беҙҙең эш тә тамамлана", - тим. Эште һәйбәт башҡарыу һәр адвокат өсөн үтә мөһим. Беҙҙең  эш шунан ғибәрәт бит: нисек эшләйһең - аҡсаһын да шулай алаһың. Кешене алдап-йолдап йөрөһәк, беҙгә бер кем дә ышанып килмәҫ ине.

Адвокат бөтә эштәрҙе лә еңеп сығырға мөмкинме, тип һоранығыҙ. Юҡ, быны булыуы мөмкин тарыбыҙ хаҡ түләй бит. Эштең уңышһыҙ бөтөүен белә күрә, кемдәндер аҡса алыуҙы мин күҙ алдына ла килтермәйем. Әлбиттә, йыш ҡына шулай ҙа була - һин үҙеңдең еңереңә ышанып, судҡа бараһың да, суд барышында теге яҡ адвокаты көслөрәк дәлилдәр сығарып, еңеп сыға.

Йыраҡ йөрөргә кәрәкмәй: мәҫәлән, әлеге көндә бер районда суд эше бара. Мин зыян күреүселәрҙе яҡлап сығыш яһайым. Бер ханым туғандарын, үҙенең ҡулы аҫтындағы хеҙмәттәштәрен күндереп, үҙе өсөн кредиттар алдырған. Ул аҡсаны йортон, ихатаһын төҙөкләндереүгә тотонған. Күпмелер ваҡыт уларҙың айлыҡ түләүен үҙе ҡаплап барған да бит, көрсөк башланғас, түләй алмай башлаған. Ахырҙа, банктар уны эҙәрлекләй башлағас, һуңғы сиккә еткән - үҙ-үҙенә ҡул һалған. Был ханымға кредит алышып, хәҙер бурыслы ҡалған зыян күреүсе миңә мөрәжәғәт иткәс, эшкә риза булғайным. Тәү ҡарашҡа, еңел генә һымаҡ ине. Ләкин оҙаҡламай быҒаса беҙгә мәғлүм булмаған мәғлүмәттәр асыҡланды. Кредит алыусының бурысын ҡайтарырға тейешле балалары ла бик мут булып сыҡты - мираҫтан баш тартты ла ҡуйҙы. Иск ҡағыҙы алып, йортто ла, ерҙе лә һаттыинеме ни, тигән һорау тыуа. Ә мутлашҡан әҙәмдәр ҙә бөтөнләй үк алйот түгел - улар үҙҙәренең ни эшләүен белеп, һәр аҙымын юридик йәһәттән үлсәп баҫа. Ҡағиҙә булараҡ, ундайҙар документта үҙҙәренә бер мөлкәт тә ҡалдырмай. Тикшерә башлаһаң, бар байлығы туғандарында, имеш. Кредиттарҙы йәһәт кенә ҡаплайбыҙ, тип, вәғәҙәләгән "Древпром"дан да ныҡ алданды халыҡ. Һуңғы аҡсаһын ҡалдырып китеүселәр ҙә булды. Хатта ҡайһы бер оло-оло инәйҙәр кәфенлеккә тип кенә йыйған аҡсаһын шулай юғалтты. Алдаҡҡа ке-



***Ғәмәлдәге Енәйәт кодексы йәмғиәт ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек хәлдә түгел. Шуға күрә, уға төҙәтмәләр ҙә көн һайын тиерлек индерелә. Уның тәүге нөсхәһенән бөгөн бер ни ҙә ҡалманы, тиһәк тә була. Шуға бөгөн яңы Енәйәт кодексы ҡабул итеү тураһында һүҙ алып барыла. Минеңсә, яңы Кодексты тормошҡа ярашлы итеп, шул иҫәптән, ошо ҙур булмаған енәйәттәрҙе объектив рәүештә ҡарап, административ хоҡуҡ боҙоу категорияһына күсереп ҡабул итеү дөрөҫ булыр ине. Закондарҙы практикаһы булған юристар сығарһын ине. Әгәр практик юристарҙы депутатлыҡҡа һайлаһалар, закондарҙың етешһеҙлегенән беҙ, бәлки, был хәтлем ыҙаламаҫ та инек. Юғиһә, хәҙер парламентта ниндәй генә профессия кешеләре ултырмай.***

(Дауамы 10-сы биттә).

***✓ Бөгөнгө көрсөк мәлендә халыҡ бөлгөнлөккә төштө. Һөҙөмтәлә, уғрылыҡ, урлашыу, мутлыҡ ҡылыуҙар һәм башҡа хоҡуҡ боҙоуҙар күбәйҙе. Ни өсөн тигәндә, кеше йәшәргә тырыша, ә билдәле хәлдәрҙән һуң йәшәү кимәле түбән тәгәрәне.***

# ҒАИЛӘЛӘ ТӘРТИП БУЛҺА,

## Ер шарында ла эштәр көйлө була

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Ни өсөн граждандар араһында үҙ проблемаһын закон тәртиптәре буйынса хәл итергә ынтылыусылар аҙ? Быға суд эшенең оҙайлы ҡаралыуы сәбәпсеме, әллә кешеләрҙе хөкөмдарҙың ғәҙеллеге ышандырып етмәйме?**

**Г. Харрасова:** Бының сәбәбе әлеге лә баяғы судтарҙағы көрсөккә ҡайтып ҡала. Тағы ла, әйтергә кәрәк, судтарҙың конвейерға әйләнеүендә лә хикмәт бар. Һәр эшкә ғәҙәттә 10 минут ваҡыт бирелә. Ошо ваҡыт эсендә судья тейешле документтарға ғәйепләнеүсенең исем-шәрифен генә тултырып өлгөрә. Шуға күрә, сифат та аҡһай. Бындай шарттарҙа эште сифатлы итеп ҡарау мөмкинме ни? Бәхәсте нисек ун минут эсендә ҡарап сығырға мөмкин? Уны ҡағыҙға теркәргә лә кәрәк бит. Был судьяларҙың да ғәйебе түгел. Был - беҙҙең ысынбарлыҡ.

**Н. Хәмитов:** Мәсьәләләрҙең төбөнә төшөргә судьяның ваҡыты етмәй ҡала. Көнөнә нисә суд ҡуйылған - ул барыһын да ҡарарға тейеш. Судьялар өлгөрә алмаһа, ғәҙәттә, эш икенсе көнгә кисектерелә. Кисектереүҙең сәбәбе төрлө булыуы мөмкин. Уныһы мөһим дә түгел. Төп сәбәп - ана шул ваҡыт етмәүҙә.

**Үҙ-үҙеңде яҡлау талап ителгән саҡта (мәҫәлән, урамда бәйләнһәләр) һиңә һөжүм иткән, бәйләнгән хоҡуҡ боҙоусыларға ҡаршы тороу өсөн закон рөхсәт иткән ниндәй саралар ҡулланырға була?**

**Г. Харрасова:** Һөжүм итеүсе ниндәй көс ҡуллана, һеҙҙең үҙ-үҙегеҙҙе һаҡлауығыҙ ҙа ул көскә бәрәбәр булырға тейеш. Шул сағында имен дә ҡалырһығыҙ, судта ғәйепһеҙлегегеҙҙе иҫбат итеү ҙә еңелерәккә төшөр. Хәйер, был бик бәхәсле һорау, әлбиттә. Күптәр һаҡланған саҡта һөжүм итеүсене яңылыштан үлтереп тә ҡуя. Әлбиттә, урамда һинән тәмәке һорап туҡтатҡан, йә бер ниндәй ҡурҡыныс менән янамаған кешегә ҡарата көс ҡулланыу ярамай.

**Н. Хәмитов:** Айырым осраҡтарҙа һөжүм итеүсе ҡулланған көстән артығыраҡын да ҡулланыу яҙыҡ түгелдер, минеңсә. Әйтәйек, әгәр бәйләнеүсе һеҙҙән күпкә бейегерәк, ҡеүәтлерәк икән, етмәһә, берәй һуғыш төрө менән шөғөлләнә икән, әгәр ул һеҙгә ҡарата көс ҡулланып, һаулығығыҙға, ғүмерегеҙгә төҙәлмәҫлек зыян килтерә ала икән, ул сағында ҡулға ни килеп эләгә, шуның менән һаҡланыу сараһы күреү мөмкиндер. Кеше ғүмеренә, кеше һаулығына ҡул күтәреүгә бер кемдең дә хоҡуғы юҡ. Әгәр ҡулында берәй пистолет, бысаҡ һымаҡ ҡорал бар икән, һөжүмдән һаҡланыу өсөн уны ҡулланыу ҙа ярай. Ул сағында, минеңсә, уны ҡулланыу өсөн хөкөм итмәҫкә лә була. Ундай саҡта ошо ҡоралды ҡулланғаның өсөн түгел, ә ҡорал йөрөткәнең өсөн генә хөкөм итерлергә мөмкинһеңдер, моғайын. Суд ҡарары сығарылғанда иһә, күп нәмә һеҙгә кем, нисек һөжүм итеүен иҫәпкә аласаҡтар.

**Шаһит булыуҙан да ҡурҡа бит халыҡ. Хоҡуҡ боҙоуға, унан да ҡурҡыныслыраҡ енәйәткә - кеше үлтереүгә шаһит булған осраҡта, бөгөн граждандар дәүләт органдарының ниндәй ҡурсыуына өмөт итә ала?**

**Г. Харрасова:** Айырыуса ауыр енәйәттәр шаһиттарын һәм шундай енәйәттәрҙән зыян күреүселәрҙе, уларҙың ғаиләләрен һаҡлау буйынса дәүләт программаһы һуңғы йылдарҙа эшләп килә. Был программаға индерелеүселәр суд тарафынан яҡлау таба.

**Н. Хәмитов:** Был программа өсөн аҡса ла бүленгән. Кешеләрҙең исем-шәрифтәрен үҙгәртеү, йәшәгән урындарын алмаштырыу бик ҙур эштәрҙә ҡулланыла. Ҡалған эштәр шаһиттарына, уларҙан зыян күреүселәргә бындай дәүләт ярҙамы ҡаралмаған.

**АҠШ-тың Нью-Йорк ҡалаһында енәйәтселекте кәметеү өсөн иң тәүҙә ҙур булмаған хоҡуҡ боҙоуҙар менән көрәшәләр. Был алым яҡшы һөҙөмтә бирә. Ул "Ярыҡ тәҙрәләр һөҙөмтәһе" тип атала. Йәғни, был алым бинаның берәй тәҙрәһе ярылған икән, уны яңыртмаһаң, тиҙ арала ҡалғандарының да ярылыуын, ул бина янында енәйәттәр ҡылыныуын көт тә тор, тигән принципҡа нигеҙләнгән. Нью-Йорк метроһында 80-се йылдарҙа тәртипһеҙлек хөкөм һөргән: көн һайын ауыр енәйәттәр ҡылынған, еңелсәһе тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәй. Метрола тәртип булдырыр өсөн урындағы яңы етәкселек тәү сиратта граффити төшөрөүсе вандалдарға һәм билетһыҙ йөрөргә әүәҫләнгән "ҡуян"дарға ҡаршы көрәш асҡан. Һөҙөмтә булараҡ, тиҙҙән еңел енәйәттәр ҙә, ауырҙары ла шаҡтай кәмегән. "Вагондар һүрәтһеҙ булғас, шулай уҡ юлда йөрөүселәр һәр ваҡыт билет һатып алғас, был урында тәртип боҙоу ярамай", тигән тәртип нығынған. Илдә тәртип булдырыр өсөн, бәлки, алдынғы тип һаналған илдәрҙәге ошондай уңышлы проекттарҙы ҡулланырға кәрәктер?**

**Г. Харрасова:** Алдараҡ әйтеп үтеүемсә, ғәрәп, Европа илдәрендә уңышлы ҡулланылған миҫалдарҙы беҙҙең илгә шул килеш күсереү бер ҙә дөрөҫ булмаҫ ине. "Ярыҡ тәҙрәләр һөҙөмтәһе" миҫалының да беҙҙең илгә ыңғай тәьҫир итеренә ышаныуы ауыр. Сөнки беҙҙең илдең менталитеты, тарихы, халыҡтың көнитмеше бөтөнләй икенсе. Алдынғы алымдарҙы файҙаланғанда ла уларҙы урындағы ерлеккә ҡулайлаштырыу кәрәк.

**Н. Хәмитов:** Үҙебеҙҙән бер миҫал. Башҡортостанда бөхтәлеге, таҙалығы, төҙөклөгө менән күпселектән шул тиклем айырылып торған немец ауылдары бар. Улар дәүләт эсендә "дәүләт" булып йәшәй. Был бөхтәлек, теүәллек уларҙың генына һалынғандыр. Әммә немецтарҙың йәшәү рәүешен тота килеп башҡаларға күсереп ҡуйыу дөрөҫ булмаҫ. Беҙгә сит тәртиптәрҙе, бәлки, үҙгәртеберәк, йомшартыбыраҡ үҙләштереү кәрәктер...

**Г. Харрасова:** Илдә тәртип булдырыу өсөн ҡамсы һәм ҡалас ысулын ҡуланыу бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине. Бер яҡтан, холоҡ төҙәтеү учреждениеларында үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәткәндәрҙе маҡтарға һәм ирекккә сығарырға була. Икенсенән, әгәр кеше бер-нисә тапҡыр бик ҡаты енәйәт эшләгән икән, был осраҡта ҡаты яза ҡулланыу ҙа ҡамасауламаҫ. Әлбиттә, һәр эш тә закон сиктәрендә атҡарылырға тейеш. Бер төрлө енәйәттәргә, ғәйепте аҙайта, арттыра торған һәм башҡа шарттарҙы иҫәпкә алғандан һуң, төрлө яза бирелергә мөмкин.

**Бөгөн беҙҙә ниндәй енәйәттәр өҫтөнлөк итә?**

**Г. Харрасова:** Һәр дәүерҙә айырым енәйәттәр күберәк була. Мәҫәлән, бөгөнгө көрсөк мәлендә халыҡ бөлгөнлөккә төштө. Һөҙөмтәлә, уғрылыҡ, урлашыу, мутлыҡ ҡылыуҙар һәм башҡа ошондай хоҡуҡ боҙоуҙар күбәйҙе. Ни өсөн тигәндә, кеше йәшәргә тырыша. Йәшәү кимәле көрсөккә тиклем бер кимәлдә ине, уны юғары тип тә әйтеп булмай, ә билдәле хәлдәрҙән һуң ныҡ ҡына түбән тәгәрәне. Халыҡ тотороҡло кимәлдә йәшәргә тырыша. Аңлыраҡ кеше, әлбиттә, күберәк эшләй һәм сығымдарын ҡыҫҡарта, ә инде яманы уғрылыҡ юлына баҫа. Шуға ла әлеге енәйәттәрҙең ныҡ артыуы күҙәтелә лә инде.

Күптәр эш урындарынан ҡыҫҡартылып, төшөнкөлөккә бирелде, уларҙың араһында спиртлы эсемлектәргә ылығыусылар ҙа юҡ түгел. Ошоға бәйле, эскән килеш яһалған енәйәттәр ҙә йышайҙы.

Башҡа субъекттар менән сағыштырғанда, беҙҙең республикала тәртип күпкә юғарыраҡ, тип һанайым. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең республикала халыҡтың күп өлөшөн мосолман диненә ҡараған контингент тәшкил итә. Ә был дин кешелә иң беренсе тәүфиҡлылыҡ тәрбиәләй. Йыртҡыстарса эшләнгән енәйәттәрҙең бик үк күп булмауы ла шуға бәйлелер.

**Н. Хәмитов:** Мин дә ризалашам. Беҙҙең халыҡҡа туҡталғанда, беҙҙә ололарға ихтирам, элекке һымаҡ уҡ булмаһа ла, барыбер бар. Был да яҡшы һөҙөмтә бирәләр. Һуңғы ваҡытта спиртлы эсемлектәр эсеү һөҙөмтәһендә ҡылынған енәйәттәр йышайҙы. Әммә эскелек барыбер ҙә борон беҙҙең халыҡҡа хас нәмә булмаған, үткән быуат баштарында ғына әле бындай ғәҙәт беҙгә ят ине. Башҡорттарға әҙәпһеҙлек, ҡомһоҙлоҡ һымаҡ сифаттар ҙа ят. Әммә, әйтелде инде, бөтөн проблемалар иҡтисадҡа бәйле. Эшһеҙлыҡтан интегә күптәр. Шунлыҡтан, ғаиләләрҙә ыҙғыштар сыға. Үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар ҙа күп. Шулай ҙа, өҙөп кенә, беҙҙең халыҡҡа ғына хас енәйәттәр бар, тип әйтеп булмай. .

**Ерҙә енәйәттәр бөтөр, тигән романтик хыял берәй мәл тормошҡа ашасаҡмы?**

**Г. Харрасова:** Минеңсә, йәмғиәт ҡасан барлыҡҡа килгән, енәйәттәр ҙә шул ваҡытта ҡылына башлағандыр. Енәйәт элек тә булған, хәҙер ҙә бар һәм, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, киләсәктә лә булыр, моғайын. Был фекерҙе мин нимәнән сығып әйтәм? Ниндәй генә бай, ниндәй генә ҡаты законлы Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрен алһаҡ та, хатта унда ла енәйәт, аҙ булһа ла, бар. Киләсәктә енәйәтселек, бәлки, кәмер ҙә. Ул барыбер тулыһынса бөтмәҫтер. Ниндәйҙер осраҡтарҙа енәйәт күберәк, ә ниндәйҙер мәлдәрҙә - аҙыраҡ булыуы ихтимал.

**Н. Хәмитов:** Енәйәт бөтһөн өсөн бөтә кеше лә идеаль, бер төрлө булырға, бер төрлө уйларға тейеш.

**Ә яҡшыраҡ заман килер тип әйтә алаһығыҙмы? Ул заман ҡасаныраҡ килер?**

**Г. Харрасова:** Яҡшыраҡ заман килеренә ышанысым барлыҡҡа бар. Үкенес, тиҫтәләгән йылдар буйы әкренләп яйланған илебеҙҙең башҡа илдәр менән иҡтисади хеҙмәттәшлеге һуңғы осорҙа өҙөлдө. Илебеҙҙе үҙебеҙ ҡарап, аҫырарлыҡ хәлгә килһәк, бөгөнгөнән яҡшыраҡ заман шул булыр. Тик бының өсөн, юғалтҡанды тергеҙеү өсөн бер тиҫтә йыл ғына ла етмәҫ. Һәйбәт заман килһен өсөн етәксе органдарға хужалыҡты, етештереү юлдарын яҡшы белгән оптимист рухлы кешеләрҙе генә тәғәйенләргә кәрәк. Шул саҡта ғына ил ҡеүәтле, халыҡ рәхмәтле булыр. Бөгөн беҙ тырышып эшләргә, төшөнкөлөккә бирелмәҫкә тейешбеҙ. Бер бөйөк кеше әйтмешләй, әгәр ҙә тормошоңдо байрамға әүерелдерергә теләһәң, үҙеңдең яратҡан һөнәреңде тап, ошо шөғөлөң менән бул. Ул ваҡытта эшкә байрамға барған һымаҡ барырһың. Һәр кеше яратҡан шөғөлөн бирелеп башҡарһа, ул үҙенә лә килем ала, башҡаларға ла ярҙам итә.

**Н. Хәмитов:** Ышаныс һәр кемдә булырға тейеш. Һәр кем үҙенең ғаиләһен ҡайғыртырға бурыслы. Ғаилә - йәмғиәттең тотҡаһы. Ғаиләлә тәртип булһа, ер шарында ла тәртип була. Насар ғаиләлә яҡшы бала тыуыр тип тә, яҡшы кеше үҫер, тип тә әйтеп булмай. Дәүләт беренсе сиратта ғаиләләрҙе ҡайғыртырға тейеш.

***Тиҫтәләгән йылдар буйы әкренләп яйланған илебеҙҙең башҡа илдәр менән иҡтисади хеҙмәттәшлеге һуңғы осорҙа өҙөлдө. Илебеҙҙе үҙебеҙ ҡарап, аҫырарлыҡ хәлгә килһәк, бөгөнгөнән яҡшыраҡ заман шул булыр. Тик бының өсөн, юғалтҡанды тергеҙеү өсөн бер тиҫтә йыл ғына ла етмәҫ. Һәйбәт заман килһен өсөн етәксе органдарға хужалыҡты, етештереү юлдарын яҡшы белгән оптимист рухлы кешеләрҙе генә тәғәйенләргә кәрәк. Шул саҡта ғына ил ҡеүәтле, халыҡ рәхмәтле булыр. Бөгөн беҙ тырышып эшләргә, төшөнкөлөккә бирелмәҫкә тейешбеҙ. Бер бөйөк кеше әйтмешләй, әгәр ҙә тормошоңдо байрамға әүерелдерергә теләһәң, үҙеңдең яратҡан һөнәреңде тап, ошо шөғөлөң менән бул. Ул ваҡытта эшкә байрамға барған һымаҡ барырһың. Һәр кеше яратҡан шөғөлөн бирелеп башҡарһа, ул үҙенә лә килем ала, башҡаларға ла ярҙам итә.***

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Студент сағымда бер кешенең өгөтөнә бирелеп, дин торорға булып киттем. Студент саҡта шулай бит: бер көн һин - материалист, икенсе көн - идеалист, өсөнсөһөндә - нигилист һәм башҡалар. Ауылға ҡайтып, абруйлы бер туғаныма әлеге теләгемде әйткәйнем, ул: "Улым, дин, әлбиттә, гонаһтарҙан арынырға ярҙам итә. Ә һин йәшһең, сафһың. Һин алама ғәҙәттәрҙән, дин әйтмешләй, гонаһтарҙан ситтәрәк йөрө. Шул саҡта күңелең дә тыныслыҡ табыр", - тигәйне. Бөгөнгө һөйләшеү, ниңәлер, шул кәңәште хәтергә төшөрҙө. Үҙебеҙҙең тәртибебеҙҙе теҙгенләй алһаҡ, шул етмәйме икән? Әйтәйек, айыҡ тормош башлаһаҡ... Ни тиһәң дә, ҡунаҡтарыбыҙ әйтеүенсә, күпселек енәйәттәр эскелек арҡаһында килеп сыға бит. Был һөйләшеүҙән алған тағы бер һабаҡ: теге йәки был тормош мәсьәләһенә яуап эҙләгәндә, адвокаттарға мөрәжәғәт итергә кәрәклеген дә "мыйыҡҡа уранык".**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**Бөтә донъяла билдәле Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүселәренә ҡарап, тамашасыға рухи көс, дәрт-дарман өләшеүсе талант эйәһе булыу өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк икән, тип уйланмаған кеше һирәктер. Билдәле бейеү коллективында эшләүсе бейеүсе, "Байыҡ" телевизион конкурсының жюри ағзаһы Миләүшә Хәйбуллинаны "Ижадхана"ға әңгәмәгә саҡырғанда ошо һорауыбыҙға ла яуап алырға өмөтләндек.**

# БЕЙЕҮСЕ БУЛЫП ТЫУАЛАР…

### Әсәйемдең хыялын атҡарҙым…

Бейеүсе оҫталығы тыумыштан биреләме, тигән һорауҙы бик йыш ишетергә тура килә. Минеңсә, һис шикһеҙ, бейеүсе булып тыуаларҙыр. Әсәйем Баймаҡ ҡалаһының "Ирәндек" ансамблендә бейегән, үҙ ваҡытында бөгөн мин эшләп йөрөгән Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә эшләргә бик теләгән. Әммә ул осорҙа конкурс бөгөнгөгә ҡарағанда бик юғары һәм ҡатмарлы булған. Бөгөн дә ансамбль составында сығыш яһау өсөн ҙур тырышлыҡ кәрәк, конкурс та шулай уҡ юғары кимәлдә үтә. Минә әсәйемдән: "Ҡыҙым, һин ҙурайғас, Ф.Ғәскәров ансамблендә бейерһең, минең хыялдарымды тормошҡа ашырырһың", - тигән һүҙҙәре ярҙам иткәндер, моғайын. Бала саҡта әсәйем һалған бейеүҙәрҙе башҡарҙым, ете йәшем тулғас, Ғ. Сөләймәнов исемендәге балалар сәнғәт мәктәбенең хореография бүлегенә уҡырға барҙым. Ә атайым, үҙе хәрби кеше булараҡ, бәләкәс ҡыҙын спецназда хеҙмәт итеүсе хәрби итеп күргән. Әле лә иҫемдә, ул мине һыбай йөрөргә өйрәтте, йыш ҡына малайҙар менән һуғыштыра торғайны. Хатта һуғыш тураһында фильмдар, Джеки Чандың киноларын бергәләп ҡарай инек. "Тормош бик ҡатмарлы, киләсәктә нимә булыры билдәһеҙ, үҙеңде яҡларға өйрән", - тип өйрәтте ул. Атайымдың шулай кеҫәлә итеп тәрбиәләргә тырышыуы артабан тормошомда бик кәрәк булды. Баш ҡалағы Р. Нуриев исемендәге хореография училищеһына уҡырға килгәс тә ҡаты дисциплинаға еңел күнектем. Уҡырға килгәндә физик әҙерлегем тейешле кимәлдә түгел ине, етмәһә, бөтә балалар ҙа рус телендә аралаша. Ә мин сей башҡорт, русса әллә ни һөйләшә лә белмәйем. Уҡыусылар күп булғас, уҡытыусыларыбыҙ бөтәһенең дә исемен иҫендә ҡалдырып та бөтә алмағандыр инде. Һәр беребеҙгә ҡушаматтар тағып бөттөләр. Минә "башҡорт" тигән ҡушамат йәбеште. Кеше бөтә нәмәгә лә күнегә, дүрт йыл һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Сығарылыш уҡыусылары ҡуйған йомғаҡлау концертын Башҡортостандың төрлө ҡалаларынан, күрше өлкәләрҙән ансамбль етәкселәре килеп ҡараны һәм мине Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблгә эшкә саҡырҙылар. Бала сағымдағы хыялым шулай тормошҡа ашты, бында эшләүемә һигеҙенсе йыл.

### Их, рәхәт йәшәйһегеҙ!

Концерт ҡарарға килгән ҡайһы бер тамашасылар сәхнәлә йәшәп йөрөгән бейеүселәрҙе күреп, беҙҙең матур тормошҡа көнләшкәндәрен яҡшы беләм. "Их, һеҙ рәхәт йәшәйһегеҙ! Матур кейенеп, бейеп кенә йөрөйһөгөҙ, төрлө илдәргә сәйәхәт итәһегеҙ, күпме кеше менән аралашаһығыҙ, аҡсағыҙ ҙа күптер", - тип еҫәрәләр. Тамаша залында ултырыусыларҙа шундай хыялдар тыуһын өсөн профессиональ бейеүселәргә бик күп эшләргә тура килә. Төрлө милләттәр бейеүҙәрендә төрлө хәрәкәттәр яһала, тимәк, кеше тәненең төрлө мускулдары ҡыбырлай. Беҙ был бейеүҙәрҙе башҡарыу өсөн даими рәүештә көҙгөбеҙҙең һәр өлөшөнә, бармаҡ остарына тиклем махсус күнекмәләр яһайбыҙ. Мәҫәлән, классик бейеүҙәрҙе башҡарыу өсөн көн һайын мотлаҡ дүрт сәғәт быуындарҙы йылытабыҙ. Репертуар киң, бейеүҙәрҙең һәр береһен онотмаҫ өсөн ҡабатлап тороу кәрәк. Сәхнәлә 16 кеше бер төрлө хәрәкәт итергә, бер линия тоторға, йылмайырға тейеш. Шәп итеп өйрәнелгән саҡта ла эргәңдә торған коллегаңды күҙ ҡыры менән генә күреп, уның кеүек темпта эшләргә кәрәк. Ниндәй бейеү булыуға ҡарап, партнерҙар алмашынып тора, бер иш кейенгән егеттәр араһынан был номерҙа кем һинең менән парлашып бейергә тейеш булыуын тойомлау мотлаҡ. Беҙҙең ансамблдә бейеүселәргә ҡуйылған төп талап - ролгә инә белеү. Ролгә инеп, беҙ бейеүгә һалынған тарихты, хәл-ваҡиғаны тамашасыға "һөйләйбеҙ". Шуға күрә, башҡорт халыҡ бейеүҙәрен башҡарыу өсөн башҡорт халыҡ ижадын, тарихын, мәҙәниәтен яҡшы белеү мөһим. Тамашасының күңелендә шул "Их!" тигән хыял-тойғоно уята алаһың икән, көн һайын сәғәт иртәнгә ундан кискә бишкә тиклем бер туҡтауһыҙ бейеүҙең ауырлығын тоймайһың. Тамашасы рухланып, дәртләнеп ҡайтһа, уның менән беҙҙең "диалог" килеп сыҡҡан, аңлашҡанбыҙ, тимәк.

### Яңғыҙ бейеү өсөн көслө характер кәрәк

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә яңғыҙ бейеүҙәр башҡарыу кимәленә күтәрелергә теләгән кешенең мотлаҡ үҙенә нығ булырға тейеш, көслө характер кәрәк. Яңғыҙ бейеүҙәрҙе башҡарыусы - ул оҫта бейеүсе лә, коллективта яҡшы иптәш тә. Ансамблдә төрлө быуын кешеләре эшләй, уларҙың һәр береһе менән уртаҡ тел табыу зарур. Әйткән һүҙендә тора белеү, маҡсат итеп ҡуйылған талаптарҙы үтәрлек көс таба алыу, һәр урында уйлап эш итеү һәм һүҙенде үлсәп һөйләү ҙә ҙур коллективта эшләүселәргә кәрәкле сифаттар. Ә коллективыбыҙ бик татыу, төрлө мажаралар һәм ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы, күп кенә ауырлыҡтарҙы-еңеллектәрҙе бергә кисерергә тура килә. Үҙебеҙ ҙә тик тормайбыҙ, шаяртыуға урын һәр ваҡыт табыла. Озайлы гастролдәрҙең иң һуңғы концертын "йәшел" тип атайбыҙ. Был "йәшел" концерт барышында егеттәр йәшел төҫтә мыйыҡ, ҡыҙҙар йәшел һипкелдәр төшөрөп сыҡһынмы, бейеүҙәр барышында берәй көлкөлө элемент өҫтәп ебәрһенме - тамашасыларға артыҡ һиҙҙермәй генә үҙебеҙҙең күңелде күтәреп алабыҙ.

### Башҡорт бейеүе тураһында

Халыҡ йәшәһен, уның мәҙәниәте быуаттар араһында онотолоп ҡалмаһын өсөн ул тыуҙырған бейеүҙәрҙең юғалмауы шарт. Бейеүҙә халыҡтың йәшәү рәүеше, рухи ҡиммәттәре, холоҡ-фиғеле - барыһы ла сағылыш таба. Бигерәк тә сит ил тамашасыһы алдында башҡорт халыҡ бейеүен бейегәндә быларҙың барыһын да дөрөҫ һынландырырға тырышам. Башҡорт халыҡ бейеүҙәрен башҡарғанда беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙҙарына хас сифаттарҙы, уларҙың матурлығын, нәҙәкәтлеген, оялсанлығын, саялығын, шаянлығын тамашасыға күрһәтеү - минең маҡсатым. Бер үк бейеүҙе ҡабатлай торғас, күп хәрәкәттәрҙе автоматик рәүештә эшләрлек кимәлгә еткереп, ныҡлап өйрәнәһең. Ләкин техник яҡтан нисек кенә дөрөҫ башҡарма, күңелеңде һалып бейемәһәң, тамашасы һиңә ышанмай. Уның менән бәйләнеш булмаһа, үҙеңә лә ҡыйын, сөнки улар һинең энергияңды һурып ултыра. Бәйләнеш булдырғанда үҙ-ара энергиялар



менән алмашаһың. Шуның өсөн мин сәхнәгә сығырҙан алда һәр ваҡыт үҙемде берәй әкиәттә хис иткән кеүек ролгә инәм. Үҙ эшенә шулай саҡ ҡына ижади ҡараһаң, профессионал яҡтан артабан үҫергә, оҫталығыңды арттырыуға ла этәргес була, ҡыҙығы ла бөтмәй.

Минең өсөн тағы бер шундай һөнәри үҫеш сығанағы - ул "Байыҡ" телевизион конкурсы. Бәйгелә ҡатнашыусылар халыҡсанлығы менән алдыра, уларға ҡарап профессиональ бейеүсе үҙенә бик күп файҙалы тәжрибә туплай ала. Һәр сығышты иғтибар менән ҡарап, анализлап, бейеүсе образды дөрөҫ итеп бирә алдымы, ҡайһы урында ниндәй һыҙаты оҡшаны - барыһын да артабан үҙ тәжрибәмдә ҡулланыу өсөн күңел ҡумтаһына һала барам. "Байыҡ" телевизион конкурсы балаларҙа башҡорт халыҡ бейеүҙәренә һөйөү тәрбиәләргә, рух һалырға ярҙам итә ул. Замана балалары самауыр, батмус, милли кейемдәр, ырыуҙар, боронғо башҡорттарҙың көнкүреше ниндәй булыуы тураһында мәғлүмәт ала.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә төрлө халыҡтарҙың бейеүҙәрен башҡарабыҙ. Башҡорт бейеүҙәрен икенсе милләттәрҙең күренекле бейеүселәре бейеп тә, башҡорт рухын тулыһынса сағылдыра алмаған осраҡтарҙы беләм. Хатта данлыҡлы Моисеев ансамбленең ҡыҙҙары ла беҙҙең "Ете ҡыҙ" бейеүен башҡорт һылыуҙары кеүек башҡара алмай. Улар башҡорт кешеһенең күңел кисерештәрен, рухын аңлап етмәйҙер. Шуның өсөн, донъя халыҡтары бейеүҙәрен башҡарғанда беҙ камил хәрәкәтләнеүҙән тыш, уларҙың һәр береһенең тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен, характерын, йәшәйешен һәм тәрбиәһен тулыһынса өйрәнеүҙе лә мотлаҡ талап итеп алабыҙ. ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары үтеү уңайынан ҡырғыҙ, ҡытай, һинд хореографтары беҙгә бейеү һалды. Уларҙан өйрәнеп, тағы ла камиллашып ҡалдыҡ.

Башҡорт мәҙәниәте менән сит илдәрҙә бик ҡыҙыҡһыналар, концерт тамамланғас, бейеүҙә нимә сағылған, теге йәки был хәрәкәт нимә аңлатыуы тураһында килеп һорашалар. Башҡорт бейеүе үҙе бер башҡа бит ул, егеттәребеҙ, мәҫәлән, Кавказ халыҡтары кеүек төрлө техника күрһәтеп, ҡысҡырып бейемәй. Бүре, бөркөттө һынландыралар, төрлө образдарҙы сағылдырғанда ла олпат, тыныс, ғорур, ерҙәренең аҫаба хужалары булыуын күрһәтеп, киң күкрәктәрен киреп, ирәүәнләп баҫып йөрөйҙәр. Шуға күрә, ҡурай моңона яй ғына, йомшаҡ баҫып бейейһегеҙ, һеҙгә күңелһеҙ түгелме, тип тә аптыраусылар бар. Бейеүҙең уңышлы-уңышһыҙ булыуы уны башҡарыусы бейеүселәрҙән генә түгел, хореографтарҙың эшенән дә килә. Бейеүселәр балсыҡ кеүек, хореограф нисек теләй, шулай әүәләй. Хореограф бейеүҙең һүрәтен күрә белә. Мин "Әс-сәләм" этник төркөмөндә хореограф булып эшләһәм дә, әлегә был һөнәрҙең барлыҡ нескәлектәрен камил беләм, тип һанамайым. Камиллашырға ла камиллашырға кәрәк, сөнки хореографтарҙың фекерләү рәүеше икенсе төрлө. Быға юғары белемде режиссура буйынса алыуым ярҙам итә.

### Маҡсатым - халҡыма хеҙмәт итеү

Бала саҡта минең турала китаптарҙан уҡыһалар ине, тип хыяллана торғайным. Ә хәҙер эшләгән эшем халҡыма файҙа килтерһен, тип теләйем. Быны шулай ваҡыт үтеү менән кешенең ҡиммәттәре үҙгәрә икән. Интернет селтәрендә төрлө кәрәкмәгән мәғлүмәттәрҙе ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барған йәштәр ҙә киләсәктә файҙалы, рухын байыта торған нәмәләргә иғтибар итә башлар. Был осраҡта, башҡорт халҡының мәҙәниәте, бейеү сәнғәте тураһында мәғлүмәттәр етерлек булырға тейеш. Шуға күрә, киләсәктә башҡорт халыҡ бейеүен өйрәнергә теләүселәр өсөн видео-яҙма рәүешендә дәрестәр төшөргөм килә. Уны ҡарап, теләгән һәр кем үҙаллы башҡортса бейергә өйрәнә аласаҡ. Юғиһә, үҙебеҙҙең бейеү көйөн ҡуйһаң, ир-егеттәр, бейей белмәйбеҙ, тип, ситтә оялып тороуына шаһит булғаным бар.

Йәштәрҙә рухи тәрбиә юҡ, милли үҙаңын уятырға кәрәк, тиҙәр. Тик бала саҡтан тәрбиәләнмәгәс, бөгөндән башлап мин һеҙҙе рухлы итәм, тип кенә кешене үҙгәртеп булмайҙыр ул. Кеше тыуған йортонда ата-әсәһенән өлгө алып үҫә, уны ғүмер буйы оҙатып йөрөйәсәк характеры ла шул осорҙа формалаша, бүтәндәргә ҡарата мөнәсәбәте лә ғаиләлә алған тәрбиәнән килә. Йәштәр рухһыҙ, тәртипһеҙ икән, ололарға үҙҙәрен нисек тотоуы тураһында уйланырға кәрәк. Беҙҙә төрлөсә тыйып, ололарға ҡарата ихтирамлы булырға өйрәтеп тәрбиәләнеләр. Бөгөн балаларға бөтә нәмәне рөхсәт итәләр, һорағанын һатып алалар, компьютерҙа ла үҙе теләгәнсә уйнай. Улар үҫкәс тә сиктәрҙе белмәйәсәк. Китап уҡытып, лекция һөйләп кенә кеше күңеленә рух һалып булмай. Һәр кем үҙе күңеле аша үткәреп, үҙ асылына ҡайтырға тейеш. Шулай ҙа, бер ни тиклем этәргес булһын тип, БР-ҙың халыҡ артисы Риф Ғәбитов менән башҡорт халыҡ бейеүҙәренең һәр береһенең килеп сығышы, ундағы хәрәкәттәр нимә аңлатыуы йәһәтенән тасуирлаған китап яҙыу буйынса эш башланыҡ. Башҡорт халыҡ бейеүе киләсәк быуындарға үҙгәртелмәй барып етергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер аҡыл эйәһенең: "Яратҡан шөғөлөңдө аҡса табыу сығанағына әйләндер, шул саҡта бер тапҡыр ҙа үҙеңде ыҙалатып эшкә йөрөргә кәрәкмәҫ", - тигән кәңәше барыһына ла мәғлүм. Әммә Миләүшә Әхмәткәрим ҡыҙы кеүек буй етмәҫлек бала саҡ хыялдарын тормошҡа ашыра алған шәхестәр күп түгел. Уларҙан өлгө алған осраҡта, яратҡан эшең үҙеңә күңел тыныслығы, халҡыңа таныулыҡ килтерер. Ә кеше өсөн ошо ике шарттың үтәлеүенән дә мөһим нәмә юҡтыр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨЛӨҮ...
## ауыртыуҙы баҫа

■ Гениаль кешеләр һәр ваҡыт хис-тойғоларын күрһәтеп бара, тип иҫәпләй белгестәр. Шәхесте характерлаусы 5 сифат араһында хәҙер ошо төшөнсә лә бар. Ҡалған сифаттар - асыҡлыҡ, намыҫлылыҡ, экстраверсия, йәғни, кешенең тышҡы донъяға асыҡ булыуы, башҡаларға юл биреү һәләтенең гениаллеккә бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, ә хис-тойғолар ташып тороу менән гениаллек бер-берене менән бәйле. Бындай кешеләрҙең тормошо еңелдән түгел, ти ғалимдар, улар көн һайын тотош хистәр ҡойоно: кәрәгенән артыҡ һөйөү, ҡурҡыу, өмөтһөҙлөк, көнләшеү тойғолары кисерә. Уларҙың был ҡылығы кешенең бай хыялдары һәм баш мейеһен үҙенә буйһондора алмауы менән бәйле. Ғалимдар был "хәүефле кнопканы" тапҡан, ул ҡурҡыу һәм хәүеф реакцияларын ғына түгел, ә ижади дәрт өсөн дә яуап бирә.

■ Селфи - үҙ-үҙеңде фотоға төшөрөүгә мода бөтөн ер шарын баҫып алды. Был феномен менән ғалимдар ҙа ҡыҙыҡһынған. Улар әйтеүенсә, фотоға ҡарап кешенең шәхесен асыҡларға була. Наньян технология университеты ғалимы Ҡытайҙың 120 кешеһенең фотоһын анализлаған. Улар менән аралашыу мөмкинлеге лә булған. Фотоларҙы һәм һораүҙарға биргән яуаптарҙы сағыштырып, ул шундай һығымталар яһаған. Селфи эшләмәгән йәки үҙҙәре әлеге мәлдә ҡайҙа икәнлеген белдерергә тырышмаған кешеләр яуаплы була. Ыңғай характерлы кешеләр фотоға йылмайып төшә, улар һәр ваҡыт дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында. "Өйрәк иренле" фотолар кешелә психик тайпылыштар барлығы йәки уларҙың иң кәмендә тыумыштан ҡыҫыу, яндырай холоҡло булыуҙары тураһында белдерә, ти ғалим. Эксперттар был тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен ысынға алмаҫҡа саҡыра. Фото мотлаҡ психик тайпылыш тураһында һөйләй алмай. Әммә кешенең бер үк типтағы меңләгән фотоһы ғалимдарҙы шундай уйҙарға этәрә лә инде.

■ Көлөү ғүмерҙе оҙайтып ҡына ҡалмай, ауыртыуҙы ла баҫа икән. Ғалимдар асыҡлауынса, кеше көлгәндә эндорфиндар - тәҙөләшөү буйынса опитаттарға оҡшаған үҙенсәлекле химик берләшмәләр бүленеп сыға. Был матдәләрҙе икенсе төрлө "шатлыҡ гормоны" тип тә йөртәләр. Физик көнекмәләр мәлендә лә ошо уҡ яҡшы кәйеф гормондары бүленә. Ауыртыу - организм өсөн ауыр көсөргәнеш, шуға ла көлөү ауыртыу синдромы мәлендә ашыштырғыһыҙ ярҙамсы булып сыға. Оксфорд университеты ғалимдары билдәләүенсә, көлөү эндорфиндар бүленеп сығыуҙы әүҙемләштереп, ауыртыуҙы баҫа ала. Тик былың өсөн көлөү ихлас булырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бер төркөмөнә - комедиялар, икенсеһенә йөнлектәр, тәбиғәт, хаҡындағы фәнни фильмдар, гольф уйыны буйынса инструкциялар күрһәткәндәр. Кемдәр комедия ҡараған, улар ауыртыуҙы бөтөнләй тиерлек тоймаған. Шуға ла көлөү - ауыртыуҙы баҫа торған тәбиғи сара, ти ғалимдар.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ
## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 5-се һабаҡ: "Кем ысын дуҫ, кем - шешәләш?"

"Дуҫыңдың кем икәнен әйт, һинең кемлегеңде әйтермен!" - тигән әйтем бар. "Дуҫыңды һынар өсөн уны иҫерткәнсе эсереп ҡара", - тип тә әйтәләр. Ә мин былай тип әйтер инем: "Кемдең ысын дуҫ, кемдең шешәләш кенә икәне эсеүеңдә ташлағас күренә". Бәхетиһән, беҙ эскән саҡта ысын дуҫ менән шешәләште айыра белмәйбеҙ икән. Һинең менән бергә эскәндәр, "күңелле донъяның" барлыҡ рәхәтлектәрен һәм михнәттәрен бүлешкәндәр - барыны ла бер туғандар, йәнәһе, дуҫтар.

Мин Шешәбикә менән хушлашҡандан һуң элекке шешәләштәрем өс төркөмгә бүленде. Беренсе төркөм был янылыҡҡа әллә ни әһәмиәт бирмәне: "Ярар, беҙгә күберәк тейә", - тип, киреһенсә, шатланды ғына булһа кәрәк. Икенселәре үҙҙәренең араһында бынамын тигән "коллеганы" юғалтыуға ҡайғырҙы. Сөнки мин улар өсөн яртыға тип аҡса йыйғанда "өсөнсө кеше", ауыр саҡта уларҙы ҡотҡарыусы инем. Улар, үҙҙәре лә аңлап бөтмәҫтән, тағы ла бер йыл һуҙымында, шешә ҡыҫырып, минә килеп йөрөйәсәк әле. Мин улар янында һыу йә сәй эсеп кенә ултырасаҡмын, улар минә эсеүҙең ләззәтен ҡат-ҡат аңлатасаҡ. Уларҙың һөйләгән хәбәрҙәре, тикшергән мәсьәләләре минә бик ҡыҙыҡ һәм бер ҡатлы тойоласаҡ. "Мин дә яңыраҡ ҡына улар менән бергә шулай ваҡ-төйәк хаҡында "мөһим хәбәр" һатып ултырҙыммы икән ни?" - тип, үҙ-үҙемә аптырасаҡмын әле. Ни өсөн тигәндә, эскәндәге һөйләшеүҙә айныҡ кеше күҙлегенән - мәғәнәһеҙлек.

Өсөнсө төркөм был аҙымымды сиктән тыш хәл итеп ҡабул итәсәк, көсләп эсерергә өндәйәсәк. "Эсмәй, әллә кем булып ултырыһың, беҙҙән ҡайһы ерең артыҡ, беҙҙе алкашҡа һанайһыңмы, байырға уйлайһыңмы?" - тип, үҙҙәренең минә ҡарата агрессив мөнәсәбәтен дә күрһәтеп, йоҙроҡ төйнәп, ҡурҡытып маташасаҡ.

Хәҙер инде элекке шешәләштәрем килеп, мине йонсотмай, үҙҙәренсә әйткәндә, "үлеп барғанда" ғына килеп етәләр. Һәр саҡтағыса: "Ошонан төҙәлһәм, бүтән ауыҙыма ла алмайым", - тип ант итәләр. Тәүҙә мин уларҙың хәленә инә торғайным, икенсе тапҡыр килгәндәрендә, биргән анттарын иҫтәренә төшөрәм, намыҫландырам, шунан улар, ғәфү үтенеп, кире китә. Әле килеп, элекке шешәләштәремдең минә юлы һыуынды булһа кәрәк.

Хәҙер инде ысын дуҫтарым тураһында. Башта шуны ла әйтеп китәйем: ысын дуҫтар күп булмай икән. Кемдер, минең дуҫтарым иҫ киткес күп, ти икән, ул яңылыша. Улар бөрөү-икәү, уҙа барһа, өсәү генә була. Минең өсөн дуҫ - теләһә ниндәй осраҡта ла һине алмаштыра алырлыҡ кеше, һинең һыңарың. Мин "йәшел йылан" йоғонтоһонан ҡотолғас та, элекке шешәләштәремдең барыһын да айыҡлыҡҡа өндәргә тотондом, үҙемсә аңлатыу һабаҡтары үткәрҙем. Тырышлығым бушҡа китмәне, уларҙың араһынан өсәүһен айырып ала алдым. Хәҙер инде мин уларҙы ысын дуҫтарым тип атай алам.

Исмәғзәм менән беҙ студент йылдарында дуҫлаштыҡ. Ятаҡтың бер бүлмәһендә йәшәнек, йәшлегебеҙҙең күңелле мәлдәрен уртаҡлаштыҡ һәм, әйтергә кәрәк, бергә эсергә өйрәндек. Һыранан башланыҡ та, айлап-яйлап ҡатырағына күстек. Эсеүҙе ташлап, яңы тормош башлайбыҙ, тигән ынтылыштарыбыҙ ҙа булманы түгел, булды. Иң тәүҙә бүлмәлә йыйылып киткән буш шешәләрҙе тапшырабыҙ ҙа, көн күргән мөйөшөбөҙҙө ҡырып-йышып таҙартабыҙ. Аҙаҡ мунсаға барып, сафланып ҡайтабыҙ. Эсеү тураһындағы фекерҙе ситкә ҡыуыу өсөн спорт кейемдәре кейеп, Ағиҙелдең аръяғына йүгерәбеҙ. Тирләп-бешеп, арып-талып бүлмәгә килеп ауабыҙ. Хатта бер саҡ бокс секцияһына ла йөрөп алдыҡ. Ниәт-маҡсатыбыҙ изге булһа ла, ихтыярыбыҙ тиҙ һына ине. Аҙна-ун көн түҙгәндән һуң, күпереп торған һалҡын һыра беҙҙе барыбер үҙенә кире ҡарата килде.

Ул йылдарҙа, иҫләйһегеҙҙер, ҡаланың теге йәки был мөйөшөндә һыра һатыу киоскылары теҙелеп ултыра ине. Иртә таңдан энергә тиклем улар янында өс литрлыҡ банка тотҡан ир-аттар, этешә-төртөшә, темеҫкенә торғайны. Улар араһында Исмәғзәм менән мин дә бар инек. Икебеҙгә көн һуҙымында барлығы 40 литр һыра һемереп, рекорд ҡуйғаныбыҙ ҙа булды.

Ни өсөн беҙ ул йылдарҙа, үҙебеҙсә әйткәндә, "яңы тормош" башлай алмағанбыҙ? Беҙгә ихтыяр көсө етмәгән, тип әйтеү бер яҡлы ғына булыр ине. Хәҙер инде шундай һығымталарға киләм: кеше тота килеп, ҡапыл: "Мин шулай булайым әле", тип, үҙлегенән үҙгәрә алмай. Әҙәм балаһын тәүбәгә килтерерлек, хатта үҙеңдә яҙмышын үҙгәртерҙәй көс табырлыҡ ғәҙәттән тыш ваҡиға кәрәк икән. Мин 1-се һабаҡта уҡ был турала әйтеп киткәйнем, эйе, "Хоҙай кешене өс тапҡыр иҫкәртә".

Икенсе яҡтан, ул саҡта беҙ барыбыҙ ҙа, шул иҫәптән Исмәғзәм менән мин дә, романтиктар инек. Беҙҙе ул ваҡытта, мәктәптә лә, юғары уҡыу йортонда ла, матур киләсәк һағымында, коммунизм иллюзияһында тәрбиәләнеләр. Ә беҙгә бит тәбиғәттән бөтөнләй башҡаса ҡеүәт-ҡөҙрәт һалынған. Аҡланырға теләмәйем, ләкин беҙ, моғайын, йән яныуыбыҙҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй, үҙ-үҙебеҙҙе бойомға ашыра алмай, эскәнбеҙҙер, тигән уйҙар ҙа башҡа килеп ҡуя. Быны башҡаса нисек аңлатырға? Сөнки беҙҙең ҡанда араҡының "А" хәрефе лә булмаған. Исмәғзәмдең дә, минең дә олатай-ҡартатайҙарыбыҙ бөтөнләй эсмәгән, атайҙарыбыҙҙың да беҙ яралған һәм тыуған осорҙа, илдә карточка системаһы бөтөрөлөп, яңы икмәккә туйған саҡта эске ҡайғыһы булмаған. Ҡыҫҡаһы, ҡаныбыҙ һәр йәһәттән таҙа булған.

Дуҫым Исмәғзәм, бер нисә тапҡыр ынтылып, тәки ҡотолдо был бәләнән. Минә үҙенең ысын дуҫ икәнен иҫбат итте. Гәзиттә минең яҙмаларым барлыҡҡа килгәс, ул да был хаҡта яҙырға тотонды. Һабаҡтарым баҫылып бөткәс, атымды уның урамына туғарам.

Яңыраҡ бер осрашҡаныбыҙҙа Исмәғзәм минә: "Беләһеңме, Әхмәр, беҙ айныҡ аҡыл менән беренсе тапҡыр һөйләшеп ултырабыҙ бит, быға тиклем нимә тураһында хәбәр һатҡанбыҙҙыр, иҫләмәйем...", - тине.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҮҘЕҢДЕ ЙӘЛЛӘЙҺЕҢМЕ?
## Тимәк, һине ярлылыҡ һағалай



**Ниндәй ғәҙәттәребеҙ беҙҙе ярлы булыуға программалай? Ғалимдар асыҡлауынса, ысынлап та, ҡайһы бер ғәҙәттәребеҙ баш мейеһенең физик торошона тәьсир итеп, "ярлы йәшәргә бойора ала" икән. Шуға күрә, етеш йәшәргә теләүселәргә ғалимдар түбәндә килтерелгән ғәҙәттәрҙән арынырға тәҡдим итә.**

● **Үҙеңде йәлләү ғәҙәте.** Ярлы йәшәргә күнегеү үҙеңде үҙең йәлләп, тормошоңа зарланып илауҙан башлана. Кеше бихисап төрлө сәбәптәргә һылтанып, үҙен йәлләп иларға, уңышһыҙлығына хәсрәтләнергә мөмкин. Йә уға Хоҙай Тәғәлә матур тышҡы ҡиәфәт бирмәгән, йә аҡсалы эш юҡ, йә ул теләгән фатир эләкмәгән, йә һауа торошо оҡшамай, йә кибеттә һатыусы үсал күренә. Үҙен үҙе йәлләп, гел генә илап йөрөгән кешенең ҡайғыһын уртаҡлашыуҙан да бүтәндәр тиҙ арала баш тарта. Ундай бахырҡайға, әлбиттә, бергә ҡайғырып, шәфҡәт күрһәтергә була, ләкин ул үҙе лә нимәлер эшләргә тейеш бит. Нисә ҡараһаң да күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, өмөтһөҙлөккә батып йөрөүсенән, ғәҙәттә, барыһы ла ситләшә башлай, ул мыжыуҙан башҡа бер нәмә лә эшләй алмай, шуға хатта дуҫтар осрашыуына ла саҡырмайҙар. Һөҙөмтәлә уның карьера эшләү, ҡыҙыҡлы проектҡа ҡушылып китергә мөмкинлек биргән шәхси бәйләнештәре, төрлө өлкәләрҙә таныштары әҙәйә. Үҙ-үҙеңде йәлләү - эш хаҡы аҙ түләнгән эштә тороп ҡалыу, ҡыҙыҡһыҙ йәшәйештең иң төп сәбәбе.

● **Һәр нәмәне экономиялау,** һыҡмырланыу, аҡсаңды хатта үҙеңдән дә йәлләү ҙә кешене ярлылыҡҡа илтеүсе сәбәп икән. Әгәр ҙә һеҙ магазинға барып инеү менән арзан хаҡҡа һатылған тауарҙар бүлегенә эҙлә-

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Изгелек ҡылыу иман билдәһе түгел әле

Дуҫым шулай тине:

- Ҡара әле, әгәр ҙә һеҙ әйткән ожмах бар икән, мин унда иң беренсе булып инәсәкмен! Тәсбих тотоп, диндар булып йөрөүсе һаҡалтайҙарҙан күпкә диндармын!

- Күпкә диндарһың? Быының менән ни әйтмәксе булаһың?

- Мин һис кемгә зыян-зәүрат килтермәйем - урламайым, үлтермәйем, ришүәт алмайым, дошманлашмайым, яуызлыҡ ҡылмайым, яҡшылыҡ-изгелек кенә теләп йөрөйөм, саф намыҫ менән йоҡлап китәм һәм уянам. Минең йәшәү девизым: "Һәр кемгә изгелек ҡылыу!" Был дин түгелме ни? Һеҙ бит "Дин - ул кешеләр араһындағы яҡшы мөнәсәбәт", тиһегеҙ.

- Быларҙың башҡа атамаһы бар. Уның исеме - әҙәплелек, әхлаҡ. Был иһә диндең талабы, әммә иман йә дин түгел. Һин дин талаптарын диндең үҙе тип ҡабул иткәнһең. Диндең мәғәнәһе берәү генә - Алланы танып белеү. Һинә Раббыңды Бөйөк итеп, Кисереүсе, Яҡын кешең итеп, Яуап биреүсе, Күреүсе, Ишетеүсе итеп танырға кәрәк. Уға баш эйеп, тоғро һәм тыйнаҡ итеп мөрәжәғәт итеүең кәрәк, хужаһын хөрмәтләп, ололаған ҡолдай бул. Раббың менән һинең араларға бөтә ошо мөнәсәбәттәр дин була ла инде.

Әммә һинең үҙ туғандарың (диндәштәрең) менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуың - ул, асылда, диндең талабы, һәм Алла менән мөнәсәбәт тә фәҡәт унан алда танылған булырға тейеш.

Алланы яратҡан кеше Ул булдырған һәр нәмәне яратыр һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыр. Әммә яҡты донъянан башҡа бер ни ҙә күрмәй, дуҫтары менән яҡшы мөнәсәбәттә булыу менән сикләнһәң, тимәк, һин - иманһыҙ, нисек кенә тырышһаң да - динһеҙһең.

Кешеләргә изгелекле булыуың - һинең аҡылың, сәйәсәтең, холҡоң билдәһе, тик иман билдәһе түгел. Һин кешеләрҙе үҙ мәнфәғәтең өсөн файҙаланаһың, йәғни һинең былай ҡылаңыуың - донъяуи тормошто файҙаланыу сараһы. Ә был иманһыҙлыҡтың иң юғары нөктәһе.

- Ышан, мин ҡайһы ваҡыт әйләнә-тирәбеҙҙә ниндәйҙер көс барлығын һиҙәм...

- Көс?

- Эйе, ғаләмдә ниндәйҙер билдәһеҙ көс бар. Мин уның булыуына ышанам.

- Һин ул көстө нисек күҙаллайһың? Ул ишетә, күрәме, уйлаймы, күҙәтәме, беҙгә китаптар индерәме, беҙҙе һаҡлай, йүнәлеш бирәме? Бәйғәмбәрҙәр ебәрәме, уларҙың ялбарыуына яуап бирәме?

- Мин уны күберәк бер ҡатлы итеп күрәм. Уға бөйөклөк хас түгел.

- Был осраҡта ул ғаләм менән идара итеүсе, хужаһыҙ һүҡыр электромагнит көсө. Бөйөк көскә һин биргән билдәләмә шулмы?

- Бәлки...

- Раббыңды насар күҙ алдына килтерәһең. Ул һинә күҙ биргән, ә һин Уны һуҡыр тип уйлайһың. Ул һинә аң биргән, ә һин Уны аҡылһыҙ тип уйлайһың. Һин юғары әхлаҡлы кеше булһаң да, ысын мәғәнәһендә аллаһыҙ, динһеҙһең. Ҡиәмәт көнөндә һинең бөтә яҡшы эшең - ғәмәлдәрең тотош кеүек таралып бөтәсәк.

- Артыҡ ҡырыҫлыҡ бит был!

- Был ғәҙел! Һин барыһын да үҙеңән-үҙе барлыҡҡа килгән тип уйлайһың. Һин үҙеңде Яратыусыға (Барлыҡҡа килтереүсегә) ҡарата ғәҙел ҡарамайһың. Һин Уның Үҙен һәм Уның йомартлығын инҡар итәһең. Мөьмин әхлағы менән иманһыҙ әхлағы араһындағы айырма бына шул инде.

Әгәр улар икеһе лә шифахана төҙөһәләр, иманһыҙ: "Мин был ҙур шифахананы кешеләр өсөн төҙөнөм", - тиәсәк, ә иманлы кеше: "Был шифахананы төҙөү сәбәбе булыу бәхетен биргән өсөн Аллаға дан!" - тиәсәк. Уларҙың һүҙҙәре араһында ниндәй ҙур айырма. Икенсеһе бөтөн данды Дан эйәһенә биргән һәм үҙенә аралашсы урынын ғына ҡалдырған һәм быны өсөн дә Аллаға рәхмәт әйтә. Ғорурлыҡ менән итәғәтлелек, тәкәбберлек менән тәҡүәлек, ҡәҙрәтлек менән тыйнаҡлыҡ араһында айырма ҙур.

- Һеҙ нимә доға ҡылаһығыҙ? Доғаларығыҙҙа мин бер ниндәй мәғәнә күрмәйем. Был хәрәкәттәр нимәгә, буйһоноуығыҙҙы нимә телдән генә белдермәйһегеҙ?

- Намаҙҙың хикмәте, маҡсаты - беҙҙәге ялған ғорурлыҡты селпәрәмә килтереү, беҙ быны эйелеп, маңлай менән ергә тейеп, "иң бөйөк Раббымды телем һәм күңелем менән сафландырам" тигән һүҙҙәрҙе әйтеп эшләйбеҙ. Ниһайәт, һин Алла ҡаршыһында үҙ урыныңды белдең, һин иң түбән - Ул бөйөк, һин ер өҫтөндәге ер, Ул - күктәр өҫтөндәге ирек эйәһе.

Хәрәкәттәргә килгәндә, йөрәгеңдә ни булһа, шул тышҡа сыға. Әгәр буйһоноу ысын икән, ул теҙ сүгеү йә эйелеү аша сыға, ә ялған булһа - телдән алыҫ китмәй.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

һегеҙ, йә коллегаларығыҙ һеҙгә ҡарағанда әҙ эшләһә лә күберәк эш хаҡы ала, тип һанаһағыҙ, береһенә лә үтескә аҡса биреп тормаһағыҙ, официанттарға сәйлек бирмәһәгеҙ - ярлы йәшәү рәүешенә хас ғәҙәттәр һеҙҙә күптән бар.

Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, артыҡ экономиялау ул һаҡсыл булыуҙы аңлатмай, был кешенең килеме һәм сығымдары араһында баланс булмауына ишара яһай. Сөнки үҙаллы кеше һәр әйбер, башҡаларҙың эше өсөн тейешле хаҡ түләргә әҙер.

● **Бөтә нәмәне аҡса менән үлсәп ҡарарға** ғәҙәтләнгән кешеләр ҙә байып китә алмай. Тик ярлы булырға программаланған кешеләр генә, бәхет - ул әллә нисә нулдәр менән билдәләнгән күп эш хаҡы алыу, тип иҫәпләй. Улар өсөн ҡиммәтле кейемең, йыһазлы айырым йортоң, шәп автомобилең юҡ икән, тимәк, һин бәхетле түгел, тормоштоң ҡыуаныстарын да татымағанһың. Социологтар иҫбатлауынса, "Бәхет өсөн һеҙгә нимә кәрәк?" тигән һорауға яуап биргәндә тик ярлы кешеләр генә матди байлыҡтарҙы теҙеп һанап әйтә башлай. Юғары килем алған кешеләр тәү сиратта тоғро мөхәббәт һәм дуҫлыҡ кәрәк булыуы тураһында һөйләй. Улар байлыҡты банкта һаҡланған аҡса, тип тә һанамай. Байҙар - аҡса эшләй белгән, юҡ ҡына урында яңы бизнес асып эшләгән кешеләр, тигән фекерҙә улар. Ысын мәғәнәһендә кешенең уңышлы булыуы кеҫәһендәге алтын күләменә бәйле түгел.

● **Аҡса бөтә башлаһа, паникаға бирелеү.** Эшегеҙҙә ҡыҫҡартыуға эләгеүҙән ҡурҡыу ҙа һеҙгә ярлылыҡ программаһы һалынғанлығы тураһында һөйләүсе ғәҙәт. Байҙар аҡсаға бөгөн бар, иртәгә юҡ, тигән ҡараштта була.

● **Эшләгән аҡсағыҙҙың күбеһен туҙҙырыу** холҡо ла ярлы йәшәргә әҙәргән алама ғәҙәттәрҙең береһе. Ике эштә эшләп тә аҡса еткерә алмаһағыҙ, нимәнелер үҙгәртергә кәрәк! Әгәр ҙә кеше бер кредит икенсеһенән нимә менән айырылыуын аңламаһа, ул байый алмаясаҡ.

● **Үҙенә оҡшамаған эш менән шөғөлләнгән** кеше лә байып китә алмай. Психологтар әйтеүенсә, күңеленә ятмаған эштә эшләүселәр уңышһыҙлыҡ кисерергә һәм ярлы тормошта йәшәргә күнеккән. Был ғәҙәттән арыныу өсөн кемгәлер кәрәк эште эшләмәй, үҙенә оҡшаған һәм ҡәнәғәтләнеү тойғоһо биргән шөғөлдө һайлау мөһим. Тик шул осраҡта ғына оло еңеүҙәргә өлгәшергә була.

● **Туғандарҙан алыҫлашыу,** ситләшеү ҙә кешегә файҙа килтермәй. Ғәҙәттә, үҙ ғаиләһенән ситләшеүселәрҙән даланһыҙ кешеләр үҫеп етә. "Нишләп мин ҡәйнәмә шылтыратырға тейеш? Уға кәрәк булғас, үҙе шылтыратһын", "Мөнир менән Мәстүрә - колхозсы бит, уларҙы саҡырмайыҡ, кеше нимә уйлар?", "Атай, иҫләйһеңме, һин мине урамда бөтәһе алдында әрләгәйнең? Эйе, миңә дүрт кенә йәш булһа ла, онотмағанмын..." тигәнгә оҡшаш һүҙҙәрҙе яҡындарығыҙ һеҙҙән йыш ишетһә, тимәк, һеҙ ярлы. Сөнки бөтә бай кешеләр өсөн дә ғаилә - йәшәү мәғәнәһе, иң ҡиммәтле нәмә. Башҡа өлкәләрҙә уңышһыҙлыҡтарға осрап, көрсөк кисергәндә лә ғаиләлә терәк һәм йыуаныс табырға мөмкин.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Беренсе сер

### Инаныуҙар иректе сикләй

Нимә ул инаныу? Ул - беҙ хаҡ тип аңлы һәм аңһыҙ рәүештә ҡабул иткән мәғлүмәт. Үкенескә күрә, инаныуҙар бик йыш иркебеҙҙе сикләп, хаҡ ғилемгә юлды яба. Ялған күҙаллауҙар фильтры Хәҡиҡәтте һөҙөп ала һәм беҙ бары тик нимә күрергә теләйбеҙ - шуны ғына күреп, башҡа бөтөн нәмәне инҡар итәбеҙ.

Хәҡиҡәт бер ваҡытта ла "тиҫкәре"ләргә асылмай. Моғайын, һеҙ шундай кешеләрҙе беләһегеҙҙер. Улар һәр саҡ "дәлилдәр" таба, үҙҙәренең күҙаллауынан ситкә сыҡҡан бөтөн нәмәне хәүеф тип ҡабул итә. Барлыҡ яңы, яҡты һәм ғәҙәти булмаған нәмәгә улар "насар" йәки "ҡабул итеп булмаҫтай" тигән ярлыҡ таға. Барлыҡ иҫке, традицион һәм күпселеккә тәшкил иткән нәмә - яҡшы. Улар, Хәҡиҡәттең ниндәй генә ауыр булмаһын - изгелек, ә яуызлыҡ, беҙгә ни тиклем ныҡ оҡшаһа ла, барыбер яуызлыҡ булыуын аңларға теләмәй. Үҙҙәренең инаныуын яҡлау өсөн бындай кешеләр үҙе тирәһендә ныҡлы ҡәлғә төҙөй, "төҙөүсенән" үҙҙәре ҡабул итә алмаған Хәҡиҡәтте ҡырҡып төшөрөп тора.

"Тиҫкәре"ләр фекерләү ҡеүәһен үҙгәртеү тураһында уйламай һәм был уны наҙан яһай. Ул бары тик үҙе төҙөгән диуарҙар артында булған нәмәләрҙе генә ҡабул итә, ә был уға диуар тышындағы сикһеҙ Хәҡиҡәтте өйрәнергә мөмкинлек бирмәй. Бындай кешеләр Хәҡиҡәт һәр саҡ уны сикләү өсөн төҙөлгән теләһә ниндәй конструкциянан ҙурыраҡ икәнлеген танымай. Инанғанлыҡ һәм хәҡиҡәт синонимдар түгел, уларҙы бутарға ла ярамай. Инанғанлыҡҡа ҡапма-ҡаршы булып, Хәҡиҡәт бер ваҡытта ла сикләнмәй. Ул яңы белемгә саҡыра. Һәр кеше Хәҡиҡәтте мөмкин тиклем тәрәнерәк аңларға тырышырға тейеш. "Тиҫкәре"ләр үҙенә барлыҡ һорауҙарға ла яуаптар мәғлүм, тип уйлай. Хәҡиҡәткә ышаныусы кеше белә: һәр ваҡыт аңламаған нимәләр ҡала - шуға күрә һәр саҡ мәғрифәткә ынтылырға кәрәк.

### Ялған дәлилдәр менән сикләнгәнбеҙ

Әгәр тормошобоҙҙо тамырынан үҙгәртергә теләйбеҙ икән, тәү сиратта, беҙҙе әҙәрләкләгән проблемаларҙың сәбәбен асыҡларға тейешбеҙ. Ул хаталы факттарға ышыкланған. Хаталы факттар - беҙ дөрөҫ тип һанаған, әммә ысынбарлыҡта улай булмаған дәлилдәр. Улар, ҡағиҙә буларак, теләгәндә ысынбарлыҡ тип ҡабул итеүгә нигеҙләнә, әммә ысынбарлыҡты боҙоп, үҙ-үҙенде алдауға килтерә. Беҙ бөтөн нәмәне ысынбарлыҡтағыса түгел, ә үҙебеҙ теләгәнсә күрергә теләйбеҙ, донъяға инаныуҙар призмаһы аша ҡарап, ысынбарлыҡҡа күҙ йомабыҙ.

Беҙ тормошто бары тик үҙебеҙ үҙгәрә алған тиклем дәрәжәлә генә үҙгәртә алабыҙ. Үҙенде бары тик хаталы дәлилдәрҙе танып ҡына үҙгәртергә мөмкин. Күпселек проблемалар тормошҡа ашмаған хыялдарҙы көтөүҙән барлыҡҡа килә. Күңел ҡайтыу - беҙҙеңсә, донъяның нисек булырға һәм, үҙебеҙ күҙаллағанса, үҙебеҙҙең кем булырға тейешлегебеҙҙе идеаллаштырыуҙың хаталы эҙемтәһе. Был күренеш ысынбарлыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтеү буларак билдәле. Эмерсон "Беҙ - көн дауамында уйлаған уйҙарыбыҙ һөҙөмтәһе", тигән. Әле һеҙҙең менән интеллектуаль, эмоциональ, физик һәм рухи планда нимә бара, барыһы ла аңығыҙҙа барған процестарҙың һөҙөмтәһе. Һеҙ интеллектуаль һәм физик бөтөн нәмәне аңығыҙҙың бөгөнгө кимәленә нигеҙләнеп ҡабул итәһегеҙ йәки кире ҡағаһығыҙ.

Ғәмәлдәге аң кимәле белем, мөхит, ғаилә тормошо, балалар тәьҫораты, уңыштар, уңышһыҙлыҡтар һәм дини инаныуҙар менән билдәләнә. Тиҙҙән үҙегеҙ ҙә быға хаҡ тип йөрөгән нәмәләрҙең ысынбарлыҡта улай булмауын күрерһегеҙ. Был һеҙҙең ысынбарлығығыҙҙың ныҡлы нигеҙен тәшкил иткән инаныуҙарға ҡағыла. Ошо китапта бирелгән материалдар менән танышып, бөгөнгө кимәлегеҙҙән сығып, ундағы мәғлүмәтте ҡабул итеүегеҙҙе йәки кире ҡағыуығыҙҙы асыҡларһығыҙ. Ә ул, үкенескә күрә, дөрөҫ кенә түгел, яңылыш та булыуы мөмкин.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 26 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Палач". Детективный сериал. 1-2 серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Леди удача" (12+).
03.00 Новости.
03.05 "Леди удача". Худ. фильм.
03.35 "Вегас" (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Попутчик". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Королева красоты". 1-3-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Золото для партии. Хлопковое дело", "Следственный эксперимент. Тайна следа". Док. фильмы (12+).
02.20 "Человек-приманка". Сериал (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Талисман любви" (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бай" (12+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Дознание" (16+).**
**23.30 "И грянул гром" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Карагул" (12+).**

## 27 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Палач". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Палач". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "Плохая медицина". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.30 "Вегас". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Дед Мороз в гневе". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Королева красоты". 4-я и 5-я серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
00.35 "Мутанты среди нас", "За гранью. Под власть ГМО" (12+).
02.00 "Человек-приманка". Комедийный сериал (12+).
03.00 "Золото инков".
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками" (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Убить Боно". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Под знаком Марса" (12+).**

## 28 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Палач". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Палач". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика".
01.30, 03.05 "Кафе де Флор". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.55 "Вегас". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 11.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Кровь и кетчуп". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Королева красоты". 6-я и 7-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент"
00.35 "Арабская весна. Игры престолов" (16+).
02.30 "Человек-приманка". Сериал (12+).
03.30 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 23.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Встречный ветер" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Выходили бабки замуж" (12+).**

## 29 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Палач". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Палач". 7-я и 8-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Неуправляемый". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.20 "Вегас". Сериал (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Гибельный код" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Королева красоты". 8-я и 9-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Запрещенная история" (12+).
02.30 "Человек-приманка". Сериал (12+).
03.25 "Неоконченная война Анатолия Папанова".
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Историческая среда" (6+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "О чем молчат девушки". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бандабика и Еранса Сэсэн" (12+).**

## 30 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Палач". Детективный сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.45 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.30 "Фарго". Новый сезон". Детективный сериал (16+).
01.30 "Хью Лори играет блюз" (12+).
02.30 "Похищенный сын. История Тиффани Рубин". Худ. фильм (16+).
04.15 "Модный приговор".
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Чистосердечное признание". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Королева красоты". 10-я-12-я, заключительная, серии (12+).
23.50 "Жена генерала". Мелодраматический сериал. 4 серии (16+).
03.40 "Человек-приманка". Сериал (12+).
04.50 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Малышка на миллион". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Белые ночи Акмуллы" (12+).**

## 31 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Холодное лето пятьдесят третьего..." Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Чулпан Хаматова. Звезда рассвета" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 "Голос". Муз. конкурс (12+).
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "Вместе с дельфинами".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?" Финал осенней серии игр.
00.20 "Копы в юбках". Комедия (16+).
02.30 "Эволюция Борна". Худ. фильм (16+).
05.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Алмазы для Марии". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.30 "Правила движения" (12+).
10.15 "Это моя мама" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Валаам. Остров спасения".
12.20 "Была тебе любимая". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Была тебе любимая". Продолжение сериала (16+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Цена любви". Мелодрама (16+).
00.50 "Любовь по расписанию". Мелодрама (12+).
02.50 "Кто поедет в Трускавец?" Худ. фильм.
04.20 "Горячая десятка" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.50 "Пропавший рысенок" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (6+).**
**17.00 "Остаюсь собой" (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Особо опасна". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Дуга с колокольчиками" (12+).**

## 1 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.45, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.50 "По улицам комод водили". Худ. фильм.
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Вместе с дельфинами".
14.00 "Три плюс два". "Версия курортного романа" (12+).
15.10 "Три плюс два". Комедия.
17.10 "Время покажет". Темы недели (16+).
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод. Сеанс третий". Криминальный сериал (18+).
01.00 "Уолл-стрит: деньги не спят". Худ. фильм (16+).
03.30 "Мужское/Женское" (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.35 "Осенний марафон". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Каминный гость". Худ. фильм (12+).
13.10 "Евгений Петросян. "Улыбка длиною в жизнь". К 70-летию артиста. Фильм 4 (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Евгений Петросян. "Улыбка длиною в жизнь". К 70-летию артиста. Фильм 4. Продолжение (16+).
16.00 "Синяя Птица". Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов.
18.00 "Простая девчонка". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.55 "Вернуть Веру". Спортивная драма (12+).
02.45 "Валаам. Остров спасения".
03.40 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 Мультфильмы (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Золотой фонд Башкирского ТВ" (12+).**
**15.45 "Весело живем" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Кьоджинские перепалки" (12+).**
**18.45 "Любимое дело" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "Полезные новости" (12+).**
**19.45 "История признания" (12+).**
**20.00 "Сила закона - в его исполнении" (12+).**
**20.15 "Вопрос + Ответ = Портрет" (6+).**
**21.00 "Это мы!" (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2015" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "В пути". Худ. фильм (16+).**
**02.00 "Свидание с джазом" (12+).**

*АФАРИН!*

# ТАШ КҮТӘРЕП ҠАРА, ЕГЕТ!

## Ҡатай йәштәре ҡоронда иҫке йолалар атҡарылды



**Республиканың төрлө төбәктәрендә башҡорт милли йолаларына нигеҙләнгән фольклор байрамдары, йыйындар үтеп тора. Шундай иң сағыу ҡорҙарҙың береһе "Ҡатай ырыуы йәштәре байрамы" Белорет районының Бирҙеғол ауылында уҙғарылды.**

Быйыл өсөнсө тапҡыр үткән "Ҡатай ырыуы йәштәре" байрамына республиканың төрлө төбәктәренән һәм күрше өлкәләрҙән ҡунаҡтар йыйылды. Уларҙы "Илмәш" фольклор ансамбле йыр, бейеү, милли ризыҡтар менән ҡаршыланы. Йыйын майҙанында ҡоролған "Ҡоҙғон-Әхмәр-Әҙекәй" һәм "Көньяҡ Урал ҡурсаулығы" тирмәләре күркәм биҙәлеше, эсе тулы башҡорт милли аш-һыуҙары менән һоҡландырҙы. Ҡатай ырыуының ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны, һыуы, тауы төшөрөлгән төрлө баннерҙар майҙанға тағы ла сағыу-ыраҡ төҫ бирҙе.

Йыйынды асып, БР Мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев яҡташтарын, саҡырылған ҡунаҡтарҙы, йәштәрҙе, балаларҙы ихлас тәбрикләне, байрамды ойоштороуҙа әүҙемлек күрһәткән кешеләргә дипломдар тапшырҙы.

Йыйында Белорет районының "Елмерҙәк" этно-фольклор төркөмө тәүге тапҡыр үҙ ижады менән таныштырҙы. Йәштәр бик моңло көй-йырҙар яңғыратты, Рәнис Алтынбаев менән берлектә думбырала теттереп халыҡ көйҙәренән теҙмә бүләк иттеләр. Рәил Өмөтбаев, Илнур Рамаҙанов, Янбулат Мөхәмәтдинов һәм "Тархан" төркөмө етәксеһе Ринат Ғайсин, Ҡыйғы районы ҡатайҙарының йыр-инструменталь ансамбле, Аҙналы, Әҙекәй һәм Ҡаҙыш ауылдары төркөмө, Шығай ауылы мәҙәниәт йорто, Мәхмүт ауылы клубы, Магнитогорск ҡалаһы, Бирҙеғол ауылынан оҫта йырсылар һәм бейеүселәр рухлы сығыштары менән тамашасыларҙың күңелен күтәрҙе.

Ырыуҙаштар йыйында бер-береһе менән аралашыуҙан да бик ҡәнәғәт ҡалды. Улар төрлө спорт уйындарында, ярыштарҙа ихлас ҡатнашты. Ҡатай ырыуы йәштәре йыйынында ошо ырыу кешеләренең боронғо йола һәм ярыштары яйлап тергеҙелә бара. Быйыл ир-егеттәр өсөн "Таш күтәреү" йолаһына таянып, 6 килограмдан башлап 90 килограмға тиклемге ауыр таштарҙы күтәреү буйынса ярыш үткәрелде. Ярышта Учалы, Бөрйән, Белорет районы батырҙары көс һынашты. 90 килограмлыҡ ташты Бирҙеғол ауылы уҙамандары Айнур Мәхмүтов, Радис Йосопов, Инйәр һәм Ҡаҫмаҡты ауылы егеттәре генә күтәрә алды. Ауыр-ауыр таштарҙы күтәреүсе бәһлеүәндәр менән ярышҡа сығырға ҡурҡмаған Бирҙеғол ҡыҙы Юлиә Байдәүләтова халыҡты хайран иттерҙе.

Йәштәр өсөн волейбол уйындары, елле-елле сыбыҡтарға ултырып, "ат сабыштырыу" һәм башҡа күңелле уйындар ойошторолдо. Кискеһен иһә моңло, дәртле йырҙарҙан торған дискотека үткәрелде. Рәил Өмөтбаев менән бәләкәй йырсы, оҫта ҡурайсы Аслан Алтынбаев "Ҡатай гимны"н башҡарғанда бөтәһе лә күтәрмәләп, ҡушылып бейене. Байрам һуңында ҡаршыла урынлашҡан тауҙан салют бирелде. Была ниндәй оло ҡор йыйылды ҡатай ерендә. IV "Ҡатай ырыуы йәштәре" ҡорон үткәреү бурысын Әҙекәй ауыл биләмәһе ихлас ҡабул итеп алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡатай ырыуы йәштәре йыйыны - ул халыҡты уйын-көлкө, йыр-моң менән әүрәтеү өсөн генә түгел, ә йәштәрҙе ата-бабаларыбыҙҙың боронғо йолаларына ылыҡтырыу, тамырҙарыбыҙҙы, рухиәтебеҙҙе иҫебеҙҙән сығармау ниәтендә ойошторолған сара. Был ҡор ырыуҙаштарға бер-береһен танырға, туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек ептәрен нығытырға ла ярҙам итә. Башҡа ырыуҙар ҙа күтәрмәләп алыр былдай ҡорҙарҙы, тип ышанғы килә.**

**Тәнзилә ЙОМАДИЛОВА,**
**Бирҙеғол ауылының "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһы ағзаһы.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 октябрь "Ике төш"** (М. Багаев), драма
**25 октябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия
**27 октябрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А. Островский), драма
**28 октябрь "Аҡ пароход"** (С. Айытматов), драма
**29 октябрь "Ғүмер үҙе - серле, моңло..."** Гөлфиә Юнысованың ижад кисәһе
**30 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00
**27 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари) мажара. Башлана 10.00, 12.00
**27 октябрь "Тоҡ эсендәге бесәй йәки Башкирская пленница"** (М. Кәрим), спектакль-концерт
**28 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтер йомғаҡтарын һүткәндә. Башлана 15.00, 19.00
**29 октябрь "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 октябрь "Гонаһлы зыялдарым"** (Ф. Ғәлимов), комедия
**29 октябрь "Бер ауыл балаһы мин"** Ришат Хәмитовтың юбилей кисәһе
**30 октябрь "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбай), комедия

*ХОККЕЙ*

# ХОККЕЙ БАЙРАМЫ...

## Өфөгә ҡайтты

**Илдең бөтә боҙ майҙандарында ла алыш ҡыҙғандан-ҡыҙа. КХЛ-дың һәр хоккей командаһы етерлек мәрәйҙәр йыйып, таблицаның тәүге баҫҡыстарын яуларға ынтыла. Өфө уйынсылары ла һәр матчта оҫта уйын күрһәтеүен дауам итә. Уларҙың еңеүгә булған ынтылыштары ыңғай һөҙөмтә бирә.**

Шулай күрше өлкәнең "Металлург" хоккей командаһы менән осрашыу ҙа юлаевсыларҙың ҙур еңеүе менән тамамланды. Хужалар ҡапҡаһы алдында ҡойон уйнатҡан Игорь Захаркин командаһы беренсе осорҙа уҡ дилбегәне үҙ ҡулына алды һәм уйын аҙағына тиклем теҙгенде ысҡындырманы. Иҫәп юлаевсылар файҙаһына - 4:6.

Өфөләге уйындар теҙмәһен "Салауат Юлаев" үҙенең принципиаль ярышташы - "Аҡ Барс" командаһы менән башланы. Ағымдағы уйын миҙгелендә командалар икенсе тапҡыр осрашты һәм икәүһендә лә юлаевсылар уңышҡа өлгәште. Ҡаҙанда уҙған тәүге матчта Өфө командаһы буллит буйынса 3:4 иҫәбе менән еңһә, Өфөләге осрашыу ҙа, хужалар файҙаһына, 2:1 иҫәбе менән тамамланды.

Риганың "Динамо"һы менән уйынға, йәрәхәтләнеү сәбәпле, юлаевсыларҙың ҡайһы бер көслө уйынсылары сыҡмаһа ла, Өфө командаһы ҡунаҡтарҙы ҡыйрата алды. Ҡаты, ҡайһы саҡта хатта аяуһыҙ матч барышында "Салауат Юлаев" ҡунаҡтар ҡапҡаһына 3 гол оҙатты. "Динамо" иһә тик бер мәрәй менән генә "хушһынды".

Шулай итеп, юлаевсыларҙың баш тренеры Игорь Захаркиндың: "Ниһайәт, Өфөгә хоккей байрамы ҡайтты", тиеүен йөпләргә генә ҡала.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Октябрь - Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (13) дүшәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 27 (14) шишәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 16:19 | 17:49 | 19:19 |
| 28 (15) шаршамбы | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 29 (16) кесе йома | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 16:15 | 17:45 | 19:15 |
| 30 (17) йома | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:12 | 17:42 | 19:12 |
| 31 (18) шәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:10 | 17:40 | 19:10 |
| 1 (19) йәкшәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 16:08 | 17:38 | 19:08 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ЙОМАРТЛЫҠ - ИМАН ЕМЕШЕ

"Үҙҙәре мохтажлыҡ кисереп торған хәлдә лә, мосолмандар кешенән бер нәмә лә өмөт итмәй. Аллаһтың ризалығы өсөн булһын тип, ризығынан фәкирҙәргә, етемдәргә өлөш сығара, тип өйрәтә изге Ҡөрьән. Шуның өсөн Аллаһ уларҙы бәлә-ҡазанан ҡотҡарыр, йөҙөнә - нур, күңеленә ҡыуаныс бирер".

**"Әл-Инсан" ("Кеше") сүрәһенән.**

Мохтажлығы булған һәр кемгә ярҙам итеү, йомартлыҡ - имандың татлы бер емеше, мәрхәмәт-шәфҡәттең гүзәл сағылышы. Әммә был малды уңға-һулға таратырға, исраф итергә мөмкин тигәнде аңлатмай. Аллаһ биргәндең ҡәҙерен ебәрмәйенсә, уртаҡлаша белеү кәрәк.

"Һаранланма ла, йомарт булам тип, саманан да үтеп китмә, - тип өйрәтә Ҡөрьән. - Шулай икән, бәндәләр ҙә хупламаҫ, үҙең дә борсолоуҙан ҡотола алмаҫһың".

**"Әл-Исра" ("Төндәге күсереү") сүрәһенән.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# МӨНӘЖӘТТӘРЕБЕҘ...

## рухи асылыбыҙға ҡайта

**Ошо көндәрҙә Сибай ҡалаһы "Ағинәйҙәр ҡоро" Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы менән берлектә Мөнәжәт башҡарыусыларҙың асыҡ ҡала конкурсын үткәрҙе. Быйыл өсөнсө тапҡыр ойошторолған сарала Өфөнән "Әс-сәләм" төркөмө, Сибай ҡалаһы, Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы, Хәйбулла, Белорет, Күгәрсен, Йылайыр районлары, Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка районлары ағинәйҙәр ҡорҙары ағзалары сығыш яһаны. Сарала шулай уҡ РФ-һы Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы етәксеһе Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина ла ҡатнашты.**



*Ойоштороусылар Силәбе ағинәйҙәре менән.*

Сергей Рыбаков аңлатмалары буйынса, мөнәжәт - ул "Аллаға өндәшеү, дини йөкмәткеле шиғырҙар". Эйе, башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадының бер төрө булған мөнәжәт - уникаль күренеш ул. Аллаға өндәшеү, Уға таяныу, Унан ярҙам һорау, Уның ғына һине һаҡлай алыуына ышаныу, Уның алдына барып баҫҡас, эшләгән эшең, ҡылған ҡылыҡтарың өсөн нимә тип яуап биреүеңде уйлау - башлыса бына ошондай йөкмәтке сағыла уларҙа. Бөгөн башҡорт ауыҙ-тел ижадының был төрө аҙ өйрәнелгән. Бының сәбәбе билдәле: Совет осоронда динебеҙгә бәйле барлыҡ йола-ҡағиҙәләребеҙҙе лә онотторҙолар бит. Мөнәжәттәр ҙә шуға бәйле юҡҡа сыға яҙҙы. Әммә ул заманда ла тәҙрәгә ҡорған ҡороп булһа ла намаҙ уҡыуҙан, мөнәжәттәр әйтеүҙән туҡтамаҡаны оло быуын...

Бына шул хәтерҙән бөтөнләй үк юйылып бөтмәгән хазинабыҙҙы ынйы бөртөгөләй йыйыу, рухи асылыбыҙға ҡайтарыу өсөн янып йөрөй ҙә инде Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, билдәле сәсәниә Асия Ғәйнуллина етәкселегендәге Сибай "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары. Республика кимәлендә булһынмы, район-ҡала кимәлендәме, ғәҙәттә, конкурс, бәйгеләргә әҙерләнәләр, күнекмәләр, репетициялар яһайҙар, әллә күпме аҡса түгәләр. Ә бына Сибай ағинәйҙәре өс йыл рәттән ошо Мөнәжәт башҡарыусыларҙың асыҡ ҡала бәйгеһе үткәреүҙең төп йөгөн үҙ иңдәренә ала: сараға саҡырып, райондарға ҡағыҙын да ебәрә, ҡулдарынан килгәнсә бүләктәрен дә әҙерләй, килгән ҡунаҡтарҙы һыйлап ебәрер өсөн ризыҡтарын да бешерә. Был юлы ла ойоштороу йәһәтенән дә, халҡыбыҙҙың боронғо дини фольклорын башҡарыу оҫталығы буйынса ла бына шундай фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтте улар. Оҫталыҡ, тигәндән, быйылғы бәйгегә килгән мөнәжәтселәрҙең был йәһәттән ниндәйҙер яңы үҫеш баҫҡысына күтәрелеүе шатландырҙы. Тимәк, Сибайҙа үткәрелгән сара мөнәжәтебеҙгә иғтибар артыуға булышлыҡ иткән. Хатта мөнәжәтебеҙ сыңы йәштәребеҙ күңеленә лә үтеп инә башланы. Башҡорт дәүләт филармонияһының "Әс-сәләм" этник төркөмө, мәҫәлән, Асия Солтан ҡыҙынан мөнәжәттәр өйрәнеп, уны республика сәхнәләрендә башҡарып йөрөй хәҙер. Был юлы Сибай сәхнәһендә лә сығыш яһаны улар. Уларға конкурстың беренсе дәрәжә дипломы тапшырылды. Әйткәндәй, үткән мөнәжәт конкурстарында Учалы ҡалаһынан да йәштәр ҡатнашҡайны. Бик матур булды сығыштары. "Был сығышығыҙҙы йәштәр ҡабул итәме?"- тигән һорауға улар: "Йәштәр әле мөнәжәт тыңларға өлгөрөп етмәгән", - тигәйне. Ә "Әс-сәләм"дең мең кешелек тамашасы алдында ошо репертуары менән сығыш яһауына шаһит булған бар. Һәр ерҙә алҡыштарға күмәләр уларҙы. Тимәк... Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина ошо мөнәжәт конкурсынан һуң Сибайҙа һәм Баймаҡта үткән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең республика кәңәшмәһенда шулай тип сығыш яһағайны: "Патриотлыҡ - тыуған ергә, илгә генә түгел, дингә лә һөйөү ул. Юғиһә, һуңғы ваҡытта төрлө секта вәкилдәре беҙҙең традицион динебеҙҙе ҡыҫырыҡлай, быға юл ҡуйырға ярамай. Балаларыбыҙ индустарҙың мантраларын ятлағансы, үҙебеҙҙең мөнәжәттәрҙе өйрәнһен..." Хаҡ һүҙҙәр, һәм беҙ, ысынлап та, киләсәктә мөнәжәт, нәсихәттәрҙә әйтелгән өгөттө, аҡылды йәштәр күңеленә лә күсерергә тейешбеҙ.

"Мөъмин мосолман ғилемде ҡайҙа юғалтты, шунан табып алырға тейеш, тиелгән Ҡөрьәндә. Унда ғилем тураһында 170 урында яҙылған, ғилем йәннәттең юлы, бишектән ләхеткә тиклем ғилем алыу талап ителә, тиелгән. Беҙ әйткән бер мөнәжәттә шундай юлдар бар: "Бер ғәмәлһеҙ үлеп китһәк, Ҡиәмәттә нишләрбеҙ?" Ғәмәл ҡылырға тейешбеҙ, бының өсөн белемле булырға кәрәк. Ошоларҙың барыһы ла Ислам диненең төп хәҙистәре, улар еңел һәм аңлайышлы формала мөнәжәт итеп йырланған, ошоға беҙ үҙебеҙҙең шәкерттәрҙе, мөслим-мөслимәләрҙе өйрәтергә тырышабыҙ", - тигәйне Учалы ҡалаһының Зәйнулла ишан мәсете мөғәллимәһе Зәкиә Әделйәнова. Эйе, өйрәнеү юлындабыҙ. Беҙ рухын юғалтҡан түгел, ә эпосы булған, мөнәжәт һәм нәсихәттәр әйткән халыҡ икәнебеҙҙе раҫлау юлындабыҙ. Ошондай ишара яңғыраны конкурста ҡатнашҡан 6 йәшлек балаларҙан башлап, 80 йәшлек инәйҙәргә тиклемге мөнәжәтселәр сығышында. Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ һәм Сосновка ағинәйҙәре бигерәк тә һоҡландырҙы: улар башҡорт халҡының боронғо дини фольклорының иң сағыу өлгөләрен тәҡдим итте һәм конкурстың Гран-приһына лайыҡ булды. Зөһрә Йыһанур ҡыҙы силәбеләргә үҙенең махсус призын бүләк итте.

Әйткәндәй, ағинәйҙәр йыйындарында РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, Өфөнән "Башбланкиздат" етәксеһе Гөлсәсәк Әлибаева ихлас ҡатнаша һәм улар үткәргән сараларҙы ойоштороуға матди ярҙам күрһәтә. Был юлы Гөлсәсәк Ҡадир ҡыҙы әлеге конкурстың да бағыусыһы булды һәм бар ҡатнашыусыларҙы матур бүләктәре менән ҡыуандырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мөнәжәт башҡарыусыларҙың былтыр үткән конкурсында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов шулай тигәйне: "Үтеп китеп барған поездың һуңғы вагонына һикереп менеп өлгөрҙөк, йәмәғәт! Киләсәктә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты БР Мәҙәниәт һәм Мәғариф министрлыҡтары менән берлектә мөнәжәт тигән ынйы-гәүһәрҙәрҙе йыйып, йәш быуынға алып барып еткереү сараһын күреүҙе, конкурсты республика кимәленә сығарыуҙы төп бурысыбыҙ итеп алырға тейешбеҙ". Ошо уҡ фекерҙе быйыл Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина ла ҡабатланы: "Бындай конкурстар Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Ағинәйҙәр ҡоро кимәлендә генә үтергә тейеш түгел, уларҙың матур башланғысын беҙҙең Мәҙәниәт министрлығы дауам итергә тейеш". Эйе, ағинәйҙәрҙең башланғысын күтәрмәләп, киләһе йыл был конкурсты Мәҙәниәт министрлығы үҙ ҡанаты аҫтына алыр тип ышанабыҙ.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТЫҢ БАРҘА ЕЛЕП ҠАЛ,

## яҡшыларҙы күреп ҡал!

Ҡайһы ырыу көслө -ханды шул ҡуя, ҡайһы ырыу үсле - ҡанды шул ҡоя.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән берәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын, тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Суфый-уҡытыусы һәр дәресендә бер риүәйәт һөйләй торған булған, әммә бер ваҡытта ла уларҙың мәғәнәһен аңлатмаған.**

**- Хөрмәтле остазыбыҙ, - тип мөрәжәғәт иткән бер шәкерте, - һин беҙгә матур риүәйәттәр һөйләйһең, әммә уларҙың мәғәнәһен аңлатмайһың...**

**- Ғәфү үтенәм, - тигән Уҡытыусы. - Ғәйебемде аҡлау өсөн мин һине хөрмә емеше менән һыйларға теләйем...**

**Шәкерт шатланып киткән һәм "Рәхмәт, Уҡытыусым" , - тип яуаплаған.**

**- Мин һиңә ашата торған хөрмәнең тышын үҙем таҙартып бирәйем, - тигән Уҡытыусы. Шәкерт бынаһына ла шатланыуын белдергән. Уҡытыусының:**

**- Теләйһеңме, ашауға уңайлы булһын өсөн мин хөрмәне ваҡ киҫәктәргә турап бирәм? - тиеүенә, шәкерт:**

**- Мин улай һеҙҙең йомартлыҡтан файҙаланырға теләмәйем, Уҡытыусым, - тип уңайһыҙланыуын белдергән.**

**- Юҡ, мин бит һиңә быны үҙем тәҡдим итәм. Һине шатландырғым килгәндән генә эшләйем быны. Теләйһеңме, мин һиңә ул хөрмәне сәйнәп тә бирәм? - тигән тағы ла Уҡытыусы.**

**- Юҡ, мин һинең быны эшләүеңде теләмәйем! - тип ҡысҡырып ебәргән тамам аптырауға ҡалған шәкерт. Уҡытыусы бер аҙ тын ҡалып торған һәм:**

**- Әгәр ҙә мин һеҙгә һөйләгән һәр бер риүәйәттең мәғәнәһен аңлатһам, емеште бына шулай сәйнәп биреүгә тиң булыр ине, - тигән..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4859